ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

22-28 октябрь (карасай) 2022

№42 (1032)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Әрмеләгеләргә...**

һүҙ тейҙермәйек



3,6

**Бер ҡаҙанда...**

ике әртис башы



8-9

**Ҡатыны менән аралашҡанда...**

ир-егет үтәргә тейешле 30 ҡағиҙә



10

**Торатау мираҫы**



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*"Тормош - ул кофе, ә эш, аҡса, карьера - ул сынаяҡ. Ул бары тик йәшәйеште дауам итеүсе инструмент ҡына. Сынаяҡтың ниндәй булыуы беҙҙең йәшәйештең мәғәнәһен һәм асылын билдәләмәй. Ҡайһы саҡта сынаяҡҡа ғына иғтибар итеп, беҙ кофеның тәме менән ләззәтләнергә лә онотабыҙ. Иң яҡшы нәмәләргә эйә булғандар түгел, шул нәмәләрҙән иң яҡшыны айыра белгәндәр бәхетле..."*

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ОШО ТӨҘӨЛӨШТӘР...

## Өфө биҙәгенә әйләнәсәк

**Тормош насар, тип зарланырға ятаһаҡ та, баш ҡаланың ҡайһы районын ғына алып ҡарама - төҙөлөш гөрләй. Өфө ҙурайып ҡына ҡалмай, матурлана, күркәмләнә, даны алыҫтарға тарала.**

• Дан тигәндәй, ҡалабыҙҙың "Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" исеменә лайыҡ булыуы бер кемгә лә сер түгел. Ә был исем бирелгәс, мегаполиста мотлаҡ ошо хаҡта белдереп торған стела булырға тейеш. Тауыш биреү һөҙөмтәһе менән "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһының Ағиҙел йылғаһының төҙөкләндерелгән ярында, ҡалаға ингән автомобиль күперҙәренән уң яҡта урынлашырға тейешлеге асыҡланғайны. Ниһайәт, 4 ноябрҙә баш ҡалала тағы ла бер тарихи урындың асылыуына шаһит буласаҡбыҙ.

• Шулай уҡ Ленин районында баш ҡаланың иң ҙур поликлиникаһы төҙөлөшө тамамланыу алдында тора. 9-сы ҡала дауаханаһының һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы Затон биҫтәһенең Әхмәтов, Осоусылар һәм Сержант Пашков урамдары араһындағы кварталда урынлашасаҡ. Ул сменаһына 900 кешене ҡабул итә аласаҡ. Поликлиникала физиотерапия, стоматология бүлектәре, функциональ диагностикалау һәм эндоскопия кабинеттары, инфекцион блок, клиник-диагностикалау лабораторияһы урынлашасаҡ.

• Мәғлүм булыуынса, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығына төҙөлөргә тейешле объекттар исемлегенә Ҡурсаҡ театры ла ингәйне. Әлеге ваҡытта объектта реконструкция эштәре бара һәм бер ыңғайҙан бина эргәһендәге "Әкиәт" скверы ла **(һүрәттә)** яңы һулыш аласаҡ. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында унда үҙенсәлекле стилләштерелгән ҡәлғә төҙөлә һәм балалар китаптары геройҙарының ағас скульптуралары урын ала. Бөгөн ошо ҡаласыҡты һаҡлап ҡалыу ғына түгел, уны яңы элементтар менән байытыу бурысы тора. Сер итеп кенә әйткәндә, ҡәлғә эргәһендә тауыҡ тәпәйле йорт, Пушкиндың уҡымышлы бесәйе менән Һыуһылыуы, шулай уҡ 33 батыр кеүек әкиәт геройҙары урын аласаҡ. Балаларҙың төрлө йәштә булыуын иҫәпкә алып, сквер зоналарға бүленәсәк, унда тыныс ҡына ял итергә лә, уйын майҙансыҡтарында уйнарға ла мөмкин буласаҡ. Территорияны йәшелләндереүгә, ландшафт дизайнына һәм декоратив яҡтыртыуға ла ҙур иғтибар биреләсәк.

• Ә инде күптән "Өфө Арбаты" тип күрергә хыялланған Ленин урамы Арбатҡа әйләнмәһә лә, төҙөкләндереү эштәре башҡарыла. Быйыл унда Пушкин урамы киҫелешендә эштәр башланып, ул яйлап ҡына "Өфө-Арена" яғына "шыуыша". Ленин һәм Революцион урам сатында Октябрҙең 50 йыллығы тематикаһында реконструкция эшләнәсәк, бынан тыш, ул юл ашаһындағы күрше сквер менән стилистика буйынса бәйләнешле буласаҡ.

• Йәштәр театры алдындағы майҙанға эскәмйәләр ултыртыласаҡ, территория йәшелләндереләсәк. "Башҡортостан" концерт залы алдында "Өфө картаһы" арт-объекты урын аласаҡ. Унда баш ҡаланың тарихи өлөшөнөң барлыҡ мәҙәни үҙәктәре билдәләнә һәм карта Ленин урамы буйындағы тротуарҙан ДКЗ-ның баҫҡыстарына тиклем ҙур урынды алып торасаҡ.

• Октябрь районында иһә "Гагарин" сауҙа-сервис комплексын һәм уның тирә-яғын реконструкциялау планлаштырыла.

• Баш ҡаланың билдәле урындарының береһе - Непейцев дендропаркы. Ул - ҡала һәм республика өсөн уникаль булған ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртылған тәбиғәт һәйкәле. Һуңғы йылдарҙа унда төҙөкләндереү эштәре алып барылды, әммә эшләйһе эштәр ҙә байтаҡ. Был рекреацион зонаны үҫтереү концепцияһы прогулка һәм әүҙем ял өсөн мөмкин ҡәҙәре күберәк шарттар тыуҙырыуҙы күҙаллай. Шуға паркта спорт майҙансығы, воркаут зонаһы, экскурсия һәм сәләмәтлек һуҡмаҡтары булдырыу планлаштырыла. Махсус йыһазландырылған урындарҙа тыныс ҡына тәбиғәт менән аралашыу мөмкинлеге лә буласаҡ. Халыҡҡа уңайлы булһын өсөн төп инеү урынынан тыш, тағы ла өҫтәмә ҡапҡалар, санузел һәм автомобилдәр өсөн парковка урыны эшләнәсәк.

• Дим районында иһә Кустарев күле яры төҙөлөшөнөң икенсе этабы тамамланыу алдында. Яр тулыһынса ҡояш батареялары ярҙамында яҡтыртыласаҡ. Төҙөүселәр тәбиғи ландшафтты боҙмаған һәм ағастарға зыян килтермәгән, шулай уҡ һуҡмаҡтарҙы экологик материалдан - ағастан һалған.

**Һәм был уңайлыҡтар, матурлыҡ - барыһы ла ҡала халҡы өсөн эшләнә. Бары тик булғандың ҡәҙерен белеп, һаҡларға ғына кәрәк.**



12+

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 20 ЙЫЛ



# МӘҒЛҮМӘТ ҺЫУЫҺЫНЫН ҠАНДЫРА

**Мәғлүмәттең кеше тормошонда уйнаған роле ни тиклем ҙур булыуын һәр кем яҡшы аңлай. Шуға күрә ваҡытлы матбуғат, интернет селтәрендә иҫәпһеҙ-һанһыҙ мәғлүмәт диңгеҙендә "йөҙгәндә" уның сифатлы, дөрөҫ, ваҡытында бирелеүе мөһим. Ғөмүмән алғанда, ваҡытлы матбуғат теге йәки был төбәктең, тотош илдең имиджына ыңғай йәки кире йогонто яһаусы сығанаҡ булып тора.**

Бөгөнгө һүҙем республиканың ваҡытлы матбуғатында тотороҡло урын алып торған, төбәктең мәғлүмәти имиджына, һис шикһеҙ, ыңғай йоғонто яһаған "Киске Өфө" тураһында. Гәзит уҡыусы ваҡытлы матбуғаттан нимә көтә? Берәүҙәр тик сәйәси мәҡәләләр баҫылған гәзиттәрҙе генә уҡый, икенселәргә спорт һәм мәҙәниәт ҡыҙыҡ, өсөнсөләр иһә тарихи мәғлүмәт эҙләй, кемдер хикәйәләр уҡыу өсөн яҙыла һәм башҡалар. "Киске Өфө" гәзит уҡыусыларҙың һәр төрлө ҡыҙыҡһыныуын баҫырҙай, уларҙың мәғлүмәти һыуһынын ҡандырғандай мәҡәләләр биреүе менән ота. Аҙнаһына бер тапҡыр ғына килһә лә, уның йөкмәткелеге, тулылығы һәм мәғлүмәттәренең мөһимлеге "Киске Өфө"нөң күптәрҙең яратып уҡыған баҫмаһына әйләнеүенә булышлыҡ итә. Әйткәндәй, гәзиттең 16 биттән тороуы миңә ҡалһа бик уңайлы, сөнки рәхәтләнеп, бер нисә көнгә бүлә-бүлә уҡырға мөмкин.

Гәзитте тағы ла йөкмәтке яғынан байытыу өсөн баҫма закондарға ҡыҫҡаса күҙәтеү эшләп барһа ине, тигән тәләкте еткергем килә. Законды белмәүебеҙ төрлө ауыр хәлдәргә ҡалдыра, шуға күрә минең тәҡдим гәзит етәкселәге тарафынан күтәрелеп алынһа ине.

"Киске Өфө"нөң төп үҙенсәлеге - уның "Әйт, тиһәгеҙ..." исемле рубрикаһы. Төрлө ваҡиғаларға, хәлдәргә ҡарата төрлө фекерҙәрҙе ишетергә мөмкинлек бирә был рубрика. Әлбиттә, бөтә был фекерҙәр субъектив һәм анығ кешенең фекерен сағылдыра, ләкин уларҙың һәр береһе уйландыра, бәхәстәр тыуҙыра алыуы менән мәртәбәле. Теге йәки был фекерҙе уҡыйһың да, ҡайһы саҡта үҙеңдең уйҙарыңдың бик үк дөрөҫ йүнәлештә булмауын аңлайһың йәки тегеләйбылай таралышҡан уйҙарҙы бер епкә теҙәһең.

Гәзит мәҙәниәткә ҙур иғтибар бүлә. Ошо өлкәлә эшләгән йәштәрҙе лә күтәрә, оло быуын мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре хаҡында ла онотмай. Профессиональ сәхнә әһелдәре менән бер рәттән, халыҡ таланттары тураһында ла яҙғаһыҙ, шәп булыр ине, ә! Республиканың һәр районында, һәр ауыл-ҡасабала төрлө өлкәлә эшләгән, ләкин күнелдәрендә үҙебеҙҙең йыр-моңға һөйөү йөрөткән оҫта башҡарыусылар етерлек. Уларҙы гәзиттә күтәрмәләп алыу урынлы булыр ине, тип уйлайым.

Ғөмүмән алғанда, "Киске Өфө" бөгөнгө заман менән бергә атлаған, төрлө быуын кешеләре өсөн ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бирә алған файҙалы матбуғат сараһы иҫәбендә. Уға артабан да уңыштар теләйем.

**Фәрзәнә СӘЛИМОВА.**

СӘХИФӘНӘН

# БАТШАЛАРҘЫҢ БАШТАРЫНА...

**Элек аят табындарында доға-сүрәләр уҡыған инәйҙәрҙең күп булыуы ғәжәп итә ине мине. Һин уҡы, мин уҡы, тип тип тә ултырмайҙар ине. "Хаҡ Тәғәләмдең ризалығын алмаҡ өсөн, Хаҡ бәйғәмбәребеҙ өммәтендә булмаҡ өсөн", - тип башлаҙар ине бөтәһе лә тиерлек. Шул тиклем бирелеп, аҡыллы, ихлас итеп доға ҡылалар, сүрә-аяттар уҡыйҙар - беҙ, табын тәрбиәләп йөрөгән йәш килендәр, тын да алмай тыңлай инек. Тауыштары менән дә арбайҙар ине улар.**

Минә, Бибес өләстең (Ишей ауылынан) аяттарын тыңлап, ҡуша ятлап, бергә сәхәр эсеп, ауыҙ асып йөрөгән ҡыҙға, аяттарҙың күбеһе күптән таныш. Ә бына аят уҡылып бөткәндән һуң әйткән теләктәре һәр береһенеке үҙенсә, береһе икенсеһен ҡабатламай. Эй рәхәт ине ул теләктәрҙе тыңлауы.

- Уҡыуыбыҙҙың, хәләл кәсебегеҙҙең мәнфәғәтен күрергә, үҫтергән балаларығыҙҙың әүмәтен күрергә насип итһен, кешеләргә шәфәғәтсел булырға яҙһын...

Бик күп матур-матур теләктәр теләй белә ине инәйҙәр. Ә Нәзифә ҡоҙағый (вафатына байтаҡ инде) әйткән ошо һүҙҙәр күнелемә айырыуса уйылып ҡалған:

- Йә Рабби, йә Рабби, батшаларҙың баштарына аҡыл һал - һуғыш тыуҙырмаһындар, бәндәләрең бербереһенең йәндәрен ҡыймаһын, ғәзиз ҡанын ҡоймаһын. Йә Рабби, йә Рабби, батшаларың нәпселәрен тыйһын. Беҙ күрҙек һуғыш ыҙаларын, юҡсыллыҡты, балаларыбыҙға күрергә яҙмаһын...

- Батшаларыңдың баштарына аҡыл бир, беҙ бәндәләреңдең яҙмышы улар ҡулында бит...

Йәш саҡта был ялбарыу сәйер тойола ине миңә. Илдәр, дәүләттәр башлыҡтарын, сәйәсәт дилбегәһен үҙ ҡулдарында тотҡан хакимдар хаҡында һөйләгән икән инәйҙәр. Һуғышты, ул килтергән ҡаза-афәттәрҙе кисергән инәйҙәр ҡалай хаҡлы булған, алдан күрә белгәндәр! Бөгөн үҙем дә ошо ялбарыуҙы доғаларға ҡушып ҡабатлайым:

- Йә Раббым, Хаҡ Тәғәләм, батшаларыбыҙҙың баштарына аҡыл һал...

**Таңһылыу ҠАРАСУРИНА.**
**Баймаҡ районы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТУРА ҺҮҘЛЕЛЕК

Тура һүҙлелек - ул ысынлап та ошо һүҙҙе әйтергә хоҡуғы булғандар сифатылыр. Ә быға хоҡуғы булмағандарҙың тура һүҙе - ул ахмаҡлыҡ тиһәйемме, мәғәнәһеҙлекме? Мәҫәлән, Рәми ағай Ғариповты үтә тура һүҙле булған тип беләбеҙ. Күптән түгел генә донъя ҡуйған Ноғман ағай Мусиндың тура һүҙе һәр саҡ сәпкә тейә ине. Тура һүҙлеләрҙе түрәләрҙең яратып етмәгәнен Рәми ағай, шулай уҡ Ноғман ағай миҫалында раҫлай алабыҙ: Рәми ағайға Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме, башҡа наградаларҙы үҙе донъя ҡуйғандан һуң ғына бирелде, Ноғман ағайҙы иһә өс тапҡыр Салауат Юлаев премияһына тәҡдим итәләр, өсөнсөһендә лә үткәрмәгәс, баһалама комиссияһының бер ағзаһының әсенеүле сығышынан һуң ғына уға премияның... яртыһын бирергә ҡарар итәләр.

Бөгөн шундай хәл дә күҙәтелә: интернет донъяһында тура һүҙ әйтергә бер хоҡуғы булмаған ҡайһы берәүҙәр... әй кемделер әрләй, хурлай, бысраҡҡа батыра. Уларҙың тәнҡит уты төбәлгән кеше йәмғиәткә күпме файҙалы эштәр эшләгән, эшләй, халыҡҡа хеҙмәт итә. Ләкин үҙе бер ни ҡылмаған, нәфрәт утын төбәгән кешенең тырнағына ла тормаған был әҙәм бысраҡ сәсеүҙе дауам итә. Йәнәһе, тураһын әйтә, уйлағанын әйтә. Бына шундай әҙәмдәрҙең иғтибар үҙгәгәндәбеҙ.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

# ИЛДЕ ТАҒЫ ХӘҮЕФ БАҪТЫ

**Дуҫтар, туғандар, кемдең өлөшләтә мобилизацияға саҡырыу алыр йәштәге улдары бар, һеҙҙең хәлдәрҙе нығ аңлайым, үҙем дә кисерҙем ундай хистәрҙе.**

Беҙҙекеләрҙе ваҡытында Афған һуғышына ебәрәләр ине. Ҡотто устарға алып ултырған саҡтар булды. Теләктәремде Аллаһу Тәғәлә ҡабул итте микән, армия хеҙмәтенә Германия Демократик Республикаһына эләкте улдарым. Шатландыҡ шатланыуға, ләкин уларҙың икеһен бергә оҙатҡас, бөтә донъя буш булып ҡалды, тормоштоң йәме китте. Аталары менән бер йыл йүнләп ашамаңыҡ, бер-беребеҙ менән хатта һөйләшмәҫ булдыҡ. Был борсолоу бер йыл үтеп, атайҙары эш буйынса Германияға барып, улдарыбыҙ менән күрешеп ҡайтҡас ҡына үтте. Икенсе йылды үҙем дә путевка менән шул илгә барып ҡайттым.

Әле лә йөрәк урынында түгел, туғандар араһынан Украинаға китеүсе егеттәребеҙ бар. Инде ул балаҡайҙарға еңеүсе булып, имен-аман ғаиләләренә әйләнеп ҡайтырға насип итһен! "Аллаһтан һорағыҙ, илап ялуарығыҙ, "Һорағыҙ, ҡабул итермен", тигән бит",- тим улдарын оҙатҡан таныш-тоноштарға. Теге һуғышта әсәйҙәр доғалар яҙып, уны бетеү итеп тегеп, улдарының кеҫәләренә һалғандар. Доғаларҙың иң яҡшыһын эҙләп ултырырға ла кәрәкмәй, "Колһуаллаһ" барлыҡ осраҡтарҙа ла ярай.

Дошмандан ҡурҡҡанда (ҡотолоу өсөн) уҡыла торған тағы бер доға:

"Аллааһүммә иннәә нәджгәлүкә фии нүхүүриһим үә нәғүүҙү бикә мин шуруурииһим" ("Йә Аллаһ, дөрөҫләктә, беҙ уларға ҡаршы Һинән ярҙам һорайбыҙ һәм уларҙың яуызлығынан Һинә һыйынабыҙ!")

Оҙатыусыға һәр ваҡыт "Сабырлыҡ" сүрәһен уҡып йөрөргә кәңәш итәм, был уның хәлен еңеләйтер. Сабырлыҡ доғаһы: "Үәл ғаср. Иннәл инсәәнә ләфии хуср. Илләлләдинә әәмәнүү үә ғәмилүссаалихәәти үә тәүәәсау бил хәҡҡый үә тәүәәсау биссабр" (Ҡөрьән Кәрим, 103-сө сүрә).

Һуңғы йылдарҙа тормошобоҙ үтә матурланғайны шул, еңеллекте күтәрә алманыҡ, хәйер-саҙаҡаһыҙ йәшәнек, туйып һикереп, күп гонаһтар ҡылдыҡ, боларҙыҡ, шөкөр итмәнек. Эй, Раббыбыҙ, гонаһтарыбыҙҙы кисереп, бәлә-ҡазаһыҙ, ҡайғы-хәсрәтһеҙ йәшәргә насип ит, ил етәкселәренә миһырбанлыҡ һәм айыҡ аҡыл биреп, был мәхшәрҙәрҙе туҡтатыу юлын күрһәт! Доғала булайыҡ!

**Зәйтүнә КӨСӘПОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы махсус хәрби операция уҙған мәлдә артистар ҡатнашлығында ҙур байрамдар үткәреүҙе һәм уға аҡса исраф итеүҙе тыйҙы. Ул шулай уҡ район-ҡала башлыҡтарына Яңы йыл иллюминацияһын яныртыуҙы тыйҙы. "Бер ниндәй ҙә яңы шыршы алмаясаҡһығыҙ, улар һеҙҙә бар. Бер ниндәй ҙә артист кәрәкмәй - теләйһегеҙ икән, гармун алығыҙ ҙа үҙегеҙ йырлағыҙ", - тине республика етәксеһе. Радий Хәбиров белдереүенсә, бынан ары барлыҡ аҡса иҡтисадты үҫтереүгә, социаль өлкәгә, мобилизацияланғандарға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙамға йүнәлтелергә тейеш.

✓БР Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә, килеп тыуған төрлө хәлгә төбәктең тейелмәй торған үҙ шәкәр запасы булырға тейеш, тип билдәләне. "Кулланыуға 90 мең тонна шәкәр китһә лә, 2022 йылда беҙ уны 275 мең тонна етештерәсәкбеҙ. Быйыл беҙ шәкәр сөгөлдөрөн 44 мең гектарҙа сәстек, киләһе йылда 50 мең га итергә ниәтләйбеҙ", - тине вице-премьер, ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров 2022 йыл өсөн Башҡортостандың фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премияларын тапшырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Исемлектә Өфө күҙ ауырыуҙары фәнни-тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре Мөхәррәм Бикбов, Азат Хәлимов, Эмин Усубов, ковид госпиталдәр концепцияһын һәм проектын булдырыусы Андрей Стариков, Марина Петрова, Марсель Мәсәллимов, Артур Рәхмәтуллин һәм Азат Рәхмәтуллин, газ өлкәһе хеҙмәткәрҙәре Шамил Шәрипов, Евгений Семивеличенко, Евгений Марчуков, Павел Романенков, Дмитрий Лобов бар.

✓Рәсәй халҡының ил Президенты Владимир Путинға ышаныс кимәле - 81,1 процент, тип хәбәр итә Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге. Дәүләт башлығы ил сәйәсмәндәренә ышаныс рейтингында ла беренсе урында - 40 процент. Премьер-министр Михаил Мишустиндың һәм хөкүмәттең эше хаҡында һорауға яуап биреүселәрҙең 51,8 проценты һәм 51,9 проценты ыңғай баһалай, тип билдәләне Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге.

✔ *Совет халҡының үҙ армияһына яҡшы мөнәсәбәте, хөкүмәтебеҙҙең сәйәсәтенән дә торғандыр. Барлыҡ кинофильмдар, китаптар, гәзит-журналдар Ер шарын фашизм ҡоллоғонан азат иткән совет һалдатын данлауға көйләнгән ине.*



*КИНӘЙӘ*

**Республика гәзиттәренең береһендә сыҡҡан "Ҡоралды көстәрҙе дискредитациялау нимә менән янай? йәки Фейк хәбәрҙәргә ышанмағыҙ һәм уларҙы таратмағыҙ" тип аталған мәҡәләгә игтибар иттем. Инде күп йылдар отставкалағы хәрби кеше булараҡ, әрмебеҙгә ҡағылышлы шундай мәсьәләләргә бер ваҡытта ла битараф булып ҡала алмайым.**

# ӘРМЕЛӘГЕЛӘРГӘ...

## һүҙ тейҙермәйек



### Хөкүмәтебеҙҙең һөйөклө ҡолдары

Совет Армияһы хаҡында һәр саҡ иң яҡшы фекерҙә булғанғамы, бала сағымдан ғәскәри кеше булырға хыялландым. Бәлки, быға ғаиләбеҙҙәге иң өлкән ағайымдың хәрби училищела уҡып, унан оҙаҡ йылдар офицер булып хеҙмәт итеүе лә этәргес булып торғандыр. Ул киткәнгә байтаҡ йылдар үткәс, минең дә, инде үҫеп етеп, Ташкенттағы танк училищеһына барырға йыйыныуым хаҡында ишетеп, әсәйемдең ошолай тип илауағаны хәтеремдә: "Ғайса ағайың нисәмә йыл уәйәннейҙә йөрөй, йылына бер генә килеп күренә. Хәҙер һин дә шунда китәм тип тораһың. Ағайыңдың бөтөнләйгә ҡайтыуын, бәлки, күрермен дә ул, ә һине көтөп ала алмаҫмын тип ҡурҡам..." Әсәйемде йәлләп, әлеге училищеға бармай, медицина институтына уҡырға инеп киттем. Әммә унда дүрт йыл уҡығас, бишенсе, алтынсы курстарға Һамар хәрби медицина факультетына (әлегерәк ул "Куйбышевская военно-медицинская академия" тип тә атала ине) күсеү мөмкинлеге тыуҙы. Был хаҡта әйткәс, атайым ҡуш ҡуллап риза булды, әммә, әсәйемдең ризалығын алыу өсөн уны бер аҙ өгөтләргә тура килде. Сираттағы ялына ҡайтҡан офицер ағайым да әсәйемде тынысландырырға, йыуатырға тотондо. "Хәрби табиптар әрмелә һөт өҫтөндәге май һымаҡ йөшәй, ҡайғырма, әсәй. Уларға хатта ҙур командирҙар ҙа "доктор" тип кенә өндәшә", - тип бер аҙ фәстереп тә ебәрҙе. Ғүмере буйы һәр нәмәгә күндәм булып йәшәгән әсәйем, күҙенә йәш алһа ла, әллә ни оҙаҡ ҡаршылашманы, миңә фатиҳаһын бирҙе. Ул ғына ла түгел, бәгзе берәүҙең уға: "Мәрхәбә апай, нисек йәлләмәй, инде икенсе улыңды егерме биш йыллыҡ хеҙмәткә ебәреп ултыраһың?" - тип әйткеләгән мәле лә булған икән. Әсәйем: "Ҡайҙа ғына йөрөһәләр ҙә, имен-һау булһындар өсөн Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылып ҡына торам. Минең уландарым - хөкүмәтебеҙҙең һөйөклө ҡолдары бит.." - тип, таныш-тоноштарға ғорурланып яуап биргәне хаҡында һөйләй торғайны.

"Һөйөклө ҡолдары" тигәндән, йәшерен-батырыны юҡ: ысынлап та, халҡыбыҙ ҙа, хакимдарыбыҙ ҙа беҙҙе - хәрбиҙәрҙе электән яҡын күрҙе. Ил халҡының ҡоралды көстәребеҙгә булған мөнәсәбәтен шәхсән үҙемә төбәлгән һымаҡ ҡабул итеп өйрәнгәнмен. Күп милләтле СССР дәүләтендә совет һалдаты, ғөмүмән, һалдат кейемендәге һәммә кеше почетта булды. Социалистик илдәрҙең, иң беренсе нәүбәттә СССР-ҙың һәр саҡ дошманы булған НАТО блогына ҡаршы ныҡлы ҡәлғә булып торған армиябыҙҙың ролен халҡыбыҙ бик яҡшы аңлай ине. Илһөйәр, эшһөйәр, сабыр совет халҡы, һис нәмәгә ҡарамаҫтан, үҙ әрмеһен аҫраны, ас та тотманы. Етмешенсе, һикһәненсе йылдар илдә һәр төрлө тауар наҡыҫырaҡ була башлауын оло быуын кешеләре яҡшы хәтерләй. Бына шул осорҙарҙа ла хәрби ҡаласыҡтарҙы тәьмин итеү сағыштырмаса яҡшыраҡ ине, гарнизон магазиндарында аҙыҡ-түлек мәсьәләһе бер ҙә зарланырлыҡ булманы. Бөтә донъяға даны таралған бороңғо күренекле полководец Суворовтың: "Народ, не желающий кормить свою армию", будет кормить чужую армию", - тигән һүҙҙәрен яҡшы хәтерләйҙәр ине ул ваҡытта. Ябай һалдат рационы ла бай ғына булды. Ит, май, ярма һәм башҡа төр продукттарға һалдат ашханаһында бер ҡасан да ҡытлыҡ булманы. Госпиталдәрҙә дарыу-фәлән, шулай уҡ, кейем-һалым мәсьәләһендә артыҡ проблема юҡ ине.

Совет халҡының үҙ армияһына яҡшы мөнәсәбәте, моғайын, хөкүмәтебеҙҙең шул замандағы сәйәсәтенән дә торғандыр, тип уйлайым. Барлыҡ кинофильмдар, китаптар, гәзит-журналдар Ер шарын фашизм ҡоллоғонан азат иткән совет һалдатын данлауға көйләнгән ине. Балаларҙы ла мәктәптәрҙә "һалдат ағайҙарға" ҡарата ихтирамлы булырға өйрәттеләр. "Һөйөклө ҡолдарының", ғөмүмән, барлыҡ әрменең бөҫен төшөрмәү яғын хәүефһеҙлек органдары ла ныҡ ҡына ҡарағаны тойолдо. Ҡоралды көстәр хаҡында һәр төрлө насар мәғлүмәттәрҙе һөйләп йөрөү йә иһә киң матбуғат сараһында уларҙы сағыштырыу хаҡында хатта уйлау ҙа ярамай ине тиерлек. Хеҙмәтен тамамлап ҡайтҡан һалдаттарыбыҙҙың да әрмене яманлап берәй нәмә һөйләгәне ишетелмәй торғайны.

"Йорт эсенән ҡый сығарыу тыйылған" был дәүерҙә әле булһа яҡшы хәтерләйем. Һәр төрлө етешһеҙлектәр, әлбиттә, әрмелә генә түгел, ә бөтә ойошмаларҙа ла етерлек ине ул. Шуға ла тик әрменең генә кире яҡтары гелән йәшерелеп килгән тип уйлау ҙа оло хата булыр. Һәр кимәлдәге командование үҙенең эске проблемаларын мөмкин тиклем хәл итергә лә тырыша ине. Иң башта иҫкә алынған "дискредитация" тигән төшөнсә миңә электән дә таныш. Әйтәйек, берәй офицер тәртип боҙа икән, уны административ яуапҡа тарттыра торғайнылар. Хәрби хеҙмәт, Совет ҡоролошо хаҡында теләһә нимә (шул иҫәптән, көләмәстәр ҙә) һөйләп йөрөү йә хәмер менән артыҡ булышыу, йә иһә, ғаиләлә низағ сығарыу осраҡтары иғтибарһыҙ ҡалманы. Хәҙер нисектер, белмәйем, әммә шундай хөкөм итеүсе ойошма элек әрмелә "Суд офицерской чести" тип аталды. "За дискредитацию высокого звания офицера" тигән статья менән хатта бәгзеләрҙе пенсияһынан мәхрүм итеп, ваҡытынан алда хәрби хеҙмәттән ҡыуып сығарғылаған осраҡтар менән танышмын (шул осоро бер офицерыбыҙҙың радионан "Голос Америки" тапшырыуын тыңлағаны өсөн генә хеҙмәттән ҡыуылыуы хаҡында ишеттек). Ул саҡтағы юғары командованиены хәҙер ҡаты тәнҡитләһәләр ҙә, һалдат коллективындағы "неуставщина", "дедовщина" тип аталған насар күренештәргә ҡаршы аяуһыҙ көрәш һәр саҡ барҙы ул. Тик был хаҡта халыҡ ҡына әллә ни хәбәрҙар түгел ине...

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТӘРБИӘБЕҘ НИНДӘЙ?

**Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, ти халыҡ мәҡәле. Әйе, ғаиләлә шулай: ғәҙәттә, ул - атаһының, ҡыҙ әсәһенең яҙмышын ҡабатлай.**

Тик тормош бит ғаилә даирәһе менән генә сикләнмәй, өй ҡапҡаһы аҫтынан имгәкләп сығып, ауыл ҡапҡаһы аша үткән бала ғүмеренең мөхите киңәйә, ғаиләлә алған тәрбиәгә быға ят булған бөтөнләй икенсе йоғонтолар өҫтәлә. Ярай ҙа һуң, ул ысулдар ыңғай йоғонто яһаһа: бер өй ишеген асып сыҡҡан ун баланың ун төрлө тәрбиә алыуы ихтимал. Бөгөнгө мәғлүмәтте киң араға ҡаршылыҡһыҙ таратырға, ят тәрбиә бирергә мөмкинлектәр киңәйгән заманда был ихтималлыҡ геометрик прогрессия буйынса артҡандан-арта бара.

Ярай, беҙ, совет осоронда үҫкән балалар, бер иш ҡотко (пропаганда) йоғонтоһонда тәрбиәләндек: балаларса ҡыуана-ҡыуана октябрят булдыҡ, үҫә килә башкөллә һәммәбеҙгә лә пионер галстугы бәйләнеләр, йәшебеҙ еткәс, һайлап-һайлап комсомолға алдылар, инаныуға ҡарап, ҡай берәүҙәр коммунист булып китте. Шулай ҙа партияһыҙҙарыбыҙ күберәк ине - тимәк, үҫә килә, шәхес булып формалаша килә йоғонто көсө кәмей барған.

Ә бөгөн бармы бала аңына ыңғай йүнәлеш бирә алғандай, Тыуған илдең патриоттарын, илһөйәрҙәрҙе тәрбиәләгәндәй, Голливудта әпәүләнгән геройҙарҙы алыштыра алғандай көслө идеология? Иҫләйем, бала сакта беҙ ул фильм геройҙарынан һис тә кәм түгел инек - ата-ата "патрондарыбыҙ" ҙа бөтмәй торғайны, яңынан-яңы һуғыш ҡоралдары уйлап таба торғайныҡ. Биллаһи, фантазиябыҙ голливудтыҡыларҙан шәберәк эшләй ине! Әммә айырма шунда ине: бала аҡылыбыҙ менән булһа ла Тыуған илебеҙҙе яҡлап "һуғыша" инек - бына ҡасан кәрәк булған беҙгә октябрят йондоҙҙоно менән пионер галстугының әһәмиәте. Ә бөгөн? Гәзит уҡыусыларға ошо һорауҙы ташлап, фекер алышырға саҡырам. Әйҙәгеҙ...

**Исмәгзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған ҡарарға ярашлы 2022-2023 йылдар Рәсәй һәм Ҡытай араһында физкультура менән спорт өлкәһендә хеҙмәттәшлек йылдары тип иғлан ителде. Был документ ике ил араһында мөнәсәбәттәрҙе артабан да нығытыу маҡсатында төҙөлгән. Ойоштороу комитетының Рәсәй өлөшөнә төп сараларҙы төҙөргә һәм раҫларға ҡушылды. Уға 2023 йылда Екатеринбургта үтәсәк БРИКС, ШОС һәм БМО илдәренең командалары ҡатнашасаҡ Университет спортының халыҡ-ара фестивале лә инәсәк.

✔Башҡортостандан Пензаға юлланған резервсыларға һәм уларҙың яҡындары өсөн Пензала Өфөнән ике вәкил барлығы тураһында хәбәр ителә. Улар беҙҙең хәрбиҙәрҙе ҡабул итеү, урынлаштырыу һәм координациялау өсөн эшләй. Вәкилдәр һәр ваҡыт элемтәлә һәм киҫкен һорауҙар буйынса һәр ваҡыт ярҙам итергә әҙер. Александр: +7 (917) 805-32-77 Аҫҡар: +7 (917) 381-14-69. Өләшләтә мобилизация буйынса килеп тыуған башҡа һорауҙар менән Республиканың ситуациялар үҙәгенә 122 (өҫтәп 1-гә баҫырға кәрәк) берҙәм федераль номеры буйынса шылтыратыу һорала.

✔Бөтә Рәсәй Халыҡ фронты булдырған "Путин командаһы" граждандар премияһын тапшырыу тантанаһы уҙҙы. Башҡортостандан 10 кешегә - ирекмәндәр Александр Анисимов, Валентин Войтович, Константин Яшин, ҡотҡарыусы Дмитрий Фәрхетдинов, медиктар Эльвира Хәлисова, Лиана Чабанова, журналист Азат Ғиззәтуллин һәм фотохәбәрсе Олег Яровиков, хәрби хәрәкәттәр ветераны Тимерйән Рәжәпов, разведвзвод командиры Әлфит Ниғмәтйәновҡа почетлы наградалар тапшырылды.

✔Үткән аҙнала төбәк халҡы Республика менән идара итеү үҙәгенә күбеһенсә йылытыу буйынса һорауҙар менән мөрәжәғәт иткән. Торлаҡ-коммуналь хужалығы темаһына 609 ғариза булып, уларҙың күбеһе йылылыҡ биреүгә бәйле булған. Радий Хәбиров быныҢ кеүек һорауҙар буйынса "Кышҡы" штаб булдырыу кәрәклеген күрмәйем тип белдерҙе. Төбәк етәксеһе фекеренсә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системалары уларҙы планлы тәртиптә хәл итергә тейеш.

✓ ***Федераль лицензия бирелгәнсе предприятиелар ер участкаһының законлы эйәләренән рөхсәт алырға һәм урындағы үҙидара органдары менән килешеү төҙөргә тейеш. Был экологияны намыҫһыҙҙарҙан һаҡларға булышлыҡ итәсәк.***



ҠЫҪҠАСА

# БЕР ИШ КЕЙЕМДӘ...

**Башҡортостанда күпселек мәктәптәр берҙәм мәктәп формаһына күсә. Республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта мәктәптәрҙә 30-ға яҡын муниципалитет (улар бөтәһе 54) мәктәптәрендә ошондай ҡарар ҡабул ителгән.** "Профилле форумдарҙың береһендә биш муниципаль берәмек берҙәм уҡыу формаһы һатып алыу тураһында мәсьәләне хәл итте, һуңынан уларға тағы ла 12-һе ҡушылды, хәҙер улар 30. Форма бер төрлө түгел, варианттар һәм һайлап алыу мөмкинлеге бар. Туҡыманың сифатына талаптар ҡаты. Республикала тегелгән форма баҙарҙағыға ҡарағанда сифатлыраҡ, хаҡы ла арзаныраҡ. Күп балалы һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн форманың хаҡы бюджеттан дотациялар менән ҡаплана", - тине мәғариф министры.

✓**Башҡортостан районДарына яңы мәктәп автобустары ебәрелде.** "Әле Башҡортостанда 1 465 мәктәп автобусы иҫәпләнә. 50 меңдән ашыу уҡыусы 872 маршрут буйынса ташыла. Балаларҙы мәктәптәргә ташыу шарттарын камиллаштырыу менән бер рәттән, быНың сифатын һәм хәүефһеҙлеген дә булдырабыҙ", - тине Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин мәктәп вәкилдәренә техниканың асҡыстарын тапшырып. Махсуслаштырылған 20 автобустың барыһы ла республиканың 15 районына ебәрелде. Улар - Архангел, Асҡын, Баймаҡ, Балаҡатай, Благовещен, Белорет, Бүздәк, Бөрйән, Ғафури, Йәрмәкәй, Иглин, Ҡалтасы, Нуриман, Туймазы, Әлшәй райондары. Яңы транспорт ғәмәлдәге маршруттарҙы буШатырға, яңыларын асыуға, иҫке техниканы алмаштырыуға тотоноласаҡ. Яңы "ГАЗ" маркалы автобустар 18 кеше ултыртыуға иҫәпләнгән.

✓**Башҡортостанда Йәштәр көнөндә алкоголь һатыу тыйыласаҡ. Ҡоролтайҙа законға тейешле үҙгәреш индереү тураһында документ әҙерләнгән.** Ғәмәлдәге закон буйынса иҫерткес эсемлек һатыу 27 июндә генә тыйыла ине. Әммә был дата аҙнаның төрлө көнөнә тура килә, ә байрам саралары ял көнөнә күсерелә. Мәҫәлән, быйыл шулай булды: Йәштәр көнө йома һәм шәмбе 24 һәм 25 июндә үткәрелде, йәғни Йәштәр көнөндә алкоголь һатыуҙы сикләү үҙенең функцияһын үтәмәне. Шуға бәйле алкоголь һатыуҙы муниципалитеттар байрам сараһын үткәргән көндә лә тыйыу тураһында тәҡдим итешә, тип аңлаттылар БР Дәүләт Йыйылышында. Шулай итеп, Башҡортостан биләмәһендә йәмәғәт тәртибенең тәьмин ителеүе һәм ... ҡулланыуы хеҙмәтен күрһәтеүселәрҙән тыш, түбәндәге көндәрҙә алкоголле продукцияны ваҡлап һатыу тыйыла: район-ҡалаларҙа Һабантуй үткәндә; мәктәптәрҙә "Һуңғы ҡыңғырау" көнөндә; Йәштәр көнөндә; Белем көнөндә, 1 сентябрь йәкшәмбегә тура килһә, 2 сентябрҙә. Бынан тыш, 3-нән 6 ғинуарға тиклем Яңы йыл каникулы осоронда ваҡлап һатыу ваҡыты ҡыҫҡартыла.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ОҘАҠЛАМАЙ...



**Рәсәй Президенты Владимир Путин Ҡаҙағстанда, Астаналағы матбуғат конференцияһында, Рәсәйҙә өлөшләтә мобилизация алдағы ике аҙнала тамамланырға тейеш, тигәйне.**

Рәсәй Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков хәбәр итеүенсә, өлөшләтә мобилизацияны тамамлау тураһында әлегә Президент указы ҡабул ителмәгән. Шулай ҙа ҡуйылған планды үтәгән ҡайһы бер төбәктәрҙә был процесс туҡтатыла.

Ә Башҡортостанда нисек? "Башҡортостанда өлөшләтә мобилизация әле дауам итә, ул илдә билдәләнгән дөйөм ваҡыттан иртәрәк, 28 октябргә ҡарай тамамланасаҡ", - тип хәбәр итте республиканың хәрби комиссары Михаил Блажевич.

- Мобилизация беҙҙә планға ярашлы дауам итә. Илдең бар төбәктәрендә быға ваҡыт төрлөсә бүленгән һәм уны үтәмәүгә сәбәптәр юҡ. Беҙ был сараны 28 октябргә ҡарай, дөйөм мобилизация тамамланғанға тиклем туҡтатасаҡбыҙ, - тине Блажевич. - Техник яҡтан планды арттырып үтәү тигән нимә булмаясаҡ. Артабан айырым билдәләнгән хәрби частар формалаша, уларға штаттан күберәк кешене йәлеп итергә кәрәкмәй.

Республика етәксеһенең, хакимиәт башлыҡтарының һәм бар структураларҙың мөнәсәбәте һөҙөмтәһендә киҫкен һорауҙар хәл ителә, ялыу һәм мөрәжәғәттәр кәмегән, тип тә билдәләне Михаил Блажевич.

- Мобилизация мәлендә ҡайһы бер нескәлектәр булып алды. Норматив-хоҡуҡ базаһын үҙгәртергә, хәрби хеҙмәткә алынған ир-егеттәрҙе кире ҡайтарырға ла тура килде. Беҙ быНың кеүек хәлдәр башҡа ҡабатланмаһын өсөн барыһын да эшләйбеҙ, - тине хәрби комиссар.

# ЯУАП БИРӘСӘКТӘР!

**Башҡортостандың Республика менән идара итеү үҙәгендә Рәсәй ер аҫты байлығы менән идара итеү федераль агентлығы етәксеһе Евгений Петров һәм Росприроднадзор етәксеһе Светлана Радионова ҡатнашлығында БР Хөкүмәте кәңәшмәһе үтте.**

"Республика биләмәһендә федераль әһәмиәттәге 670 лицензия эшләй, шуның 64-е Урал арьяғында алтын табыуға бирелгән. Беҙ Баймаҡ һәм Учалы райондарында алтын табыусылар эшендә етешһеҙлектәр булыуы хаҡында Роснедрға хәбәр иттек. Федераль агентлыҡ комиссияһы уларҙың лицензияһын тартып алыу процедураһын башланы. Боҙолған ерҙәрҙе культивациялау мәсьәләһе киҫкен тора. Һуңғы ике йылда ғына тирә-яҡ мөхиткә килгән зыян 1,5 миллиард һумға етте. Участкаларҙы культивациялама́ғандарға ҡарата дәғүә эше алып барыла", - тине Хөкүмәт премьер-министры Андрей Назаров.

Ул республика властарының "Ер аҫты байлыҡтары тураһында"ғы законға үҙгәреш индереү буйынса тәҡдим ебәреүен иҫкә төшөрҙө. Уның асылы шунда: Федераль лицензия бирелгәнсе предприятиелар ер участкаһының законлы эйәләренән рөхсәт алырға һәм урындағы үҙидара органдары менән килешеү төҙөргә тейеш. Был контролде көсәйтергә һәм экологияны намыҫһыҙҙарҙан һаҡларға булышлыҡ итәсәк.

"Роснедр һәм төбәктең тәбиғәт министрлыҡтары менән үҙара йөгөнтоло эшләү механизмдарын формалаштырыу буйынса эш башланыҡ. Был йәһәттән Башҡортостан сифатлы яңы формат өлгөһөн күрһәтә", - тип билдәләне федераль агентлыҡ етәксеһе Евгений Петров.

"Росприроднадзор ер аҫты байлығы менән намыҫһыҙ файҙаланыусыларҙың эшенән ҡәнәғәт түгел, тикшереү саралары үткәреүгә мораторий булғанға күрә улар уны тулыһынса файҙалана. Кеше һаулығына һәм ғүмеренә туранан-тура хәүеф янаУын прокуратура органдарында иҫбат итеү мөмкин түгел. Закон боҙоусыларға ҡарата енәйәт эштәре юҡ тиерлек. Улар дөйөм Рәсәй буйынса бик аҙ. Бөгөн лицензия буйынса аныҡ талаптар булмауы, шулай уҡ ер аҫтын эшкәртеүҙең техник проекты - төп проблема. Ер аҫты менән файҙаланыусылар боҙолған ерҙәрҙе культивацияламай. Был биләмәләрҙә йәшәгәндәр һәм был мәсьәләне хәл итергә тейешле республика етәкселеге өсөн ҙур проблема", - тине Светлана Радионова.

# МАЛЫҢА ТАМҒА ҺАЛ!

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Ветеринария тураһында" БР Законына үҙгәрештәр индереүҙе ҡараған закон проектын киләһе ултырыштарҙың береһендә тикшерәсәк.**

Документ маркировкалау һәм республика биләмәһендә ауыл хужалығы малдарын иҫәпләү тәртибен билдәләйәсәк. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев әйтеүенсә, малды уларҙың эйәһе үҙаллы йәки башҡа кешеләрҙе йәлеп итеп маркировкалай ала. "Был хаҡта мәғлүмәт ветеринария өлкәһендә федераль дәүләт мәғлүмәт системаһының берҙәм базаһында буласаҡ. Шулай итеп, малды маркировкалау һәм иҫәбен алыу хәүефле сир барлыҡҡа килгән осраҡта туҡтатырға һәм аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген күтәрергә ярҙам итәсәк", - тип аңлатты Константин Толкачев.

Закон проекты федераль закондағы һуңғы үҙгәрештәргә ярашлы эшләнде. Шулай уҡ унда объекттарҙың зоосанитария статусын билдәләү тәртибе ҡарала, ныҡ хәүефле сирҙәрҙе бөтөрөү барышында тартып алынған мал өсөн компенсация түләү тәртибе асыҡлана.

Рәсәй Хөкүмәте малды иҫәпкә ҡуйыу һәм маркировкалау тураһында закон проектын Дәүләт Думаһына былтыр ноябрҙә ебәрҙе. Башҡортостан парламенты йорт малдарына чип ҡуйыу тураһында башланғысты быйыл йыл башында хупланы, тип яҙҙы быға тиклем "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы.

Маркировка сараһы малдың тиреһенә яҙылырға, беркетелергә, индерелергә мөмкин. Малға уникаль һан бирелә, ул цифрҙан һәм хәрефтән тора. Мал эйәһе маркировканы үҙе һайлай ала.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

# КОНСТИТУЦИЯ СУДЫ УРЫНЫНА...

**Башҡортостанда бөтөрөлгән Конституция суды урынына Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ҡарамағында яңы дәүләт органы - Конституция советы буласаҡ. Закон проектын депутаттар киләһе ултырыштарҙың береһендә ҡараясаҡ. Был ведомство элекке Конституция суды функцияларының ҡайһы бер өлөшөн аласаҡ.**

Яңы органдың биш йылға тәғәйенләнгән өс ағзанан тороуы күҙаллана: рәйес, уның урынбаҫары һәм секретарь. Кандидатураларға талаптар һәм уларҙың вазифаға инеү тәртибен закон проекты билдәләй. Дәғүәселәрҙән документтар 1 декабргә тиклем ҡабул ителә. Йыл аҙағына тиклем парламент уның составын раҫлаясаҡ. Ә 2023 йылдың 1 ғинуарынан дәүләт органы эш башлаясаҡ. Совет Дәүләт Йыйылышына индерелгән закон проекттарының БР Конституцияһына тура килеүе тураһында һығымталар бирәсәк. Яңы орган шулай уҡ закон сығарыу инициативаһы хоҡуғына эйә буласаҡ. "Республиканың Конституция суды 1996 йылда ойошторолғайны. Был үҙгәрешкә зама-ны ине. Ул ваҡытта законДың ҡайһы бер положениелары бер төрлө генә аңлатылмай практикала ҡулланыуҙы ауырлаштырҙы. Конституция суды бәхәсле мәлдәрҙе хәл итте. Ваҡыт үткәс, хоҡуҡи өлкә тығыҙланды, эшмәкәрлек өлкәһе тарайҙы. Бөгөн беҙ власть органдары структураһын ваҡыт талаптарына ярашлы ҡарайбыҙ", - тип аңлатты Константин Толкачев.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Юстиция эштәре буйынса БР дәүләт комитеты рәйесенә Совет майҙанына машиналарҙы үтеүҙе тыйыуҙы шәхси контролгә алырға ҡушты. "Совет майҙанына машинала үтергә ярамай. Ҡыҙыл майҙанға транспортта үтәләрме? Юҡ. Беҙҙең майҙанға ла машинала үтергә ярамай. Мин был һорау менән һеҙҙе шәхси шөғөлләнергә саҡырам", - тип Радий Хәбиров Владимир Спелеға мөрәжәғәт итте.

✓Өфө хакимиәте матбуғат хеҙмәтенән белдереүҙәренсә, бөгөнгә Өфөлә 20 078 вакант эш урыны бар. Эш хаҡы буйынса төүге урында юрист вакансияһы тора. Уға айына 60 меңдән 80 мең һумға тиклем түләйәсәктәр. Икенсе урында - программалаусы (60-65 мең һум). Артабан инженер-конструктор (45-60 мең), иктисадсы (40-45 мең), бишенсе разряд токарь (45-55 мең) һәм табип анестезиолог-реаниматолог (40-50 мең һум) килә. Ҡаланың мәшғүллек үҙәге "кызыу линияһы" телефоны: 251-51-75.

✓Төбәктә 2022 йылдың 9 айы һөҙөмтәһе буйынса газондарҙағы һәм башҡа йәшелләндерелгән урындарҙа туҡталҡа өсөн 19,6 млн һумға штраф һалынған. Юстиция эштәре буйынса БР дәүләт комитеты рәйесе Владимир Спеле һүҙҙәре буйынса, төп хоҡуҡ боҙоуҙар Өфөгә тура килгән - 14,5 мең тирәһе. Был дөйөм республика күрһәткестәренән 73 процент тигән һүҙ. Быйыл Башҡортостандаундай хоҡуҡ боҙоуҙарҙың һаны былтырғыға ҡарағанда 23,3 процентҡа артҡан, тине Владимир Спеле. Шул уҡ мәлдә штраф күләме лә 16,5 процентҡа күбәйгән.

✓Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 5 ноябрҙән Red Wings авиакомпанияһының Өфөнән Ташкентҡа тура рейстары асыла. Осоштар шәмбе көндәрендә Sukhoi SuperJet 100 самолеттарында башҡарыла. Баш ҡала аэропортында белдереүҙәренсә, әлеге ваҡытта "ЮТэйр" һәм Uzbekistan Airways авиакомпаниялары аҙнаһына бер тапҡыр "Өфө" аэропортынан Ташкентҡа осош программаларын бойомға ашыра.

✓Синоптиктар фаразынса, быйыл ҡыш Башҡортостанда температура нормаға ярашлы була. Башгидрометүҙәк фаразлауынса, республикала уртаса айлыҡ температура октябрҙә +4,3, ноябрҙә -4,4, декабрҙә -10,8, ғинуарҙа -12,5, февралдә -11,7, мартта -5,1 градус булыуы көтөлә. Ноябрҙә гәзәттәгенән һалҡыныраҡ булыуы, декабрҙә температураның норманан аҙ ғына тайпылыуы фаразлана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Баш ҡаланың Совет майҙанындағы куранттар "Шайморатов генерал" йырының көйөн уйнай. Ул ҡыңғырауҙар ярҙамында башҡарыла һәм 40 секунд дауам итә.*



*КӨНАУАЗ*

# ЙЫЛЫТЫУ МИҘГЕЛЕ НИСӘ АЙ?

**Сентябрь һуңында республикала сираттағы йылытыу миҙгеле башланды. Ҡағиҙә булараҡ, тап ошо ваҡытта халыкта бирелгән йылылыҡ күләме һәм был хеҙмәткә түләү тәртибе буйынса һорауҙар тыуа. "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы быға тағы ла асыҡлыҡ индерә.**

➔ **Йылытыу миҙгеле сентябрь һуңында башланды, шулай булыуға ҡарамаҫтан, хеҙмәткә норматив буйынса түләүселәр бер нисә көн өсөн тулы айға түләгән кеүек түләйәсәкме?**

Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова аңлатыуынса, йорттарында йылылыҡ иҫәбен алған дөйөм йорт ҡоралмалы булмаусылар хеҙмәт өсөн норматив буйынса түләй һәм был мөҙҙәт 8 айға иҫәпләнә. "Йылытыу миҙгелен сентябрҙә башларға ҡарар иткән муниципалитеттар өсөн тап ошо ай иҫәп башланған ай булып тора, ә һуңғы - һигеҙенсе ай - апрель. Иҫәп ҡоралмалары булған йорттарҙа йәшәүселәр факт буйынса, йәғни күпме ҡулланған - шулай түләйәсәк", - ти ул. Йылытыу миҙгеле октябрҙә башланған муниципалитеттар өсөн һуңғы - һигеҙенсе ай булып май тора.

Тарифтар буйынса республика дәүләт комитеты рәйесе Светлана Бурдюк әйтеүенсә, йылылыҡ нормативы РФ Хөкүмәте ҡарарына ярашлы иҫәпләнә. Нормативтарҙы билдәләгәндә дәүләт комитеты төҙөлөш климотологияһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнә. Уға ярашлы, йылытыу осороноң уртаса көндәре 216, ул айҙағы уртаса көндәр һаныңа - 30,4 - бүленә һәм уртаса йылытыу миҙгеле 8 ай килеп сыға. Йылытыу миҙгеленең оҙайлығы климатҡа бәйле. Әгәр Ямал-Ненец автономиялы округында ул 9 ай булһа, Сочиҙа - 6 ай. Волга буйы федераль округының күпселек субъекттарында йылытыу миҙгеле оҙайлығы Башҡортостандағы кеүек - 8 ай.

➔ **Йортҡа йылылыҡ бирҙеләр, ә минең өйөмдә батареялар һыуыҡ. Ни өсөн?**

"Бының өсөн юғары ҡаттарҙағы фатирҙарҙың торбаһындағы һауаны сығарырға кәрәк", - тип билдәләй Ирина Голованова.

Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Сергей Кожевников аңлатыуынса, йылылыҡ бирелгәндән һуң уны көйләү өсөн 14 көн кәрәк. Баш ҡалала йылылыҡ килмәгән адрестар буйынса авария бригадалары йөрөй һәм барлыҡ мәсьәләләр хәл ителә. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы көн һайын "Инцидент менеджмент" күҙәтеү системаһы аша килгән мөрәжәғәттәрҙе тикшереп тора. Һәр мөрәжәғәт тейешле ойошмаларға, муниципалитеттарға, идара итеү компанияларына еткерелә, кәрәк булғанда башҡа белгестәр йәлеп ителә.

➔ **Ныҡлы һыуыҡтар башланмаған әле, ә фатирҙа эҫе, йылылыҡты кәметеп булмаймы ни?**

"БашРТС" яуаплылығы сикләнгән ширкәт директоры Тимофей Дубовский әйтеүенсә, эҫе һыуға санитар-гигиена талаптарына ярашлы, йылытыу торбаларында температура 70 градустан кәм булырға тейеш түгел, юҡһа, крандан аҡҡан эҫе һыу талап ителгән температураға етмәй. Бина эсендә температураны көйләү өсөн автономлы көйләү узелдары ҡуйырға кәрәк, ти ул. Автоматик көйләү узелдары тирә-яҡ мөхит температураһына ҡарап, йылылыҡ биреү менән идара итә. Бындай ҡоралмалды ҡуйыуҙы йорт милекселәре дөйөм йыйылышта хәл итә. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, һуңғы ике йылда капиталь ремонт буйынса төбәк операторы иҫәбенә 76 йорт шундай ҡоралмал менән йыһазландырылған. Сират көтмәҫ өсөн, милекселәр бындай ҡоралмалды аҡса йыйылышып йәки инвестор табып, уның иҫәбенә ҡуя ала. Йылылыҡҡа артыҡ түләнгән аҡсаны экономиялау уның хаҡын тиҙ арала ҡаплай.

➔ **Йылылыҡҡа тарифтар үҙгәрәсәкме, мобилизацияланғандарҙың ғаиләләренә льгота бармы?**

Светлана Бурдюк белдереүенсә, 2022 йылға тарифтар былтыр декабрҙә үк билдәләнгән. Йылдың беренсе яртыһында хаҡтар артмай, 1 июлдән планлы индексация яһала. Аныҡлап әйткәндә, йылылыҡ өсөн тариф 3,5 процентҡа артҡан. Әлеге ваҡытта 2023 йыл өсөн тарифтар ҡарала.

Ирина Голованова белдереүенсә, мобилизацияланған граждандар өсөн торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә түләүгә льготалар буйынса ҡарар юҡ, әммә пенялар буйынса бар - граждандың хеҙмәте барышында пенялар өҫтәлмәйәсәк.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## СОВЕТ МАЙҘАНЫНДА...



**Баш ҡаланың Совет майҙанындағы куранттар "Шайморатов генерал" йырының көйөн уйнай.**

Ул ҡыңғырауҙар ярҙамында башҡарыла һәм 40 секунд дауам итә. Ғәҙәти булмаған заказды Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының музыка бүлеге мөдире, композитор-аранжировкалаусы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Олег Жданов үтәй.

"Эш ике аҙна самаһы барҙы. Куранттар өсөн ҙур булмаған өлөш кәрәк. Ҡыңғырауҙар ентекле һайланды - ҡайҙалыр Псков ҡыңғырауҙарының тере тауышы һалынды, ҡайҙалыр составында ҡыңғырауҙар булған ҡоралдар алынды. Ҡыңғырау тембрҙарын башҡорт көйөнә тап килтереп һалыу еңел булманы. Икенсе ауырлыҡ темптың яй булырға тейешлеге ине", - ти Олег Жданов.

*ҺОРАУ-ЯУАП*



## КРЕДИТ КАНИКУЛДАРЫ ҺӘМ...

➔ **Мобилизацияға йәлеп ителгәндәрҙең кредиттары буйынса каникул ваҡытына проценттар иҫәпләнәме?**

- Ипотека буйынса кредит каникулдары менән файҙаланған өсөн өҫтәмә түләүҙәр юҡ - түләүҙәр графигы каникул ваҡытына күсерелә генә.

Ҡулланыусылар кредиты буйынса тәртип бер аҙ икенсерәк - каникул осоронда ташламалы процент иҫәпләнә, ул кредиттың каникул һорап мөрәжәғәт иткән көндәге уртаса баҙар хаҡының 2/3 өлөшөн тәшкил итәсәк.

Ипотека, ҡулланыусылар кредиты һәм заемдар буйынса түләү ваҡыты автоматик рәүештә кәмендә каникул ваҡытына оҙайтыла. Ташламалы осор тамамланғандан һуң даими түләүҙәр күләме каникулға тиклемдәгеһә ҡуләмдә ҡала.

➔ **Ниндәй осраҡта мобилизацияланған кешенең һәм ғаилә ағзаларының кредит буйынса бурысы тулыһынса иҫәптән сығарылыуы мөмкин?**

-Махсус хәрби операция барышында йәки алған йәрәхәттәр һөҙөмтәһендә хәрби хеҙмәткәрҙең ғүмере өҙөлһә, шулай уҡ 1-се төркөм инвалидлыҡ билдәләнгән осраҡта кредит бурысы тулыһынса иҫәптән сығарыла. Был осраҡтарҙа уның ғаилә ағзаларының кредиттары ла тулыһынса ҡапланырға тейеш. Әйткәндәй, был норма мобилизация башланғандан алып 21 сентябрҙән һуң булған осраҡтарға ғына түгел, ә махсус хәрби операция башланғандан алып, йәғни 2022 йылдың 24 февраленән һуң булған хәлдәргә лә тарала.

➔ **Банк мобилизацияланған граждандың залогтағы фатирын йә машинаһын һата аламы?**

- Юҡ, кредит каникулдары осоронда банктың былай эшләргә хаҡы юҡ.

Каникулдар дауам иткәндә, башланған булһа ла, башҡарма эш туҡтатыла.

➔ **Мобилизацияланған граждан алиментын нисек түләйәсәк?**

- Мобилизация балаларҙы ҡарау бурысынан азат итмәй, алиментты ла шул уҡ тәртиптә түләргә кәрәк. Әгәр алимент килем өлөшөндә тәғәйенләнһә, сумма яңы түләүҙәр күләмен иҫәпкә алып үҙгәрә. Алименттың кәмеүе йәки артыуы алимент түләүсенең әлеге көндәге һәм киләсәктәге килеменә бәйле.

Әгәр алимент билдәле күләмдә тәғәйенләнһә - сумма үҙгәрмәй, ләкин яңы шарттарҙы иҫәпкә алып, уны суд аша кәметеүҙе йәки арттырыуҙы талап итергә мөмкин. Рәсми килеме булмау сәбәпле, быға тиклем алимент түләүгә бәйле проблемаһы булған ата-әсәләр өсөн хәлдең яҡшы яҡҡа үҙгәреүе ихтимал, сөнки мобилизацияланған граждандаға аҡсалата түләү ҡаралған, уның бер өлөшө даими рәүештә алимент сифатында күсереләсәк.

**(Дауамы 15-се биттә).**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ангина

❖ Был ауырыуҙан йүкә япрағы һәм сәскәләре бик файҙалы. Төгәләренең составында булған фитонцидтар бактерияларҙы үлтерһә, икенсеһенең тирләтеү сифаты ауырыуҙың дөйөм хәлен яҡшырта һәм лайлалы тиресәләге шеште кәмегә. Ошоға бәйле, йүкә япрағы һәм сәскәһен бергә ҡушып төнәтеп, тамаҡты сайҡатып һәм эсеп тә дауаланыу кәңәш ителә. Бының өсөн 1,5 ҡалаҡ әҙерләмәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Йоҡларға ятырҙан алда йылы көйөнсә эсергә. Ошолай уҡ әҙерләнгән 1 стакан төнәтмәгә 5 грамм аш содаһы ҡушып, тамаҡты сайҡатырға кәрәк.

### Бөйөрҙә таш

❖ Һары сейәнең (черешня) 10-15 емеш һабағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта 10 минут ҡайнатып һөҙөргә. Килеп сыҡҡан шыйыҡса - бер тәүлеккә етерлек дауа. Уны бер нисә өлөшкә бүлеп, ашау ваҡытына ҡарамайынса эсеп бөтөргә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға. Кәрәк булһа, ике аҙнаға туҡтап торғандан һуң тағы ла ҡабаттан 1 ай дауаланырға була. Һары сейәнең емеш һабаҡтары (шулай уҡ сейәнең емеш һабаҡтарыныҡы) бешкән бындай һыу гипертония, цистит ауырыуҙарын дауалағанда, инсульт һәи инфарктты иҫкәртергә, ҡанда холестерин кимәлен кәметергә, артриттың көсәйеүен кәметергә, бронхит булғанда ҡаҡырыҡты сығарырға ярҙам итә. Артыҡ ауырлыҡтан арынырға теләгән осраҡта ла һары сейәнең емеш һабағын бешереп, сәй урнына эсергә була.

### Үҙәк көйөү

❖ 1 пакет (махсус төрөлмәгән булһа, 1 ҡалағына) шифалы ромашкаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, сәй кеүек бешерергә. Йылы көйөнсә эсергә.

❖ "Золотой ус" үҫемлеге булһа, шуның япрағын 2 сантиметр тирәһе йолҡоп алып, тәшкә аш ваҡытында ашарға. Аҙағынан бер йотом һыу эсергә. Киске аш ваҡытында ла шулай итергә. Бер аҙна ошо рәүешле дауаланғас, үҙәк көйөү үтә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Гел генә "һөт өҫтөндәге май" һымаҡ булмаған дәүерҙе лә татырға тура килде шул беҙгә. Туҡһанынсы йылдар башында "демократия" лозунгы аҫтында башланған "үҙгәртеп ҡороу" сәйәсәте әрмебеҙҙе лә урап үтмәне.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Ғафури һәм Ишембай райондарының Урал тауҙарына яҡын ауылдарында XX быуаттың беренсе яртыһында уҡ ҙур булмаған ашлауҙар эшләгәндәр, уларҙың өҫкө диаметры 40-50 см тирәһе (төбө ярайһы уҡ тар) булған, яҡтары эйенке. Ашлауҙарҙың бейеклеге 14 сантиметрҙан артмаған. Был һауыттар башҡаларынан аҫма сығынты йәки күҙ-тишекле башҡа ҡуҫҡан тура мөйөш үҙәк рәүешендәге тотҡаһы булыуы менән айырылып торған. Ҡайһы бер осраҡта уларҙа йылан башы һынландырылған кеүек күренгән, икенсеһендә ҡош башын хәтерләткән - был оҫтанан торған. Бер юлы уңайлылығы ла хәстәрләнгән: "күҙ" аша бау үткәреп, һауытты стенаға элеп ҡуйып булған.



*Итле аш өсөн ашлау. Мәләүез районы, 1970 йыл. Автор фотоһы*

Көньяҡ Урал армыттарында ҙур (диаметры 70 см-ға тиклем) һәм тәрән (25 см-ға тиклем) ашлауҙар киң таралған, улар бер аҙ оҙонсараҡ, ситтәрендә ике арҡыры сығынты тотҡаһы булған. Бындай ашлау 1970 йылда Ырымбур өлкәһе Төйлөгән районы Аллабирҙе ауылында осраны.



*Оло аш табыны өсөн ашлау. Ырымбур өлкәһе, 1970 йыл. М.Д. Кузнецов һүрәте*

Бөрйән районындағы ҙур табаҡтар бигерәк һыйҙырмалы күренгән. Уларҙың тотҡаһы булмаған. Бәләкәй генә төбө тыштан һәм эстән һыҙылып бер аҙ беленеп торған, әммә һауыттың ярым йоморо тәҙәлешен боҙмаған. Ҡаты материалдан эшләнгән һауыттарҙа йышҡы эҙе һаҡланған, был үҙенә күрә бер йәнлелек өҫтәгән. Ҡайһы бер табаҡтарҙың сите ҡалынайтып эшләнгән йәки бер аҙ бөгөлөп торған.

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында һәм Урал аръяғының көнсығышында туй һыйын сара тигән оҙонсараҡ һауыттарҙа биргәндәр, уларҙың тар яғы ҡаушырып эшләнгән. Был табаҡ-ялғаштар тотош бер ҡуй итен һыйҙырмалы булған.

Инйәр йылғаһы буйҙарында һәм Ағиҙел йылғаһының үрге ағымында ит өсөн тәгәйенләнгән ҙур түңәрәк табаҡтарҙың ҡабырғалары текә итеп эшләнгән. Өҫкө ҡырынан 7-10 сантиметр аҫтараҡ тышы яҡтан валик менән үткәндәр, унан аҫтараҡ һауыттың ҡабырғалары ҡапыл ҡыйшайып, төбөнә тоташҡан.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*КИНӘЙӘ*

# ӘРМЕЛӘГЕЛӘРГӘ...

## һүҙ тейҙермәйек



(Башы 3-сө биттә).

### Ситләткән осор ҙа булды

Тәбиғәттә аңғармаҫтан һауа торошо боҙолоп киткән һымаҡ, тормош тигән нәмә лә бер көйө тормай, ҡайсаҡ ныҡ ҡына, хатта бөтөнләйгә кире яҡҡа ҡарай үҙгәреп тә киткеләй. Гел генә "һөт өҫтөндәге май" һымаҡ булмаған дәүерҙе лә татырға тура килде шул беҙгә. Үҙебеҙҙең совет кешеләре тарафынан да бер аҙ үгәйһетелгән саҡтарыбыҙ булманы түгел. Туҡһанынсы йылдар башында "демократия", "асыҡлыҡ" һымағыраҡ лозунгылар аҫтында башланған "үҙгәртеп ҡороу" сәйәсәте әрмебеҙҙе лә урап үтмәне. Илдәге бәгзе бер киң матбуғат саралары үҙебеҙҙең ҡоралды көстәргә ҡаршы "ҡара сәүкә кеүек" ябырылды, тиһәм дә дөрөҫ булыр. Әле кисә генә "ергә лә төшөрмәй" маҡталған Совет Армияһын оҫта һүҙле ораторҙар бик тиҙ генә арала "нәжескә буяп" та ташланы. Һалдат һәм офицерҙарабыҙ ил һаҡсыларынан әрәмтамаҡтарға әүерелде. Илдәге барлыҡ кәрәк-яраҡтар (кейем-һалым, аҙыҡ-түлек) "бер кемгә лә кәрәкмәгән" миллионлаған һалдат масаһына китеп торғанлығы хаҡында халҡыбыҙ аңына иркенләп, әүҙем рәүештә һеңдерелә башланы. Совет офицерын эскелектән башы сыҡмаған, тупаҫ, хатта йөрәкһеҙ бер кеше итеп күҙ алдына ҡуйырға тырышыусылар табылды. Торғонлоҡ йылдарының бар бәләһен ҡоралды көстәребеҙгә асыҡтан-асыҡ япһарыу ғәҙәти хәлгә инде. Ә империалистик илдәрҙең (шәхсән Ҡушма Штаттарҙың) беҙҙең ҡалаларыбыҙға тоҫҡалған ҡурҡыныс йәҙрә ҡоралы барлығын бөтөнләй иҫкә төшөрмәнеләр.

Мәғлүмәт сараларының "тырышлығы" бушҡа китмәне: граждандарҙың хәрби кешегә мөнәсәбәте лә ҡырҡа насарайыуын аҙым һайын тиерлек тоя башланыҡ. Ҡала урамдарында бәғзе берәүҙәрҙең "Аҙыҡ-түлек бына ошо погонлы әрәмтамаҡтарға китеп тора бит" тип, көпә-көндөҙ битте йыртып әйтеп киткәндәрен дә ишетергә тура килә ине. Хатта хәрбиҙәргә йәш-елкенсәктең һөжүм иткән осраҡтары ла йыш ҡына ишетелә башланы. Ҙурыраҡ ҡалаларыбыҙҙа хеҙмәт иткән офицерҙарҙың урамға хәрби формала сығырға шикләнеп, эшкә штатский кейемдә йөрөргә мәжбүр булыуы үкенесле ине. Әлегерәк, ил алдында изге бурысын үтәп, йылтырап торған парад формаһында күкрәк киреп тыуған яғына юллана торған "дембель" һалдаттар ҙа хәҙер "гражданский" кейемдә ҡайта башланы. Төрлө сәбәптәр табып, йәш егеттәрҙең әрмегә бармай ҡалыу яғын көҫәгән шул осор ҙа минең яҡшы хәтеремдә. Бер мәл "Красный боец" тип аталған округ гәзитенә: "Нишләп халыҡта ил һаҡсыларына ҡарата шундай насар мөнәсәбәт тәрбиәләүгә юл ҡуяһығыҙ? Туған әрмебеҙҙе насарлаған мәғлүмәттәрҙе сикләү, ҡоралды көстәребеҙҙе яҡлашыу өсөн матбуғатта цензура тигән нәмәләр юҡмы әллә?"- тигәнерәк һорау менән мәкәлә лә яҙып ебәрҙем. Мәкәләмә баҫманылар. Редакциянан: "Хәҙер бөтә илдә демократия, шул иҫәптән әрмелә лә. Күнелегеҙгә яҡын алмағыҙ..." - тигән һымағыраҡ яуап ҡына ебәрҙеләр...

### Ә Башҡортостанда улай булманы

Ватандаштарымдың, йәғни республикам халҡының ил һаҡсыларына ҡарашы хаҡында айырып әйтмәксемен. Ата-бабаларыбыҙҙың ғәскәри кешеләргә һәр саҡ ихтирамлы булғанлығын боронғо йырҙарыбыҙ аша ла беләбеҙ. "Байыҡ", "Любизар", "Эскадрон" һәм башҡа күп йырҙар хәрби хеҙмәткәрҙәргә бағышланған. "Һай, азамат, арыҫлан да, яуҙа дошман айҡаған. Йәҙҙәрендә даны балҡый, күп ерҙәргә байҡаған. Түрҙән урын алығыҙ, һары балды һалығыҙ! Арыҫландай батырҙарҙың арҡаһынан ҡағығыҙ!.." Заманалар нисек кенә үҙгәреүенә ҡарамаҫтан, халҡыбыҙ борондан ҡалған, быуындан-быуынға күсә килгән ана шул яҡшы традицияға һәр саҡ тоғро булып ҡалыуына ҙур рәхмәтлемен.

Әлеге иҫкә алған "үҙгәртеп ҡороуҙарҙың" бер мәлендә башҡа төбәктәрҙә ғәскәри кешегә ҡырын ҡараусылар күбәйеүенә ҡарамаҫтан, хәрбилегемде бер ҡасан һәм бер кемдән дә йәшерергә ынтылманым. Сираттағы ялға ҡайтҡанда яҡташтарыма, туғандарыма һәр саҡ хәрби формала күренергә тырыша инем. Йыл һайын яңы саҡырылыш һалдаттарын алырға Өфө йыйыу пунктына командировкаға ла йөрөнөм. Баш ҡалаға ҡайтып төшкәс, әйтерһең дә, үҙ өйөнә килеп инәһең, яҡташтарҙың яҡты йөҙөн күреп, йылы ҡарашын аҙым һайын тойоп, оло ҡәнәғәтлек кисерәһең. Район үҙәгендәге автовокзалдарҙа бөтөнләйгә таныш булмаған берәй яҡташын: "Әйҙә, һалдат, нишләп сиратта тораһың, бар, шул көйө генә алып кит", - тип, билет кассаһына ла үткәреп ебәрә... Автобуста йә иһә башҡа берәй транспортта барғанда кемдер булһа һиңә һүҙ ҡушып, ниҙер хаҡында һөйләшә башлау яғын ҡарай. Хәҙер, бәлки, ҡайһы берәү ышанмаҫ та, әммә бәгзе оло йәштәге әбейҙәрҙең: "Улым, әрмейәнән киләһеңме? Арып ҡына ҡайтып киләһеңдер, әйҙә ултыр!.." - тип, урын бирергә маташҡанын күреп, күңел тулып киткән мәлдәр ҙә хәтеремдә. Ололарҙың ғына түгел, йәш егеттәребеҙҙең, ҡыҙҙарыбыҙҙың да үҙенә ихтирамын тояһың. Берәй йыйын, мәжлес булһынмы, күптәрҙең игтибары һиндә булыуы, һинең ниҙер һөйләүеңде тыңлауҙары лә үҙенә ҡарата хөрмәт һымаҡ ҡабул ителә ине. Уҡыған мәктәбенә килһәң, элекке уҡытыусыларың балаларҙы йыя һалып, осрашыу кисәһе үткәреү сараһын ойоштора башлай. Шундай кисәләрҙә айырыуса малай халҡы әрме, ундағы хәлдәр, хәрби хеҙмәттең төрлө нескәлектәр менән ҡыҙыҡһына, уларҙың һорауҙарына яуап биреп кенә өлгөр! Һинең менән бергә фотоға төшөүҙе лә әллә ни күрәләр...

Хеҙмәтемдең аҙағы яҡынлашып килгән мәлдә үҙемдең тәүге хикәйә, мәкәләләрем менән баш ҡалабыҙҙағы башҡорт гәзит һәм журналдары мөхәррирәтәренә ишек шаҡый башланым. Шунда эшләгән яҙыусы һәм журналистарыбыҙҙың - буласаҡ ҡәләмдәштәремдең нисек йылы ҡаршылауҙары хаҡында әйтеп бөткөһөҙ. Матбуғатыбыҙҙа хеҙмәт иткән был кешеләрҙә эрелек, тәкәбберлек тигән нәмәнең береһен дә күрмәнем. Халҡыбыҙ интеллигенцияһының иң юғары ҡатлам вәкилдәре тип атар инем уларҙы. Редакцияларыбыҙҙың береһендә ҡулъяҙмамды тотоп, хәрби формала ултырғанымды күргәс, шунда эшләгән билдәле яҙыусыларыбыҙҙың береһе (ағай кеше) баш мөхәррирҙә шаяртып: "Подполковник һынлы кеше юкты яҙмаҫ, был егеттең алып килгән әйберен уҡып та тормаҫтан, журналыңа баҫ та сығар", - тип әйтеүе күңелгә бәлзәм булып ятты. Ана шул мәлдәрҙән алып, ғәйәт матур итеп башҡорт теләндә һөйләшкән бындай яҡташтарымды тағы ла яҡыныраҡ, хатта үҙ туғаным һымаҡ күрә башланым. Хәрбиҙәребеҙгә, ғөмүмән, ҡоралды көстәребеҙгә бер ҡасан да насар һүҙҙәр ташламаған ҡәләмдәштәремә ихтирамым артҡандан-арта ғына барҙы.

Һуңғы йылдары матбуғат сараларында илһөйәрлек темаһы йыш ҡуҙғатылыуы һөйөнөслө. Балаларҙың, йәштәрҙең ил һаҡсыларына ҡарата ихтирамлы булыуы ла тап ана шул илһөйәрлектең бер өлөшө бит инде ул. Бөгөн әрмебеҙҙе күтәрмәләү бигерәк тә кәрәк. Еңел булмаған хәрби хеҙмәт арбаһын тартып барған егеттәребеҙ - халҡыбыҙ улдары, илебеҙҙең ҡалҡаны булған ҡоралды көстәребеҙ адресына ҡырын һүҙ ташламайыҡ зинһар, тип әйтмәксе инем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина хеҙмәте подполковнигы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

19

# Ғаиләм-ҡәлғәм

22-28 октябрь (ҡарасай) 2022 йыл
№42 (1032)

СӘХИФӘНӘН

# АТАЙҘАР КӨНӨ УҢАЙЫНАН



Үтеп барған аҙнала Атайҙар көнө билдәләнде бит инде. Иртәнге сәй табынында Атайҙар көнө уңайынан иремде ҡотланым да һөйләшеүҙе дауам итеп, уйынлы-ысынлы һорау бирәм:

- Шунан, - тием, - нисек йәшәйһең, был тормош һиңә нисек, оҡшаймы?

- Күңелле! - ти был. Шулай тип бер һүҙ генә әйтте...

Юҡ, юҡ, мобилизацияға эләкмәгәнгә ҡыуанып ултыра, тип уйлай күрмәгеҙ, уға, ғөмүмән, йәшәү оҡшай. Зарланғанын, мыжығанын, кемгәлер үсегеп, кемделер, нимәнелер яманлап йөрөгәнен күргәнем булманы. Булғанына шөкөр итә, килеп сыҡҡан ҡатмарлы, ҡайғылы хәлдәрҙе һәр ваҡыт һалҡын ҡан, айыҡ аҡыл менән кисерә белә. Бушҡа бошоноп, юҡҡа ҡайғырып йөрөй торған кеше түгел ул. Шуға ла бөтә нәмәнән күңелле мәл табып, ҡәнәғәт йәшәп ята.

Алкоголле эсемлек һемереп, тәмәке тартып күңелләнеү уға хас түгел. Ул шулай күңелле итеп йәшәй белә. Әйләнә-тирәләгеләрҙе лә шәйләмәҫкә мөмкин әле ул. Шулай, эшенән баш күтәрмәй эшләп йөрөгәнендә бер ҡыҙыҡ хәлгә тарығанын һөйләгәйне. Бер-ике йыл мәктәптә лә эшләп алды ул. Шул мәлдә бер уҡыусыһын филармонияға конкурсҡа алып барған. Кейемен гардеробҡа тапшырып торғанда эргәһенә шат йылмайып, бер ҡатын килеп баҫҡан. Һаулыҡ һорашҡан да быны көтөп тора икән. Нишләп мине көтөп тора икән был апай, тип аптыраған беҙҙең Азаматович һәм уға уңайһыҙланып ҡына: "Һеҙҙең йөҙөгөҙ таныш һымаҡ та ул, тик мин һеҙҙе танымайым", - тигән. Теге ҡатын көлөп: "Мин һеҙҙең коллегағыҙ ҙа һуң, бер мәктәптә эшләйбеҙ бит", - тигән. Бер коллективта эшләгән коллегаһын танымаҫлыҡ булғас, мәктәптә балаларҙы ҡурайға уйнарға өйрәтеү менән мәшғүллеге шул хәтлем мөкиббән китеп атҡарырлыҡ күңелле булғандыр инде...

...Атайҙар көнө булғас, ҡайным менән атайымды ла иҫләп алдыҡ әле. Атайым ҡурайсы булған һәм алты кейәүе араһынан иң кесеһе, минең ирем генә ҡурайсы бит инде. Беҙ өйләнешер алдынан буласаҡ иремдең ҡурайсы икәнен белеп ҡалған апайымдар: "Әсәйҙең был кейәүе ҡурайҙа уйнай, ҡалғандары нервыла ғына уйнай",- тип көлгәйнеләр... Атайым иҫән булһа, беҙҙе үҙ нигеҙенә йыйып, тарҡатмай, киреһенсә, берләштереп, ҡурайында уйнап, түрҙә генә ултырыр ине микән, тип моңһоуланып алам...

Ә иремә моңһоуланыу хас түгел, был осраҡта ҡайнымды иҫләп алабыҙ... Азаматович армияла саҡта ҡайнымдар ҡаланан ҡәйнәмдең ауылына күсеп йәшәп торғандар. Кеше донъяһында йәшәгәс ни, мал көтмәгәндәр, мал көтмәгәс, бесән дә эшләмәгәндәрҙер инде. Шул саҡта ҡайным армиялағы улына: "Бөтә ауыл йығылып ятып бесән эшләй - ә беҙгә барыбер..."- тип хат яҙған... Азаматовичты, йәғни минең иремде лә шундай юҡ-барға көймәгән кеше итеп тәрбиәләгәндәре өсөн рәхмәт атай-әсәйенә. Уның булыр-булмаҫ нәмәгә ҡайғырып, бошоп, үкенеп йөрөмәй торған кеше булыуы миңә лә ҡулай һәм тыныс. Ошондай яҡшы сифаттарын малайҙарына ла тапшырып, артабан да күңелле йәшәүен теләйбеҙ Айҙар Азамат улы Байтимеровҡа.

**Таңсулпан РӘСҮЛ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# БЫЛ ЯРҘАМ КӘРӘК!

**Башҡортостан Башлығы мобилизацияланған ир-егеттәрҙең ғаиләләренә ярҙам сараларын киңәйтеү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.**

Документта эш урындарын һаҡлауҙың, кредиттар буйынса льготаларҙың, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙең федераль гарантияларына өҫтәмә рәүештә яугирҙарҙың ғаиләләренә тағы ла 30-ға яҡын ярҙам сараһы ҡаралған. "Улар балалар баҡсаһына ҡабул итеүгә, бала ҡараған өсөн түләүгә, балалар аҙығы менән тәьмин итеүгә, йәмәғәт транспортында бушлай йөрөүгә, балалар һауыҡтырыу лагерҙарына юлламаларға, колледж уҡыусыларын һәм студенттарын ҡайнар аш менән тәьмин итеүгә ҡағыла. Оло йәштәге туғандары һәм инвалидтар өйҙә бушлай социаль хеҙмәттәр менән файҙаланырға мөмкин. Мобилизацияланғандарҙың ғаиләләренә "Торлаҡ төҙөлөшөнә аҡса туплау" программаһы шарттары еңелләштерелә, Торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү фонды аша баҙар хаҡынан түбәнерәк хаҡҡа торлаҡ һатып алыу мөмкинлеге бирелә. Ошондай ярҙам саралары бик күп", - тине Башҡортостан Башлығы Республика көнөнә арналған тантаналы йыйылыштағы сығышында.

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ



**Башҡортостанда йыл башынан алып ата-әсәләргә беренсе һәм икенсе бала тыуғандан һуң 12,6 мең сертификат тапшырылды, тип хәбәр итә Башҡортостан буйынса Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

2020 йылдың апреленән алып Пенсия фонды Әсәлек капиталына сертификатты ата-әсәләргә уларҙың шәхси кабинеты аша электрон рәүештә ебәрә башланы. Шул уҡ ваҡытта ошо кабинет аша аҡсаны тотоноу хаҡында ғариза бирергә һәм ҡалдыҡ аҡсаны контролгә алырға мөмкин. Ата-әсә, шулай итеп, бала тыуғандан һуң сертификат юллап йөрөмәйенсә лә Әсәлек капиталын тотона ала. Былтырҙан алып Әсәлек капиталын алыу һәм уны теләгән маҡсатта тотоноу ваҡыты тиҙләтелде. Сертификат тултырыу - 5 эш көнөнә, аҡсаны тотоноуға йүнәлтеү ваҡыты 10 эш көнөнә тиклем кәметелде. "Әсәлек капиталы тураһында закон сыҡҡандан алып республикала 391 мең дәүләт сертификаты бирелде. Уны файҙаланыуҙың бөтөн йүнәлештәрен тәьмин итеү өсөн 132,7 млрд һум аҡса бүленде. Йыл башынан алып Башҡортостанда 13 мең ғаилә Әсәлек капиталына сертификатты электрон рәүештә алды", - тине Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров.

# БАЛА ТЫУҒАНДА...



**2023 йылда ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм әсәлек менән бәйле пособиеларҙың максималь суммаһы арта.**

Бала тыуғанда бер тапҡыр түләнә торған пособие 23 011 һумға тиклем күтәрелә, 140 көнлөк декрет ялы ваҡытында йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиеның максималь күләме 383 179 һум була, ә ауырығанлыҡ ҡағыҙҙары буйынса максималь түләү күләме - айына 83 204 һум.

"Бала тыуғанда бер тапҡыр түләнә торған пособие фактик инфляция кимәле буйынса индексациялана. Ошондай индексация 2023 йылдың 1 февраленән башҡарыла. Бюджет проектында ҡаралған индексацияны иҫәпкә алғанда бер тапҡыр бирелә торған түләү 23 011 һум була. Ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм йәш ярымға тиклемге баланы ҡарау буйынса пособиелар күләме уҙған ике йылда страховкаланған эш хаҡы кимәленә бәйле. 2023 йылда ла түләүҙәрҙең максималь суммаһы арттырыла", - тиелә Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы сайтындағы белдереүҙә. 2023 йылда эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы буйынса максималь түләү түбәндәгесә булырға тейеш: 8 һәм унан күберәк страховка стажы - айына 83 204 һум, 5-8 йыл стаж - 66 564 һум, 5 йылға тиклем стаж - 49 923 һум.

# ҠОЛАҠ ҺАЛДЫЛАР...



**Рәсәйҙең Закон сығарыусылар советы Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының балалар һәм үҫмерҙәр араһында "чайлдфри" идеологияһын таратыуҙы тыйыу тураһында башланғысын хупланы.**

Яҡын арала тейешле закон проекты Дәүләт Думаһына индерелә. Был хаҡта республика парламенты рәйесе Константин Толкачевҡа һылтанма менән Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Закон проекты "Балаларҙы уларҙың һаулығына һәм үҫешенә зыян килтергән мәғлүмәттән яҡлау тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индереүҙе күҙ уңында тота. Балалар араһында таратыу тыйылған мәғлүмәт исемлегенә үҙ теләгең менән бала табыуҙан баш тартыуҙы пропагандалауҙы һәм балаһыҙлыҡ идеологияһын индерергә тәҡдим ителә. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы был башланғысты яҙ көнө үк индерҙе. Закон сығарыусылар советының хуплауынан тыш, закон проектына Дәүләт Думаһынан һәм Федерация Советынан ыңғай һығымталар килде.

# ҠАТЫН-ҠЫҘ КҮБЕРӘК



**Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостанда 2022 йылдың 1 ғинуарына 4 миллиондан ашыу кеше иҫәпләнде. Шуның 2,121 миллионға яҡыны - ҡатын-ҡыҙ һәм 1,881 миллион тирәһе - ир-егет. Был халыҡтың дөйөм һанының 53 һәм 47 проценты.**

Башҡортостан статистикаһы мәғлүмәттәре буйынса эшкә һәләтле йәштәгеләрҙән йәшерәктәрҙең һаны 816,4 мең кешенән ашыу. Шуның 419 меңдән ашыуы - малайҙар һәм үҫмерҙәр, 397,3 меңдән күберәге - ҡыҙҙар. Эшкә яраҡлы йәштәгеләрҙең һаны былтырғы менән сағыштырғанда 42 меңгә артҡан һәм 2,264 миллионға еткән. Шуның 1,187 миллионға яҡыны - ир-егет, 1,077 миллиондан ашыуы ҡатын-ҡыҙ.

Эшкә яраҡлы йәштәгеләрҙән өлкәндәр һаны киреһенсә кәмегән - 921 мең кеше. Шуның 275 мең тирәһе - ир-егет, 646 меңдән ашыуы - ҡатын-ҡыҙ.

Алдан килтерелгән мәғлүмәттәр буйынса 2021 йылдың 1 октябренә Рәсәй Федерацияһында даими йәшәгән 147,2 миллион кеше иҫәпкә алынған. 2010 йыл менән сағыштырғанда ил халҡы 2,05 миллион кешегә артҡан. Ә Башҡортостанда даими йәшәгән 4,091 миллион кеше иҫәпкә алынған. 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу йомғаҡтары буйынса республика халҡы 0,5 процентҡа күбәйгән. Баш ҡалала йәшәүселәр һаны 9 процентҡа артҡан. Бындай динамика Өфөгә кеше һаны буйынса Омскиҙы, Дондағы Ростовты үтеп китергә һәм Һамар, Силәбе ҡалаларына яҡынлашырға булышлыҡ итте.

# БЕР ҠАҘАНДА...

## ике әртис башы

**Сәлимә менән Салауат ЮЛДАШБАЕВтарҙы сәнғәт юлы осраштыра һәм ҡауыштыра. Ике йәш йөрәк Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡып йөрөгәндә танышалар һәм дуҫлыҡтары бер нисә йыл дауам итеп, институттың аҙаҡҡы курсында өйләнешәләр. Сәлимә - күренекле композитор Юлай Моратовтың ҡыҙы. Салауат шулай уҡ йырлы-моңло ғаиләлә тыуып үҫә. Бөгөнгө көндә улар икеһе лә - ижадта үҙҙәрен тапҡан тәжрибәле артистар. Салауат Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында ҡабатланмаҫ образдар тыуҙыра, Сәлимә Юлдашбаева "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбленең алыштырғыһыҙ солисы. Беҙҙең әңгәмә ижади ғаилә Юлдашбаевтарҙың эске донъяһын, уй-ынтылыштарын, шулай уҡ... бер ҡаҙанға нисек итеп ике әртис башы һыйышып йәшәүен аңларға ярҙам итер.**



**Һөйләшеүҙе һеҙҙең нисек танышыуҙан башлайыҡ...**

**Сәлимә:** Сәнғәт академияһында беҙ икебеҙ ике корпуста уҡыныҡ - Салауат театр факультетында, ә мин музыка буйынса хор-дирижерлыҡ бүлегендә. Бер бүлмәлә йәшәгән Нурзилә исемле дуҫым бер көндө миңә шулай тине: "Шундай һәйбәт бер егет бар, әйҙә, һине уның менән таныштырам". Ғәҙәттә, беҙ дәрестәрҙән һәм эштән һуң кире академияға барып, музыка буйынса өҫтәмә шөғөлләнә торғайныҡ, унда фортепьянола уйнайбыҙ, төрлө әҫәрҙәр ятлайбыҙ. Шуға уның әйткәненә бик иғтибар ҙа бирмәнем. Кискеһен музыка менән шөғөлләнеп, һуң ғына ҡайтып инһәм, беҙҙең бүлмәлә ике егет ултыра. Шуларҙың береһе Салауат булып сыҡты. Нурзилә, тағы бер нисә ҡыҙ бар ине. Күмәкләп сәй эсеп алдыҡ. Шунда Салауат менән фотоальбом ҡараныҡ. Мин үҙемдең туғандарым, ғаиләм тураһында һөйләнем. Салауат та үҙенең ғаиләһе тураһында һөйләне. Бына шул мәл минең хәтерҙә ныҡ тороп ҡалған.

**Салауатты тәү күргәндә ниндәй тойғолар булды. Күңел уны шундуҡ ҡабул иттеме?**

**Сәлимә:** Ниндәйҙер хис-тойғо тыуҙы, тип әйтмәҫ инем. Ул йөҙгә ныҡ йәш, хатта бала һымаҡ күренде миңә башта. Сәсенең ныҡ ҡыҫҡа итеп алынғанына иғтибар иттем. Артабан аралашҡан һайын уның аҡыллы, етди егет икәнен нығыраҡ аңлай башланым. Атаһы-әсәһе, һылыуы, туғандары тураһында күберәк һөйләй башлағас, ҡалай туғандарын ярата, матур итеп фекер йөрөтә, был егет яҡшы ғаилә башлығы буласаҡ, тип уйланым. Мин уға тиклем театрға бик бармай ҙа инем, бергәләп концерттарға, театрға йөрөй башланыҡ, Салауат актерлыҡҡа уҡығас, ошо тамашаларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянды.

**Салауат, ә һинең Сәлимәне тәү күргән сағың хәтереңдә нисек тороп ҡалған?**

**Салауат:** Өфө сәнғәт академияһына уҡырға индем, дөйөм ятаҡҡа урынлаштым, уҡый башланыҡ. Ноябрь айҙарында дуҫ егет Морат: "Бер ҡыҙыҡай менән таныштым. Уның дуҫы бар, һинең менән таныштырырға уйлайым", - тине. Беҙ яңы ғына ҡалаға килеп уҡый башлаған йәштәр, яңы кешеләр менән танышыу ҡыҙыҡ, шуға ризалаштым. Кис ҡыҙҙарҙың бүлмәләренә барҙыҡ. Мин танышасаҡ Сәлимә ҡайтмағайны әле, уны көтөп ултырабыҙ. Бына бер саҡ ишектән матур итеп йылмайып Сәлимә килеп инде. Шунда мин уны беренсе тапҡыр күрҙем. "О-о-о-о, ҡалай матур ҡыҙыҡай!" тип уйлап ҡуйҙым. Матурлығы ғына түгел, мөләйемлеге лә шундуҡ күңелгә ятты. Аралашып киттек. Унан инде ятаҡ коридорында, Өфө урамдарында һөйләшеп үткәргән кистәр башланды.

Сәлимә менән танышҡанға хәтлем бер ҡыҙыҡ хәл булды. Мин 10-11-се кластарҙа уҡып йөрөгәндә Заһит Ҡунафиндың бер яңы йыры сыҡҡайны: "Ҡалдырма, иркәм, кире ҡайтҡым килә..." Беҙ, малайҙар, ул йырҙы гел тыңлап йөрөр булдыҡ. Миңә ул йырҙың ҡушымтаһы бигерәк оҡшай ине. Уны бер ҡыҙ башҡара ине. "Ох, был ҡыҙыҡай матурҙыр инде, тауышы ла матур бит", - тигән уй тыуғайны шул саҡта уҡ башымда. Артабан институтҡа уҡырға индем, Сәлимә менән таныштым. Ҡышҡы каникулдарҙан һуң шул йыр яҙылған дискты тотоп, Сәлимәгә киттем. Коридорҙа ултырабыҙ, "Һинә бер йыр тыңлатҡым килә", тип, йырҙы ҡуйҙым. Сәлимә: "О-о-о, быны мин йырлайым бит!" - тимәһенме! Киләсәгендә нисек күҙ алдына килтерәһең, нисек фаразлайһың, шулай буласаҡ, тип әйтәләр бит. Бына шулай хыялымда йөрөткән үҙем һоҡланған тауышлы ҡыҙ менән осраштым да ҡуйҙым.

**Нисә йыл дуҫлашып йөрөнөгөҙ?**

**Сәлимә:** Беренсе курстың ноябренән алып мин 5-се курсты бөткәнсе дуҫлашып йөрөнөк, шунан өйләнештек.

**Салауат:** Апрелдә никах булды, августа туй үткәрҙек.

**Сәлимә:** Әсәйем колледжа уҡып йөрөгәндә атайым менән таныша, аҙаҡ Стәрлетамаҡ институтында уҡый һәм һуңғы курста декабрь айында өйләнешәләр. Мин бәләкәй саҡтан, нишләптер, минең дә яҙмышым шулай булыр, уҡып бөткәс, кейәүгә сығырмын, тип уйланым. Күңелгә ныҡ һалғанмын шикелле был уйҙы.

**Улай булғас, Сәлимә, тағы ла бер һорау бирәйем. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа "Тормош юлдашым кем булыр?" тигәнерәк уйҙар килмәй ҡалмайҙыр бит инде. Үҙең тыуҙырған хыял, образ була торғайнымы?**

**Сәлимә:** Иң мөһиме, буласаҡ кейәүем яҡшы атай булһын, тип уйлай торғайным. Һәм, ниңәлер, алыҫ-алыҫ яҡтарҙан булыр, тип күҙ алдына килтерә инем. Киреһенсә килеп сыҡты, Салауат Ейәнсура районынан, Сибайға әллә ни алыҫ түгел, Аллаға шөкөр. Әлбиттә, атайыма оҡшағаныраҡ булһын, тип хыяллана инем.

**Ә бармы оҡшашлыҡ? Ниндәйҙер һыҙат, сифат?**

**Сәлимә:** Музыка яҙмаһа ла, шиғырҙар яҙа. Атайым һымаҡ тыныс холоҡло. Кәрәк саҡта йомшаҡ, кәрәк саҡта ҡаты була белә.

**Салауат, ниндәйерәк һыҙаттар ғаиләлә һалына? Ниндәй ғаиләлә үҫтең?**

**Салауат:** Атайым башта Күмертауҙа физкультура техникумында уҡый, шунан Силәбелә юғары уҡыу йортон тамамлай. Мин бәләкәй саҡта Иҫәнғолдоң 1-се мәктәбендә эшләп йөрөнө, шунан милицияға эшкә күсте. Замананда көрәш буйынса абсолют чемпион булып, мотоцикл алғайны, уны миңә бүләк итте. Атайым спортты үҙ итһә лә, сәнғәтте ныҡ ярата, ҡурайҙа, баянда уйнай, йырлай ҙа. Әсәйем шәфҡәт туташы. Ул да бик әрттә түгел, бейергә ярата, балаларға әкиәттәр ҡуя. Әсәйемдең атаһы ла, әсәһе лә клуб хеҙмәткәрҙәре булдылар. Өләсәйем бейей торғайны, ҡартатайым киномеханик булып эшләне. Бына шундай сәнғәткә, мәҙәниәткә хеҙмәт иткән ғаиләлә үҫтем инде мин.

**Өйҙә ниндәй булды мөнәсәбәт? Талапсанлыҡ көслө инеме, әллә ирек ҡуйҙылармы?**

**Салауат:** Юҡ, дилбегәне артыҡ бушатманылар. Һәр хәлдә, ярай-ярамай, тигәндә белеп үҫтек. Ни өсөн ярай йәки ярамай икәнен балаға аңлата белеү кәрәк. Ғөмүмән әйткәндә, "ярамай"ға асыҡ яуабы булырға тейеш. Былай ғына "ярамай", тип әйтәһең икән, бала аңламай ҙа, һине тыңламаясаҡ та. Аңһыҙ үҫәсәк, йәки үҙенә бикләнәсәк. Ә аңлап үҫһә, үҙе лә аңлата беләсәк. Уның бер әйтеүҙән генә аңламауы ла бар, тимәк, тағы аңлатырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта иҫтә тоторға тейешһең: ябып-тыйып, уның күңелен бикләп ҡуйма. Был еңел түгел, әлбиттә.

**Һөнәреңдең үҙенсәлеге нимәлә? Образға ингәндә үҙ булмышыңдан китеп буламы?**

**Салауат:** Актер булғас, төрлө образдарға инергә тура килә. Шулай ҙа, нисек кенә тырышһаң да, тотошлайы менән үҙлегеңдән китеп булмай. Уҡытыусыбыҙ Таңсулпан Бабичева: "Салауат сусканы һынландырһа ла таҙа сусканы, мәҙәниәтле сусканы һынландырыр ул", - тип көлә торғайны. Һин ниндәйҙер роль башҡарырға тейешһең. Башҡараһың да, тик барыбер һин - һин булып ҡалаһың. Нисек кенә булмаһын, шәхесең ролеңдә барыбер күренәсәк. Улар бер-береһенән бөтөнләй үк айырыла алмай. Ғөмүмән, үҙлегеңдән китергә лә кәрәкмәй, китһәң, аҡылдан яҙыуың ихтимал.

**Һөнәреңә килгәндә, был юлды үҙең һайланыңмы?**

**Салауат:** Хатта үҙем дә аңлата алмайым. Мәктәпте тамамлар алдынан әсәйатай: "Ҡайҙа уҡырға бараһың?" - тип һорай. Мин бик әйтеп бармайым. Медицина университетына барыу тураһында ла уйлана инем. Унда имтихан бирә торған фәндәрҙән яҡшы уҡыным, ул фәндәрҙе яраттым. Ләкин медик булам тиһәң, ныҡ шөғөлләнергә, күп уҡырға кәрәк. Ә мин бер урында оҙаҡ сыҙап ултыра торған кеше түгелмен. "Был һөнәрҙәрҙең бөтәһен дә берләштерергә була бит", тип уйланым. Актер булараҡ, врач булып та уйнарға була, йәнәһе.

**Сәлимә:** Тик әлегә табип менән полицейскийҙы уйнағаның юҡ.

**Уйнап ҡарау тигәндән. Уҡырға инергә килгәндә этюд эшләп ҡарайҙар бит. Элекке артистарҙың бәғзеләре: "Уҡырға килдек, ә этюдтың нимә икәнен белмәй инек", - тип көлөп хәтерләйҙәр...**

**Салауат:** Иҫәнғолда саҡта йыр түңәрәгендә шөғөлләндем, ә этюд буйынса... Оялсанлыҡ көслө бит беҙҙә. Шуға ла этюдтар ауырыраҡ бирелде миңә. Был юҫыҡта Азамат Юлдашбаев ағайымдың ярҙамы тос булды. Ул миңә этюдтың сценарийын яҙып бирҙе. Үҙемсә шөғөлләнгән булдым инде шул сценарий буйынса. Уҡырға инергә килгәндәрҙе күҙәтәм дә, күңел ҡайта: "Ох, был мотлаҡ уҡырға инәсәк, ҡиәфәте - артистыҡы, тегенеһе лә инер, ныҡ ышанyслы тота үҙен, бында миңә

***✓ Ике маятникты бәүелтергә ҡуйһаң, улар бер иш бәүелә башлай. Ҡырҡ маятник та шулай, артабан бер булып бергә эшләй башлай. Кешеләр бергә булһалар, бер тулҡында йәшәйҙәр.***

урын булмаҫ, ни матур итеп йырлай, ни бейей белмәйем", - тип өмөтһеҙләккә биреләм.

**Һин шулай тип күҙәткәндәр араһынан кемдәр хәтерҙә ҡалған?**

**Салауат:** "Илгиз Таһировтың йөҙө Салауат Юлаевтыҡына оҡшаған - быны алалар, Роберт Йылҡыбаев ҡурайҙа, думбырала уйнай, һәйбәт бейей, был да уҡырға инә", тип уйланым. Ысынлап та, уҡырға инделәр, Роберт хәҙер ГИТИСта, ВГИКта уҡытып йөрөй.

**Сәлимә, һинең уҡырға инеү тарихы нисек булды? Сәнғәткә килеү хыял инеме, әллә атай-әсәй теләгеме?**

**Сәлимә:** Әсәйҙең роле ҙур, сөнки ул бәтәбеҙҙе лә музыка мәктәбенә уҡырға бирҙе. 9-сы кластан һуң Өфө сәнғәт училищеһының музыка бүлегендә уҡый башланым. Һис үкенмәйем, минә оҡшай, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамблендә яратып эшләйем. Игеҙәгем Кәрим һәм Салауат ҡустым менән Өфөгә бер йылда килдек. Беҙҙең ғаиләләге ун баланың да музыка белеме бар.

Өфө сәнғәт институтының 1-се курсында уҡығанда опера һәм балет театрында эшләй башланым. 3-сө курста уҡып йөрөгәндә "Мираҫ"ты асҡайнылар, тағы ла бер йылдан ансамблдең төп хормейстеры Эльвира Ғизетдин ҡыҙы Ғәйфуллина үҙенә саҡырып алды. Мин опера театрында, "Мираҫ"та параллель эшләп һәм уҡып та йөрөнөм. Балалар тыуғас, театрҙан китергә мәжбүр булдым. Хәҙер Самираға 11 йәш, Тамерланға - 9, Арыҫланға 7 йәш. Беҙ "Йәшел саҡалыҡ" микрорайонында йәшәһәк тә, балаларыбыҙ Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында уҡыйҙар. Башҡорт мәктәптәре Өфөлә әҙ. Шуға ла беҙҙең өсөн балаларҙы ҡайҙа уҡырға бирергә тигән һорау ҙа тыуманы. Күн һайын мәктәпкә үҙебеҙ алып барабыҙ, алып ҡайтабыҙ.

**Салауат:** Атай-әсәй булараҡ, туған тел тураһында хәстәрлек беҙҙең өсөн бик мөһим. Телгә һөйөү уятырға кәрәк. Ҡыҙыҡһыныу! Ә ҡыҙыҡһыныуҙы һинең аша биреләһ, быны онотоорға ярамай. Аллаһы Тәғәлә балаға айырым күнел биргән. Ул үҫә һәм атай-әсәйҙән айырыла. Ул туған телде, туған мөхитте, башҡортлоҡто үҙенең киммәлендә дауам итә. Шуның өсөн уға ваҡытында рух һалып өлгөрөргә, ярҙам итергә кәрәк. Бигерәк тә туған телебеҙҙе матур яктан күрһәтеп, ҡыҙыҡһыныу уятырға кәрәк.

**Сәлимә:** Һин башҡортһоң, һин башҡортса һөйләшергә тейешһең, тип әйтергә, аңлатырға, әгәр ҙә һин башҡортса һөйләшмәһәң, телебеҙҙең яйлап-яйлап бөтөүе лә бар бит, тип күңеленә уй һалырға кәрәк.

**Күп балалары ғаиләлә туғанлыҡ тойғоһо көслө була. Улар бер-береһенә ярҙам итеп үҫә. Һеҙ үҫкән ғаиләләге мөнәсәбәтте белгегә килә.**

**Сәлимә:** Сибайҙағы беҙҙең өйҙән бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәне. Йәй етте ниһә, бөтөн абитуриенттар беҙҙең өйгә килеп тула. Туғандар, дуҫтар, таныштар балаларын уҡырға индерергә булһа, беҙгә алып киләләр, әсәйем уларға һәр ваҡыт ярҙам итә торғайны - кәрәк булһа, ректорға, директорға ла инеп һөйләшә. Урамда танышы осраһа, мотлаҡ уны сәй эсергә алып инә. Бына шундай мөнәсәбәткә өйрәндек беҙ ғаиләлә.

Атайға килгәндә, нота танымағандарға, һәүәскәрҙәргә үҙе нота яҙа, фонограммалар эшләй торғайны, тәжрибәле йырсыларға ныҡ ярҙам итте, фонограммаларын бушлай таратты. Композиторлыҡ эшен башлаған ғына сағында ул ауылдар буйлап йөрөгән. Берәй кешенең юбилейымы, тыуған көнөмө, сығарылыш кисәһеме, туймы - аппаратураһы менән барып, музыка яғынан ярҙам итә ине. Бушлай. Атай-әсәйемдә бына шулай ярҙамсыллыҡ сифаты ныҡ көслө булды. Әле аңыраҡ ҡына халыҡ Сибай һәм Баймаҡ ҡала хакимиәттәренә берәй урамға Юлай Моратов исемен биреү тураһында юллама ла яҙғайны.

Мине күптәр Зөлфиә Ханнановаға оҡшата. "Туғаны булаһыңмы, ҡыҙы түгелһеңме?" тип һорайҙар. Зөлфиә апай һөйләүенсә, ул бер мәл шиғыр яҙыуҙан туҡтаған. Бөтән яҙмайым, илһам юҡ, тип йөрөгәнендә радионан үҙенең һүҙҙәренә яҙылған йыр ишетеп ҡала. Баҡтиһән, атайым Зөлфиә апайҙың "Мин бәхетле, әсәйем бар" тигән шиғырына йыр яҙған икән. Уны Гөлсөм Бикбулатова башҡара. "Шул йырҙы ишеткәндән һуң, яңынан ҡанатландым һәм илһамды дауам иттем", тине Зөлфиә апай. Атайым күп шағирҙарҙың һүҙҙәренә йырҙар яҙҙы.

**Ғаиләлә төрлө хәлдәр ҙә була, бер мәсьәләгә ике төрлө ҡараш тыумай ҡалмайҙыр һеҙҙә лә?**

**Сәлимә:** Аңлашылмаусылыҡтар ҙа булғылай, бер мәсьәләгә төрлө фекер булыуы ла тәбиғи. Мин бәхәсләшергә яратам, фекеремде мотлаҡ иҫбат итәм, тигән маҡсаттан түгел, әлбиттә. Ҡайһы саҡ Салауат уны иҫбат итергә маташыу тип тә ҡабул итә шикелле. Минә бәхәсләшеү оҡшай. Шундай мәлдә нимәнелер асыҡлайһың, уртаҡ фекергә киләһен. Етди мәсьәлә булғанда, уйлап-үлсәп, уртаҡ ҡарашҡа киләбеҙ.

**Салауат:** Әллә нисәмә йыл бергә йәшәйбеҙ һәм бер-беребеҙҙе белеп бөткәнбеҙ, тип әйтеп булмай, әлбиттә. Хатта иртәнсәк кеше бер кәйеф менән уяна, көндөҙ икенсе кәйефтә була. Әҙәм балаһы көн һайын үҙгәреп тора, беҙ ҡай саҡ шуны онотабыҙ. Иң мөһиме, берберенде тыңлай белеү, ысын күңелдән аңларға тырышыу һәм шул уҡ ваҡытта, уны бөтөнләй аңлап бөтмәйәсәгеңде лә белергә кәрәк. Сөнки икенсе кешене түгел, кеше үҙен үҙе лә аңлап бөтә алмай. Һәр кемдең үҙ дәрәсләге бар. Бер тулҡында йәшәргә тырышырға кәрәк.

**Ғаилә башлығы, йорт хужаһы тигәндә нисек аңлайһың? Ғаилә ҡорғанда ниндәй дөйөм маҡсаттарығыҙ бар ине?**

**Салауат:** Башҡорт аттары өйөрөнә ҡараһағыҙ, өйөрҙә утыҙҡырҡ ат тупланған була, ә башлығы арыраҡ китеп, уларҙы ҡарап тора. Сөнки ул үҙ өйөрөн ҡыҙғана, ситтән тороп күрә белергә тейеш. Өйөр эсендә булһа, офоҡ тарая. Ә ҡырҙараҡ тороу, ул беҙҙең менән түгел, тигәнде аңлатмай. Ғаиләбашлығының да маҡсаты шулайыраҡтыр: үҙе йөкмәгән яуаплылыҡты атҡарыу өсөн ул ғаилә эсендәге бар мөхитте, мөнәсәбәттәрҙе, ихтыяжды күрергә, аңларға, шунан сығып эш итә белергә тейеш.

**Ял итеү хәлдәре нисек?**

**Сәлимә:** Йышыраҡ ауылға туғандарға ҡайтабыҙ, тыуған яҡтарға. Элек ике яҡҡа ла бер иш ваҡыт бүлә инек Минең атай-әсәй булмаған, хәҙер йышыраҡ Ейәнсураға ҡайтабыҙ.

**Салауат:** Туғандар менән аралашып йәшәргә тейешбеҙ. Балалар яҡындарын белеп-ҡатнашып үҫергә тейештәр. Ә һуңынан үҙҙәре хәл итер. Әлегә улар өсөн беҙ яуаплы. Балаларҙың бала сағы тиҙ генә үтеп китә бит, улар күңелендә матур хәтирәләр ҡалһын, тип тырышабыҙ. Сибай яғында апалары, ағалары, һеңлеләре, ҡустылары - ике туғандары күп, улар аралашып үҫергә тейештәр. Мин был осраҡта туғанлыҡты маятник менән сағыштырып инем. Ике маятникты бәүелтергә ҡуйһаң, улар бер иш бәүелә башлай. Өс маятникты өс яҡҡа бәүелтһән, бер ни тиклем ваҡыттан улар бергә бәүелә башлай. Унды ебәрһән, улар ҙа, төрлөһө төрлө яҡҡа түгел, бер заман бер булып бәүелергә тотона. Ҡырҡ маятник та шулай, артабан бер булып бергә эшләй башлай. Был нимәне аңлата? Кешеләр бергә булһалар, бер тулҡында йәшәйҙәр. Беҙ ҡайта алмаһаҡ, атай-әсәйҙәргә рәхмәт, балаларҙы үҙҙәре килеп алып ҡайтып китәләр. Атайымдың тыуған ауылы Самаҙыла йыл һайын берәй сара үткәрәләр. Башҡорт телен бына шундай саралар аша өйрәтеп була балаларға, был - бер. Икенсенән, Ислам ҡанундарын өйрәтеү мөһим. Әгәр ҙә милләтте бөтөрөргә теләһәң, диненән һәм еренән айыр, тип әйткәндәр бит. Ял итеүгә килгәндә, яңы ерҙәрҙе күрергә тырышабыҙ. Ғаилә менән ике тапҡыр Ҡырымға барып ҡайттыҡ. Башҡортостанда хәҙер туризм үҫә бара. Һалда ағыу әлегә беҙҙең хыял булып ҡала.

**Балаларығыҙ һеҙҙең һөнәр менән ҡыҙыҡһыналармы?**

**Сәлимә:** Самира менән Тамерланды балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә ниндәй генә сара булмаһын, йырлата торғайнылар. Арыҫлан әҙерәк йомоғораҡ, ваҡыты еткәс асылыр тип уйлайым. Тамерлан театрҙа әллә нисә тапҡыр уйнаны инде, кинола ла төштө. Сәнғәткә ынтылыштары бар.

**Салауат:** Балаға донъяны төрлө яҡлап асып бирергә тейешбеҙ. Улар үҙҙәрен бар өлкәлә һынап ҡарарға тейештәр. Тамерлан футболға йөрөп ҡараны: "Туп тибергә яратам, командала уйнарға яратмайым", - тине. Ике малай ҙа тхеквондоға йөрөп алдылар, оҡшатманылар. Хәҙер көрәшкә йөрөйҙәр. Өлкәндәре бассейнға йөрөй, бәләкәсе уны оҡшатманы. Ҡыҙыбыҙ тхеквондоға йөрөй.

**Ғаиләгә ваҡытың әҙ ҡала, тип, бер-берегеҙгә дәғүә белдергәнегеҙ юҡмы?**

**Сәлимә:** Беҙ икебеҙ ҙә сәнғәт кешеһе булғас, аңлайбыҙ. Әле яңыраҡ ҡына 18 көнгә Себергә сығып киттек. Салауат бер үҙе балалар менән ултырып ҡалды. Салауат бер нисә районда гастролдә йөрөп ҡайтты. Мин балаларҙы мәктәпкә йөрөттөм. Салауатһыҙ ҡыйыныраҡ, әлбиттә. Ҡайһы берҙә уның көн дә спектаклдәр булып китә, ҡайһы берҙә - минең концерттар. Эшебеҙ шундай булғас, бер-беребеҙҙе аңлап торабыҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ



# ҺЫЛЫУЛЫҠ ҺЫУ БУЙЛАТАМЫ?

**Яңыраҡ интернеттан ошондайыраҡ ҡыҙыҡлы бер фекер уҡығайным: "Хоҙай менән һөйләшкәндә ҡатын-ҡыҙ тураһында уйлауға ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшеп, Хоҙайҙы иҫкә төшөрөү яҡшыраҡ". Байтаҡ ваҡыт был фекерҙе күңелемдә йөрөтөп, унда һалынған йөкмәткене аңларға тырышып ҡараным. Килеп сыҡманы. Тәү ҡарамаҡҡа юғарыла килтерелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү еңел генә һымаҡ тойолһа ла, "Ямғыр менән ҡар икеһе лә һыуҙан тора" тигән һымаҡ ябай логика менән генә бығаа өлгәшеү мөмкин түгел ине. Шулай ҙа дәлилдәремде шундайыраҡ тәртиптә теҙҙем:**

**А** Фрунцуз кинорежиссеры, сценарисы һәм яҙыусыһы Марк Жильбер Соважон ҡыҙыҡлы бер фекер әйткән: "Матур ҡатын-ҡыҙ аҡыллы булырға тейеш түгел - сөнки уның аҡылы иғтибарҙы ситкә йүнәлтә". Нисек килеп сыға: әгәр ҙә матур ҡатын-ҡыҙ аҡыллы икән, ир-ат уның аҡылына күберәк иғтибар итеп, матурлығын тулыһынса баһалай алмаясаҡмы? Нескә зат, тимәк, йә матур, йә аҡыллы булырға тейешме? Әгәр ҙә ундай ҡатын-ҡыҙға бер юлы матурлығын да, аҡылын да баһалай алырлыҡ көслө зат осраһа, ул сағында нисек? Беҙҙең халыҡта иһә "Һылыулыҡ һыу буйлатмай" тиҙәр. "Матур матур түгел, аҡыллы матур", "Матурлыҡ туйҙа кәрәк, егәрлелек көн дә кәрәк" тип тә әйтәләр. Тимәк, беҙҙә барыбер ҙә ҡатын-ҡыҙҙың аҡылы нығыраҡ баһалана булып килеп сыға...

**Б** Бер танышым быйыл йәй отпускыһы ваҡытында Ырымбур яғында йөрөгән һәм юлдағы күренештәрҙе фотоға төшөрөп, "Бәйләнештә" селтәрендәге диуарына ҡуйып, шунда уҡ фекерҙәрен яҙа барған. Бер фотоһында беренсе планда ергә сәнселеп торған таш өйөмө, икенсе планда һөҙәк тау һырттары, өсөнсө планда икһеҙ-сикһеҙ дала. Фото өҫтөндә шундай текст яҙылған: "Ырымбур далаһын туҙбаш йыландар баҫып алған. Һөйләүҙәренсә, улар өйҙәргә лә килеп инәләр. Һаҡ булығыҙ!"

Сәйәхәтсе таштар араһындағы йыландарға иғтибарын йүнәлткән. Мин, мәҫәлән, туҙбаштарҙы бөтөнләй иғтибарға ла алмайынса, тау һырттарына, икһеҙ-сикһеҙ далаға һоҡландым был фотола. Ҡыҫҡаһы, кем нимәне теләй, шуны күрә, шуға иғтибарын төбәй инде, тимәксемен. Минеңсә, матур һәм аҡыллы ҡыҙҙы ла ир-ат үҙенең интеллектуаль кимәленә ҡарап баһалайҙыр.

**В** Ир-ат диҡҡәтенең иң мөһим объекттарының иң мөһиме - нескә зат, ҡатын-ҡыҙ! Көслө затты тәбиғәт шундай итеп яралтҡан, уның интеллекты, ихтыяры, алған тәрбиәһе, башҡа төрлө сифаттары ҡатын-ҡыҙға ҡарата булған тартыу көсөн тыя алмай. Шуға күрә лә ир-ат Хоҙай менән һөйләшкәндә лә нескә зат тураһында уйлап, иғтибарын ситкә йүнәлтеүе бик ихтимал. Был сағында инде Хоҙай менән һөйләшеү килеп сыҡмаҫы көн кеүек асыҡ. Аллаһ менән һөйләшеүгә килгәндә иһә, беҙ доға, намаҙ уҡыуҙы, зекер әйтеүҙе Уның менән һөйләшеүгә тиңләйбеҙ. Тимәк, ҡатын-ҡыҙ тураһында уйлаһаң - намаҙ уҡып, намаҙ уҡыһаң - ҡатын-ҡыҙ менән һөйләшеп булмай...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Күп кешеләрҙә, шул иҫәптән үҙен мосолман тип һанағандарҙа ла, ислам динендә ҡатын-ҡыҙ бар хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителгән, иренә ҡаршы һүҙ әйтергә ирке булмаған йән эйәһе итеп ҡабул ителә. Ләкин был дөрөҫ түгел. Ислам динендә Аллаһы Тәғәлә хаҡынан һуң икенсе урында әсәй кешенең хаҡы тороуы ла был ялғанды юҡҡа сығара. Ә хәләл ефеткә ҡарата мөнәсәбәткә килгәндә, Бәйғәмбәребеҙ "Үҙ ҡатындарына файҙалы булған һәм уларға яҡшы мөғәмәлә иткәндәрегеҙ һеҙҙең арала иң яҡшыларығыҙ", тип әйтә. Ир-егеттәрҙең ҡатындары алдындағы бурыстары күп дини китаптарҙа яҙылған. Түбәндә Ибраһим Хаҡҡиҙың "Мәғрифәтнамә" китабынан өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ. Уларҙа ир-егеттең ҡатынына (хәләл ефетенә) ҡарата мөнәсәбәте шәриғәт ҡүҙлегенән нисек булырға тейешлеге тураһында бәйән ителә.**

# ҠАТЫНЫ МЕНӘН АРАЛАШҠАНДА...

## ир-егет үтәргә тейешле 30 ҡағиҙә



**1.** Ир-егет ҡатын-ҡыҙ менән мөнәсәбәттәрҙә үҙенең тәбиғәтенең иң яҡшы яҡтарын күрһәтергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә күндәм холоҡло кешеләрҙе ярата. Насар холоҡ Аллаһы Тәғәләнең асыуын килтерә. Кемделер үпкәләтеү, кәмһетеү ҡәтғи тыйыу аҫтында. Башҡаларҙы ҡыйырһытыуҙан ҡәнәғәтлек алған насар холоҡло ирҙәргә хатта ғаилә ҡороу тыйыла.

**2.** Хәләл ефетең менән аралашҡанда йомшаҡ, илтифатлы булырға кәрәк. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салаллаһу ғәләйһи үәссәләм): "Үҙ ҡатындарына файҙалы булған һәм уларға яҡшы мөғәмәлә иткәндәрегеҙ һеҙҙең арала иң яҡшыларығыҙ", - тип әйтә.

**3.** Өйгә ҡайтҡас, ҡатыныңды "Әссәләмәғәләйкүм!" һүҙҙәре менән сәләмләү һәм уның эштәре, хәле хаҡында ҡыҙыҡһыныу мөһим.

**4.** Ҡатыныңдың кәйефе яҡшы икәнен күргәс, уны ҡосаҡлап, үбеп алырға кәрәк (ят күҙҙәр күрмәгәндә).

**5.** Ир-егет ҡатынының проблемаларын хәл итеүҙә әүҙем ҡатнашырға бурыслы. Борсоулы ултырғанын, кәйефе юҡлығын күргәндә күңеле ҡырылыуының сәбәбен мотлаҡ һорашырға кәрәк. Уны (ҡатынығыҙҙы) ныҡ итеп яратыуығыҙ хаҡында әйтегеҙ, уның кәйефен төшөргән нәмә үҙегеҙҙе лә борсоуон белдерегеҙ. Ҡатынығыҙ ишетергә теләгән матур һүҙҙәр менән уны тынысландырыу мөһим.

**6.** Ҡатынығыҙҙы тынысландырыу өсөн әлеге мәлдә үтәргә хәлегеҙҙән килмәгәнде лә вәғәҙә итегеҙ. Тағы ла кем һеҙҙән дә яҡшы уны тынысландыра ала? Ул бит бар өмөтөн һеҙгә төбәгән. Аллаһы Тәғәләнең идараһы буйынса һеҙ ғаиләне тәьмин итеүсе, балаларҙы тәрбиәләүсе уның берҙән-бер яратҡан кешеһе.

**7.** Бала тәрбиәләүҙә ҡатынығыҙға әүҙем ярҙам итегеҙ. Бәләкәй бала үҙенең көйһөҙләнеүҙәре менән әсәһенә көндөҙ ҙә, төндә лә йоҡо бирмәй. Ә ҙурыраҡ балалар тағы ла шуғыраҡ, тыңлашмаусан, үҙҙәренең ҡылыҡтары менән әсәләрен даими борсоуға һалыусан. Шуға күрә лә ҡатынығыҙға ярҙам итегеҙ һәм Аллаһ үҙегеҙгә лә ярҙам итәсәк.

**8.** Ҡатынығыҙҙы ҡулығыҙҙан килгәнсә иң яҡшы кейем менән тәьмин итегеҙ. Өй эсендә уға үҙе теләгәнсә биҙәнергә һәм кейенергә ирек бирегеҙ. Әммә урамға сыҡҡас та ул үҙенең матурлығын ят ир күҙҙәренән йәшерергә бурыслы.

**9.** Әгәр бай булһағыҙ, ҡатынығыҙ яратҡан хәләл ризыҡтарҙың иң яҡшыһын килтерегеҙ. Һеҙ ҡатынығыҙҙы иң яҡшы ризыҡ һәм кейем менән тәьмин итеүҙе үҙ бурысығыҙ итергә тейешһегеҙ. Мосолман ҡатын-ҡыҙы быға лайыҡлы. Имам Ғазали үҙенең "Бәхет эликсиры" китабында: "Мосолманға хәләл ефетенә ҡарата һаран булыу килешмәй, - тип яҙа. - Үтә исрафлы булырға ла ярамай, әммә ғаиләне ҡарауға сарыф ителгән аҡса Аллаһ әжерен саҙаҡаға ҡарағанда күберәк килтерә". Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә: "Изге һуғышҡа, ҡолдо азат итеүгә, ғаиләне ҡарауға сарыф ителгән сығымдар араһында ғаилә өсөн сарыф итеүселәр иң ҙур сауапты ала", - ти. Тағы ла бәгзе бер ғалимдар: "Ғаиләһен тәьмин итә алырлыҡ мөмкинлеге булмаған кешеләргә өйләнеү - харам", - тип әйтә.

**10.** Ҡатын-ҡыҙға һис ҡул күтәрергә ярамай. Ҡайһы бер кешеләр Ҡөрьән аяттарын яңылыш аңлап, көсһөҙ заттарға ҡарата көс ҡуллана башлай. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә "Әгәр ир-егет ҡатынына ҡул күтәрә икән, Ҡиәмәт көнөндә мин үҙем Аллаһ алдында был кешегә ҡаршы геүәһлек итәсәкмен", тип әйтә.

**11.** Аллаһ әмерен үтәүҙә игтибарһыҙлыҡ күрһәткәне өсөн хәләл ефет менән бер көндән дә оҙағыраҡ ыҙғышта булырға ярамай.

**12.** Шулай уҡ ир-егет ҡатынының бәгзе бер осраҡтарҙа күрһәткән тәрбиәһеҙлегенә лә түҙергә бурыслы. Ҡатын кешенең салыш ҡабырға һөйәгенән яратылғанын һәм ир кешегә аманатҡа бирелгәнен оноторға ярамай.

**13.** Ҡатынының холҡонда насар яҡтарға үҙгәреүҙәрҙе күргәс, уға кеше беренсе сираттта үҙен гәйепләргә тейеш. "Мин үҙемдә дөрөҫ тотһам, ул бындайға әйләнмәҫ ине", тип уйларға тейеш. Бер әүлиәнән, ни өсөн уның оҙаҡ итеп үҙенең мыжыҡ ҡатынының ҡыланыштарына түҙеүен һорағандар. Ул: "Мин ҡатынымды айырғандан һуң ул башҡа берәүгә сығасаҡ. Ә ул кеше минең кеүек түҙемле булмаясаҡ. Минең арҡала улар икеһе лә бәхетһеҙ буласаҡ", - тип яуап биргән.

**14.** Ҡатын кеше асыуланһа һәм бәхәс низағҡа әйләнә башлаһа, ир кешегә шымып ҡалыу иң яҡшыһы. Ҡатын уйланып һәм ғәфү үтенер, сөнки гүзәл заттар иргеттәрҙең уҫал тынлығы алдында көсһөҙ.

**15.** Ҡатыны ғаиләләге бурыстарын урынына еткереп һәм ҙур ҡәнәғәтлек менән эшләй икән, ир-егет доғаларында Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтен белдерергә тейеш. Сөнки быңдай ҡатын - Аллаһы Тәғәләнең иң ҡиммәтле донъя бүләге.

**16.** Ҡатын менән игтибарлы һәм мөләйем мөғәмәлә итергә кәрәк. Шул саҡта ғына ул үҙенең яратылғанын аңлаясаҡ һәм иренең ҡәҙерен беләсәк.

**17.** Ир кеше магазинға һәм баҙарға аҙыҡ-түлек артынан йөрөүҙе үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Ғаилә мәсьәләләрендә хәләл ефет менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Шул уҡ ваҡытта ғаиләгә бәйле булмаған башҡа (мәҫәлән, эштәге) мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ҡатынды йәлеп итергә кәрәкмәй. Уның былай ҙа хәстәрҙәре етерлек.

**18.** Ир-егет, ҡатынының гонаһҡа килтерә торған кәңәштәренә эйәреп китмәҫ өсөн, уяу булырға бурыслы. Ғаилә башлығы ҡатын-ҡыҙ түгел, ә ир-егет.

**19.** Ҡатынының гонаһҡа килтермәгән етешһеҙлектәрен, хаталарын күрмәмешкә һалышһа, ир-егет зирәклек күрһәтәсәк. Әгәр хәләл ефете гонаһ эшләүгә алып барған һүҙҙәр әйтһә һәм ҡылыҡтар эшләһә, ир-егет хаталаныуын аңлатып, уны туҡтатырға тейеш. Әгәр ниндәйҙер етешһеҙлегенән ваз кисһә, ҡатын-ҡыҙға бүләк вәғәҙә итергә һәм вәғәҙәне үтәргә кәрәк. Һәр осраҡта сабырлыҡты юғалтмау мөһим.

**20.** Бер-берегеҙҙең серҙәрен һәм етешһеҙлектәрен башҡаларға таратырға ярамай.

**21.** Ғаилә ялын ойоштора белеү ҙә бик мөһим. Тормош иптәшең менән шаярып, уйнап алыуҙың да бер зыяны юҡ. Мәҫәлән, Бәйғәмбәребеҙ ҡатыны Ғәйшә менән йүгереүҙә ярышҡан.

**22.** Өйләнер алдынан ир-егет үҙҙәренең ҡайҙа йәшәйәсәктәрен алдан хәстәрләргә бурыслы. Әгәр улар йортто ҡуртымға йә һатып ала икән, ғаилә именлеге өсөн зыян килтерерҙәй (экологик таҙалыҡ менән бергә, төнгө клуб кеүек кешенең рухи донъяһына зыян килтергән) урындарҙан йыраҡыраҡ булыу мөһим. Дин ҡәрҙәштәр күп йәшәгән урындарҙа йәшәү хуплана. Уртаҡ ҡиммәттәр булған кешеләр генә яҡшы күрше, кәңәшсе булып китә ала.

**23.** Ир-егет ҡатынын шәриғәт буйынса йөрөргә ярамаған урындарға барыуҙан тыйырға бурыслы.

**24.** Ир-егет ҡатынын Ҡөрьән уҡырға, хәләлде харамдан айырырға өйрәтергә тейеш. Ғаилә ағзаларын ярамағандан тыйылырға өйрәтмәгәндә, ғаилә башлығы тамуҡ уты көтөүен онотмаҫҡа тейеш.

**25.** Шәриғәткә ярашлы, енси тормошҡа бәйле мәсьәләләрҙе белеү мотлаҡ. Был ғилемде имамдарҙан, дини китаптарҙан алырға кәрәк.

**26.** Ғаиләләге ҡатын-ҡыҙ затынан булған ағзалар шәриғәт буйынса кейенмәйенсә йөрөйҙәр икән, ул саҡта ғаилә башлығы һәм өйҙәге бар ирҙәр Ҡиәмәт көнөндә бының өсөн яуап бирәсәктәрен аңларға тейеш.

**27.** Хәләл ефетенең ризалығын алмайынса ир кеше сәйәхәткә сыға алмай. Шулай уҡ икенсе һәм сираттағы хаж ғәмәлен үтәгәндә ҡатын-ҡыҙҙың ризалығын алыу мөһим.

**28.** Әгәр беренсе ҡатыны шәриғәт талаптары урынына еткереп үтәй, иренә итәғәтлек күрһәтә икән, ир-егеткә икенсе ҡатын алыу кәңәш ителмәй. Бәйғәмбәр "Әгәр берәү ике кәләше була тороп, уларға ғәҙел мөғәмәлә итмәһә, Ҡиәмәт көнөндә мәхшәр яланына яртылаш кәкрәйгән килеш киләсәк", тип әйтә.

**29.** Ир-егет хәләл ефетенә үҙенең проблемалары, дошмандары, бурыстары хаҡында һөйләргә тейеш түгел.

**30.** Ир-егет ҡайҙа ғына булһа ла, ҡатыныма бәрәкәт, бәхет, ниғмәттәр бир, тип, Аллаһы Тәғәләгә ялбарырға тейеш. Сөнки хәләл ефет - ир-егеттең тормош иптәше генә түгел, дуҫы, балаларының тәрбиәсеһе, өй усағын һаҡлаусы.

Динде яратҡан һәм белгән ир-егеттәр бар эштәрендә лә шәриғәткә эйәрергә тырыша. Шәриғәткә эйәреү кешенең үҙенә генә файҙа килтермәйәсәк, ғаиләһенә лә яҡшы йоғонто яһаясаҡ. Ғаиләлә, йәмғиәттә шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртасаҡ. Шуға күрә лә ҡатынын, балаларын яратҡан, уларға ике донъя бәхетен теләгән мосолман, рухи яҡтан үҙен камиллаштырып, ҡулы аҫтында булғандарға яҡшы остазға әйләнергә тейеш. Харамға илткән нәмәләр тулып ятҡан дәүерҙә, ғүмер юлын ошо быҫраҡлыҡтарға буямайынса һәм ғаиләһен буятмайынса үткән иманлы ир-егеттәр Раббыһының ризалығына ирешәсәк. Әхирәттә лә ғаиләһе менән бергә йәннәттә осрашасаҡ.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

---

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БӘХЕТЛЕЛӘР...

## тупһаһына даға ҡаҡмай



**Гүзәл затты ҡотлаған ваҡытта йыш ҡына, ҡатын-ҡыҙ бәхете теләйем, тигәндә ишетергә тура килә. Был төшөнсәне нисек аңларға һуң? Күптәр, әлбиттә, бала тәрбиәләү, әсәй булыу тиер урынға, эргәндә ышаныслы ир булыуы, тип әйтәсәк, шулай бит?**

Ғөмүмән, бәхетле булыу өсөн мотлаҡ кейәүгә сығыу, ир менән йәшәү кәрәк, тигән ҡараш йәшәй йәмғиәттә. Ир менән нисек йәшәгәне мөһим түгел, яңғыҙ булмаһа - шул еткән. Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин дә шулай уйлай инем. Әммә бер ҡатын менән танышып һөйләшкәндән һуң ҡатын-ҡыҙ бәхете төшөнсәһенә фекерем үҙгәрҙе.

Оҙаҡ йылдар ситтә йәшәп, ире вафатынан һуң йәшлек эҙҙәрен һаҡлаған ҡалаға күсеп ҡайтҡан оло йәштәге ҡатын: "Яңғыҙым ҡалғас ҡына бәхеттең нисек булыуын татыным. Кеше һүҙенән ҡурҡып, ҡырҡ йылдан ашыу ғүмеремде холоҡһоҙ ир менән үткәрҙем. Сабырлығым өсөн Аллаһу Тәғәләм ҡартайған көндә бәхет ебәрҙе", - тигәйне.

Дүрт тиҫтә йыл баҫылып ятҡандан һуң был ҡатын шиғырҙар ижад итә башлаған, төшөргән һүрәттәре лә уның оҫта рәссам икәнлеген күрһәтә. Картиналары сағыу, шиғыр юлдары ла - оптимистик рухта. Былар, ысынлап та, ҡатындың бәхетле икәнлеген дәлилләй...

Йә, ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, ғөмүмән, кеше бәхете нимәлә икән?.. Бәлки, фекер алышырбыҙ?

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

***✓ Бер мәл ҡабырға яҡтан ҡыштырҙаған аяҡ тауыштары ишетелде, былай булғас, эш харап, бөттө баш. Елкәмә мылтыҡ көбәгенең һалҡын тимере терәлде: - А-а-а, зайчик, попался?***






"Ҡарбузды апҡайтам да тештәрҙе ҡамаштырырлыҡ һалҡын һыулы биҙрәгә һалам... Ул сағында боҙҙай ҡарбуз кетерҙәп кенә торасаҡ! - Емеш шәрбәтен ауыҙымда тойғандай, ҡылҡылдатып шайығымды йотоп ҡуйҙым. - Тфү, бигәләш, мин ятам тау башындағы ҡуянға һыу йылытып!.." Икеле-микеле уйҙарға бирелеп, тишеккә яйһыҙ тығылғайным, салбарым сөйгә эләкте бит, ҡәһәрең, бөгөлгән тутыҡ ҡаҙау ҡармаҡтай эләктереп алды, еңел генә ҡотолормон тимә! Ысҡынмаҡ булып балаҡтан нығыраҡ тартҡайным, кәртә һелкенгәндәй итте лә, баҫыу буйына тимер сымдарға тағылған буш кәнсирҙәр дөңгөр ҡаҡкандай даңғыр ҙа доңғор килә башланылар. Бая йоҡомһораған эт ҡабаттан яр һалып өрөргә тотондо, һүрән яҡтылыҡ бөркөп, будка ишеге шар асылып китте. Кинәт ҡалҡып миңә ҡарай йүгергән ҡараҫҡы яйын табып, тимер сымдар араһына йылғыр тығылып баҫыу аша һикерҙе, шул мәлдә будка яғынан мылтыҡ атҡан тауыш ишетелде. Гөрһөлдәү ҡолаҡты тондороп, тирә-яҡҡа таралды ла, беҙ килгән тау яғына барып ҡаҡлыҡҡас, ҡайтауазға әүерелеп, кире ҡайырылды, шунан тулҡын-тулҡын булып тирә-яҡҡа таралды. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә бит инде ул, бындай шартлауҙы тәүләп ишетәм һымаҡ. Ергә һылаштым. Эт бәйен өҙәрҙәй булып быуылып өрөүен дауам итте. Ҡараҫҡы сумған тарафтан тауыш-тын ишетелмәй. Тимәк, ҡарауылсы уға тоҫҡап атҡан. Тура, йән еренә тейҙергәндер, юғиһә, теге терелеген нисек тә белдерер ине.

Бер мәл ҡабырға яҡтан ҡыштырҙаған аяҡ тауыштары ишетелде, былай булғас, эш харап, бөттө баш, сикәләремде ҡулдарым менән ҡоршап тынып ҡалдым. Ергә тамсы булып һеңге, тупраҡты селәүсен һымаҡ соҡоп инеп йәшеренге килә лә, ҡайҙа инде! Елкәмә мылтыҡ көбәгенең һалҡын тимере терәлде:

- А-а-а, зайчик, попался?

Быуындар тотмағанға һенағастай ҡатып ята бирәм. Арҡам буйынан һалҡын зымбырҙау йүгереп үтте, тыным быуылғандай итте.

- Нимә унда ҡомда арҡанды йылытҡандай итеп һуйҙайғанһың, килгәнһең бит, тор!

Теләкһеҙ генә туңҡаңлап ҡалҡтым да, өҫ-башымды ҡаҡҡылағас, бирелгәнлегемде белгертеп, ике ҡулымды күтәрҙем.

- Ҡулыңды күтәрҙең, әләйгәс! Ә һин Мәскәү янында еңелгән фриц һымаҡ ҡыланаһың, киттек, тотҡон! - Ҡараҫҡы көбәкте арҡама терәп, торлағы яғына ҡарай этте.

Будка янындағы ояһы ауыҙына сынйырға бәйләнгән эт ике аяҡтарына баҫып абалай ғына, бәйҙән ысҡынһа, өҙгөсләп ташламаҫ, тимә.

- Тынyслан, Барс, фу! Йә, тынyслан, кемгә әйтәләр, бына биләмәбеҙгә үтеп ингән шпионды ҡулға алдым, хәҙер унан һорау аласаҡмын!

Торлаҡтың эсендә бөләңгерт яҡтылыҡ, һәр нәмә шәүләләй тоноҡ күренә. Майҙандың ҡап яртыһын биләгән, ҡулдан һумалтыр әтмәләнгән ағас өҫтәл өҫтөндә һауынсылар фермаға йөрөткән, тимер сым менән ҡоршалған фонарь ҡуйылған. Һулаҡай ҡулда тимер башлы, йыртыҡ матрац түшәлгән, өлбөрәгән одеял, кәпрәнһеҙ бысраҡ яҫтыҡ ятҡан карауат. Танауға янған кәрәсин төтөнөнөң, тағы ла йыуынмаған тәндең ауыр еҫе бәрелде. Арттағы көбәк өҫтәл янындағы берҙән-бер ултырғысҡа ултырырға ҡушып этәрҙе. Буйһонмай сара юҡ. Ҡараҫҡы үҙе үтеп, әсе сыйнатып, карауатҡа гөрһөлдәне. Уға һынамсыл ҡарашымды аттым.

Айыуҙай уҫлаптай кәүҙәле, тулы бит-йөҙөн һарғылт шырт мыйыҡ-һаҡал ҡаплаған, ялбыр ҡашлы, ташбыҡ күҙҙәре соҡорҙарына тәрән батҡан урта йәштәрҙәге ир икән. Ыңғайы бер шуға иғтибар иттем, күҙҙәр уҫал, яһил түгелдәр, хатта ҡайһылыр кимәлдә йыуаш ҡарайҙар. Күҙҙәр күңелдең көҙгөһө, тиҙәр бит, мәрхәмәтле әҙәмгә оҡшаған. Шулай ҙа сатраш биҙәкле бумазый күлдәк, бысрана барып төҫөн юғалтҡан спорт салбары, аяҡтарҙағы резинанан ҡойолған итектәр йәмһеҙләй алмай тулы, йыуантыҡ кәүҙәне. Уң ҡулдың мускулдары ҡабарып ишелгән, көс-ҡеүәте бар, тимәк. Һулаҡай ҡул төбөнән юҡтыр, күлдәктең буш еңе салбар ҡайышына тартып ҡыҫтырған.

Ир ҡушкөбәк мылтығын карауаты ҡырына һөйәне лә, янтая төшөп, кеҫәһенән тышы керләнә барып йышылып бөткән тәмәке кисете килтереп сығарып, унан бер семтем ваҡланған япраҡҡа тартым нәмә алды, шуны өҫтәл ҡырындағы дүрткә бөкләнеп, билдәле ҙурлыҡта йыртып әҙерләнгән гәзиткә таратып һипкәс, өйрәнелгән хәрәкәттәр менән кәзә тояғы төрөргә керешеп китте. Ҡулындағының ян-тирәһен теле менән еүешләп нығытҡас, бармаҡ оҙонлоҡ тәмәкеһенә фонарь ҡулайламаһын күтәреп, милтәнән ут ҡабыҙҙы. Тәрән итеп һурып, ашыҡмай ғына тарта башланы. Былай ҙа тынсыу һауаға ҡырҡыу самосад төтөнө өҫтәлде. Ундай сәсеп үҫтерелгән, ир-аттың һөйләүенә ҡарағанда, һурһаң, эс-бауырҙы өҙөрлөк ҡырҡыу тәмәкене беҙгә ситтән килеп ялланып, һарыҡ көтөүен көткән Александр ғына тарта. Уны, класташым Зиннур ҡайҙандыр темеҫкенеп йөрөп табып килтергәндә, беҙ ҙә картуфлыҡ осондағы кесерткән араһына боҫоп тәмләп ҡарарға иттек бер тапҡыр. Сәсәп йығылдыҡ та ундай зәһәр нәмәгә башҡаса оронмаҫлыҡ булдыҡ.

Бер ҡул менән дә шулай етеҙ, оҫта эш итеп булғанлыҡҡа аптыраңҡырап ҡарап ултыра инем, ир талапсан тексәйеп һораны:

- Ниңә улай күҙҙәреңде яндырып, тикшереп ҡарайһың, егет?

- Юҡ та, - тәүге тапҡыр телгә килдем, - ҡарамайым шыпа...

Ҡарашымды һеперелмәгән, бысраҡ иҙән таҡтаһына ҡаҙаным башта, шунан, бер аҙҙан, мәрхәмәт һорап инәлдем:

- Мине ебәр инде ағай, ә мин башҡаса һис ҡасан улай эшләмәм.

- Нимәне улай?

- Инде ғүмеремдә лә урлашмам!

- Юҡ инде! Һин кем?

- Һин егет, тиһең дә баһа, ызнашит, егет.

- Шулай итеп, исемеңде әйтергә теләмәйһең?! Партизан ише исемеңде атамаҫҡа ла мөмкин, уныһы мөһим дә түгел әлеге мәлдә, тик шуны әйт, ҡайҙан килдең? - Уйланғандай итте. Хәйер, быныһы ла билдәле! Эйәге менән беҙҙең ауыл яғына ҡарай ымланы.

Бер ни ҙә өндәшмәй башымды түбән эйҙем.

- Һиҙемләүемсә, һеҙ икәү инегеҙ шикелле. Ә һинең һыңарың ҡурҡаҡ йән булып сыҡты, һине яҙмыш ҡосағына ташлап һыпыртты, шулай бит?!

- Ул ҡурҡаҡ түгел!

- Улай булғас кем инде?

- Һин бит уға аттың, ул, нәвирне, совсем мертвый стал.

- Һеҙҙе ҡурҡытыу өсөн мин һауаға аттым, ә һеҙ ыштандарығыҙ төбөн еүешләнегеҙ, шулаймы?

- Штан у миня сухой, сәпсим сухой.

- Ә бына һинең дуҫыңдың ыштаны ни хәлдә икән?

- Нит, кагда страшно, он тоже не писает в штан!

Ирҙең йөҙөнән бер аҙға ғына, болот араһынан күренеп ҡалған ҡояштай һаран йылмайыу йүгереп үтте.

- Я сдись! - Ишек ауыҙында Батырйән күренде.

- Бына бит, икенсеһе лә күренде! Дуҫыңды ташламаның була, был ҡылығың маҡтауға лайыҡ! - Ирҙең ошоғаса төмһәргән ҡарашы бер аҙ яҡтырғандай итте.

- Ни мог я бросить сваего таварища!

- Товарищ, тимә, дуҫым, тигән! - тип төҙәтмә индерҙе ир.

- Ә һин бындараҡ баҫ, күреп тораһың, икенсе ултырғысым юҡ!

Батырйән яныма баҫты ла, үҙенең именлеген белдерергә теләгәндәй усын түбәмә баҫып алды, ә мин бирешмәгәнлекте аңлатып терһәк менән ҡорһаҡҡа ҡағылдым.

- Шулай итеп, һеҙҙең бында килеү маҡсаты һүҙһеҙ ҙә аңлашылып тора, ә бына һеҙ, иптәш бурҙар, кемдең балалары әле? Хәйер, - танығандай итеп ҡараны, - һин бит...

- Я тебя ни знай! - Батырйән уны тәүләп күреүен аңлатырға теләгәндәй ҡарашын ситкә йүнәлтте.

- Хәтерләнем, һин бит бригадирҙың малайы!

- Ни знай никакой бригадир.

- Һыуҙы болғатма һәм тиҫкәреләнмә, йәме, һине теге саҡ атайың Фазылйән менән осраҡан инем! Абруйлы, хөрмәтле кешенең улы шул тиклем дә түбәнселеккә төшһөнсе әле, ояты ни тора!

- Он ни минауат. Он са мной пруcты ходил, я шел суда варават. - Хәҙер эш ҙурға китһә Фазылйән ағайға һүҙ тейәсәк, уның абруйы төшәсәк, ә миңә нимә, ярты етемгә ике донъя бер мөрйә, уға ниндәй ғәйеп, яла яҡһаң да йоға, һылаша һалып бара, һылаша, әммә бысратмай. Ғәйепте өҫтөмә алып Батырйәнде яҡларға иттем.

- Бына, яҡлаусыһы ла табылды!

- Ни приступник я!

- Юҡ, енәйәтсе түгел, кеҫә ҡараҡтары һеҙ! Йәшелсә ашағығыҙ килдеме?

- Нит! - Икебеҙ бер тауыштан баш тарттыҡ.

- Ул сағында нимә?

- Мне арбуз наҙы! Тульке один штук. Один. Панимаете? - Һуҡ бармағымды күрһәтеп урынымдан ҡалҡтым.

- Ултыр, борғанлаҡ! Аңланым. Кемгә?

- Ҡарсыҡ...

- Ҡарсыҡ? Асығыраҡ итеп һөйлә! Ул ҡарсыҡ һинең өләсәйеңме?

- Нит. Сәпсим чужой, далукий чужой. Его бог радил кагда-то белый свит, вот и живет один. Сәпсим один.

- Һәм ул көтмәгәндә-уйламағанда ҡарбуздан ауыҙ иткеһе килдеме?!

- Болит он сильне. Гаварит тульке арбуз хачу. Тульке один раз. Силне хучет, - беҙҙең әңгәмәгә Батырйән ҡушылды.

- Ул дауаханала ятамы?

- Нит. Отпустили на сәпсим, сәпсимгә ҡайтарҙылар! - Быныһын инде мин өҫтәнем.

- Ах, бына нисек икән... - тип ниҙер төшөнгәндәй һүҙҙы ир. Ҡулында күптән һүнгән тәмәке төпсөгөн өҫтәл ҡырына һалды ла урынынан ҡалҡты. - Шулай итеп, хөрмәтле көҙгө әтәстәр, һеҙҙең еүеш ыштандарығыҙҙы бында, - тар торлағын ҡарашы менән иңләне, - хан һарайында киптерергә мөмкинлек юҡ, әммә һәйбәт сәй менән һыйлай алам! - Бер яҡ мөйөштәрәк торған керогазы янына килеп унда ҡуйылған ҡоромло сәйнүктең эсенә күҙ атты ла, һыу барлығын күргәс, миңә эйәге менән ымланы. - Улым, яҡынла әле бында, ярҙам итеп ебәр: керогазды ҡабыҙ ҙа бына бынауында шырпы һыҙып яҡынлат!

Бер ни тиклем ваҡыттан Батырйән менән мине карауатына ултыртып ҡуйған ир, аҙыҡ-түлеген карауаты аҫтынан сығарып, өҫтәлгә теҙә башланы, алюмин көрөшкәләргә сәйнүктән гөбөрҙәтеп сәй ағыҙҙы. Будка эсенә мәтрүшкә, тағы әллә ниндәй үләндәрҙең хуш еҫе тулды.

- Как моя заварка, как мой чабрец?! - тип ҡәнәғәт төҫтә ҡыҙыҡһынды ир.

- Хараша! - тип маҡтаныҡ бер тауыштан.

- Шул-шул! Ун бер төрлө үләнде йыйып алам да, ит турағыстан үткәргәндән һуң еләҫ, күләгәле ергә һалып киптерәм һәм эсеп һыуһының ҡанмаҫ бына ошондай сәй хасил була! Әммә сәйҙең төп өлөшөн барыбер тауҙа үҫкән еҫле гөл тәшкил итә. Бындай сәй һыуыҡ тейеүҙе, тымауҙы, башҡа сирҙәрҙе тәнеңдән һә, тигәнсе ҡыуып сығара!

Беҙ, саҡырылмаған ҡунаҡтар, ваҡ киҫәктәргә бүлгеләнгән салоны ҡабып, ҡара икмәкте умраһынан тешләп, кетерҙәтеп шәкәр кимереп сәй һөрпөлдәтә башланыҡ. Батырйәнде белмәйем, әммә үҙем ирҙең беҙгә ҡарата мөнәсәбәтенең кинәт кенә үҙгәреп китеүен аңлап етмәй аңҡы-тиңке килеп ултырам.

- Йылындығыҙмы әҙерәк?

Батырйән танауын мыршылдатып тартып ҡуйҙы.

- Танауҙарығыҙ мыршылдай икән, тимәк һеҙҙән һыуыҡ ҡыуылып сыға шулайтып, бына һәйбәт! - Ир сәй эсеү урынына ҡабаттан тәмәке төрә башланы ла әүәләгәнен ауыҙына ҡабып, тоҡандырып ебәргәс, бер күҙен ҡыҫа төшөп дауам итте. - Бына нимә егеттәр, һеҙ мине баштан уҡ бер ҡылығығыҙ менән хайран иттегеҙ, дуҫығыҙҙы ауыр мәлдә ташламанығыҙ, ҡалдырманығыҙ, тимәк һеҙгә ышанырға, һәм һеҙҙең менән разведкаға барырға була. Тураһын әйтәм, була! Һәм бына ҡарсыҡ... Тағы, ауыр мәлдәрҙә һеҙгә таянырға, ышанырға мөмкин! - Әңгәмәләшеү барышын үҙгәртте - Минең улым баҡсасылыҡ эштәре менән шөғөлләнә, сулаҡ булһам да уға ярҙам итеп маташам, тәүлек әйләнәһенә баҡсаны бөжәктәрҙән, ҡайһы бер ҡороҡҡостарҙан һаҡлайым! - Шелтәләгәндәй беҙҙең тарафҡа һирпелеп алды.

**(Дауамы. Башы 39-41-се һандарҙа).**

✓ ***Ғалимдар ҡайһы бер аҙыҡ-түлектәрҙең еҫе кәйефте күтәреүен, тирә-йүндәгеләргә иғтибарлыраҡ булырға ярҙам иткәнен асыҡлаған. Уларҙың береһе - яңы ғына бешеп сыҡҡан икмәк еҫе.***



ИНТЕРНЕТТАН



# МИҢДӘРМЕ?

## Ғүмер оҙайлығы билдәһе

■ Лондон ғалимдары әйтеүенсә, кеше тәнендәге миңдәргә ҡарап, уның ғүмер оҙайлығын билдәләп була. MedikForum яҙыуынса, әгәр ҙә миңдәр һаны йөҙҙән ашып китә икән, был кешеләрҙә һырҙар һуңыраҡ барлыҡҡа һәм улар тиҫтерҙәренә ҡарағанда күпкә йәшерәк күренә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе генетик Тим Спектор һөйләүенсә, һынауҙарҙа 18 йәштән 79 йәшкә тиклемге 1200 игеҙәк ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Тәнендә миңдәр күп булғандарҙың һөйәге лә нығыраҡ була, улар араһында остеопороз менән сирләүселәр булмай тиерлек. Ғалимдар әйтеүенсә, миң онкологик сирҙәргә килтереүе ихтимал тигән фекер төптө хата.

■ Америка тикшеренеүселәре раҫлауынса, артыҡ ауырлыҡ, анығыраҡ әйткәндә, билдәге һәм аяҡтағы артыҡ майҙар насар йоҡлауҙың сәбәбе булыуы ихтимал. Джон Хопкинс университеты ғалимдары II типтағы шәкәр диабеты менән яфаланған һәм был ауырыу барлыҡҡа килеү хәүефе төркөмөндәге 77 кешене тикшереп ҡараған. Беренсе төркөм диетаға ултырған һәм физкультура менән шөғөлләнә башлаған. Икенсе төркөм диета менән генә сикләнгән. Ике төркөмдәге кешеләр дөйөм иҫәпләгәндә ете килограмға ябыҡҡан. Шул уҡ ваҡытта был һынауҙа ҡатнашыусыларҙың 20 проценты йоҡолары яҡшырыуы тураһында белдергән. Ғалимдар әйтеүенсә, һимеҙ кешеләрҙә апноэ - йоҡлаған саҡта ҡыҫҡа ваҡытҡа тын алыу туҡталып тороуы йыш осрай. Апноэ менән яфаланыусыларҙа йөрәк һәм баш мейеһе ҡан тамырҙары проблемаһы ла була, сөнки мейегә кислород һәм файҙалы матдәләр етешмәй. Кеше ябығыу менән быларҙың барыһы ла юҡҡа сыға һәм ул яҡшыраҡ йоҡлай башлай.

■ Францияның Көньяҡ Бретани университеты белгестәре әйтеүенсә, икмәк еҫе кешеләрҙе ағымлыраҡ, изгерәк итә. Ғалимдар ҡайһы бер аҙыҡ-түлектәрҙең еҫе кәйефте күтәреүен, тирә-йүндәгеләргә иғтибарлыраҡ булырға ярҙам иткәнен асыҡлаған. Уларҙың береһе - яңы ғына бешеп сыҡҡан икмәк еҫе. Белгестәр бер нисә көн дауамында магазинда һатып алыусыларҙы күҙәткән. Уларҙан тыш, ниндәйҙер әйберен юғалтыусы һатып алыусылар ролен уйнаусы актерҙар ҙа ҡатнашҡан. Ит йәки һөт бүлегендәге һатып алыусыларға ҡарағанда, икмәк бүлегендәгеләре актерҙарға йышыраҡ ярҙам ҡулы һуҙған. Сәбәбе - кешелә хәүефһеҙлек, шатлыҡ тойғолары уятыусы икмәк еҫендә, тип иҫәпләй ғалимдар.

■ Ғалимдар хәтер насарайыуы ҡартлыҡ ауырыуы түгел, тип белдерә. Был үҙенсәлек 30 йәште үткәндәрҙә лә күҙәтелә. Башлыса кешеләр өйҙән сығып киткәндә ойоҡ кейергә, күҙлек йәки асҡыс алырға, дөрөҫ яҙыу ҡағыҙһын, ПИН-кодтарҙы онота. Тикшеренеүҙә ҡатнашыусы кешеләрҙең 6 проценты йәш кеше була. Шулай уҡ күптәр хәтер насарайыуынан, уны юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡып йәшәй икән. Уларҙың һаны 31 процентты тәшкил иткән.

■ Әүҙем физик күнекмәләр интеллект кимәлен үҫтереү һәләтенә эйә. Канада ғалимдары 49 йәштән оло кешеләрҙе тикшереп ҡараған. Уларҙың барыһы ла аҙ хәрәкәт иткән. Был тикшеренеү өсөн улар гәҙәттәге тормоштарынан баш тартып, 4 ай дауамында физик күнекмәләр яһаған. Һөҙөмтәлә, уйлау һәм тиҙ ҡарар итеү һәләте күпкә артҡан. Ғалимдар быны спорт менән шөғөлләнеү арҡаһында мейелә ҡан әйләнеше яҡшырыуы менән аңлата.

АФАРИН!

**Илде хәүеф баҫып алған бынау заманда байрам ҡайғыһымы, тип теләр-теләмәҫ кенә ҡабул иттем Ишембай ҡалаһында үтәсәк "Торатау мираҫы" Асыҡ төбәк-ара фольклор фестиваленә саҡырыуҙы. Бармай, күрмәй ҡалыу ҙа яҙыҡ булыр һымаҡ. Ни тиһәң дә, райондарҙағы һәүәҫкәр фольклор коллективтарҙа башлыса ҡатын-ҡыҙҙар, ағинәйҙәр шөғөлләнә. Улар араһында ла, моғайын, тажзәхмәт шауҡымы кисергәндәр ҙә, ирҙәрен, улдарын, кейәүҙәрен, ейәндәрен махсус операцияға оҙатыусылар ҙа барҙыр. Яҡындарының яҙмышы өсөн борсолоп, йөрәктәрен устарында тотоп, сәхнәгә сығасаҡ әсәйҙәр менән бергә булыу теләге еңде: илгә бәлә килгәндә, ауыр саҡта бер-беренә терәк була белеү ҙә халҡыбыҙҙың матур сифаты бит. Йолаларыбыҙ менән ҡаныбыҙға һеңгән тәрбиә.**

# ТОРАТАУ МИРАҪЫ



### Ҡунаҡ ҡаршылай белә ишембайҙар

Ҡала Мәҙәниәт һарайының ишеген асып инеү менән миллилек кенә түгел, әҙәплелек, ихласлыҡ, хатта туғанлыҡ бөркөлөп торған мөхит солғанышында ҡалып, бер ни тиклем баҙап та ҡалаһың. Юҡ, өйрәнелгәнсә, ҡунаҡтарҙы икмәк-тоҙ, йыр-бейеү менән ҡаршы алыу тураһында түгел һүҙем. Иң тәүҙә байрамға йыйылған халыҡтың ихлас аралашыуы күҙгә ташланды. Ихлас! Туғандарса! Ни тиклем һиуһаған халыҡ бындай аралашыуҙарға! Һәр береһе, әйтерһең, тап бөгөн, тап ошонда, үҙ асылын тапҡан!

Мәҙәниәт һарайының фойеһында халҡыбыҙҙың биҙәү, туҡыу, һырлау, семәрләү сәнғәтенең серҙәрен һаҡлаусы оҫталарҙың ҡул эштәре күргәҙмәһе ойошторолған. Ниндәй генә ҡул эштәре юҡ бында: һуңғы ваҡытта модаға инеп киткән һаҡал-ҡашмауҙарҙан алып, сәнғәт кимәленә еткерелеп, күндән, ағастан, таштан һырлап-семәрләп эшләнгән көнкүреш әйберҙәре, сувенирҙар, төрлө орнаменттар менән биҙәлеп, инйы-мәрйендәр ҡушып сигелгән таҡыялар, алъяпҡыстар, бәйләнгән әйберҙәр, заманса арт-футболкалар, күҙ ҡамаштырырлыҡ биҙәктәр һалып һуғылған балаҫтар... Һәр оҫта үҙенең эшен шундай уҡ оҫталыҡ менән презентациялай. Ҡул эштәренең матурлығы ла, оҫталарҙың үҙ эштәрен тәҡдим итеү маһирлығы ла һоҡландыра. Һай оҫтарғандар был оҫталар, тип уйлайһың ирекһеҙҙән. Заманса, кәрәк сифатты үҙләштергәндәр! Һәр бер эште тотоп ҡарағы килә. Оҫталар уларҙың нисек, нимәнән эшләнеү серҙәрен, һәр бер әйберҙә эшләүгә күпме ваҡыт киткәнен һорамаһаң да һөйләп бирәләр. Эргәләрендә үк үҙенә самалап-үлсәп, таманлап ҡарау өсөн көҙгөләренә тиклем бар. Көҙгөгә ҡарайһың, шул тиклем килешле, зауыҡлы әйберҙән айырылғы килмәй, һатып та алаһың. Асылында йоҡлап ятҡан боронғолоҡҡа ҡағылыуҙан рәхәтлек кисерәһең, оло байлыҡҡа эйә булғандай ҡыуанаһың, оҫталар ҙа шат: бәләкәй генә булһа ла килемдән бигерәк, күҙ нурҙарыңды, йөрәк йылыңды ҡушып эшләгән әйбере үҙ хужаһын тапты, тимәк, ул дөрөҫ юлда, уның шөғөлөн дауам итеүселәр табыласаҡ - шуныһы мөһим.

Мең төҫтәрҙә балҡыған фойены ҡалдырып, тамаша залына үтәм. Фольклор фестиваленең Гала-концертын асыу тантанаһы икәнлеген белмәһәм, валлаһи тип әйтәм, ниндәй сарағa килеп эләккәнемде аңламайыраҡ ултырыр инем. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс кенә сәхнәлә барған тамашаның айышына төшөндөм: бына, геологтар булһа кәрәк, тау-таш араһында нимәләр эҙләйҙәр, кәйләләр менән таш сүкейҙәр, быраулайҙар һәм... һиңайәт: фонтан урғыла! Нефть фонтаны! Башҡортостанда тәүге "ҡара алтын" атҡылығы асыла! Ҡап-ҡара мазутҡа, нефтҡә буялған эшселәрҙең шатлығы менән сәхнә тула. Тамашасылар бынан теүәл 90 йыл элек 702-се һанлы скважинанан нефть урғылған тарихи мәлдең шаһиты булалар. Сәхнәлә һуңынан халыҡ телендә "әбей-вышка" тип аталасаҡ вышка хасил була (ошо мәлдә бейеү телендә сәхнәләштереүсе хореографтың, режиссерҙың, бейеүселәрҙең оҫталығын әйт!), төрлө яҡтан эшселәр колоннаһы ағыла, тәүге тимер юлы һуҙыла. Ҡырмыҫҡа иләүен хәтерләткән төҙөлөш майҙанында, кисәге далала, бейек йорттар, мәктәптәр, балалар баҡсалары ҡалҡып сыға. Ял итеү парктарында бейеү майҙансыҡтары асыла. Ҡала үҫә, ҙурая. Һәм бына... сығарылыш кисәләренең шатлығын аяуһыҙ сирена бүлә. 1941 йыл... Ошо көндән башлап Ишембай нефте Еңеү өсөн эшләй башлай: 1941-1945 йылдарҙа һәр өсөнсө танк, һәр дүртенсе самолет Ишембай нефтенән эшләнгән яғыулыҡ менән эшләй. Артабан сәхнәлә - һуғыштан һуңғы тыныс тормош йылдары: нефтселәр, тегенселәр, машина эшләүселәр, урмансылар, умартасылар, спортсылар (Ишембай биатлон буйынса олимпиада чемпионкаһы һәм шашка буйынса Халыҡ-ара гроссмейстрҙар тәрбиәләгән спортсылар ҡалаһы ла) "Хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм дан ҡалаһы" тигән Халыҡ-ара маҡтаулы исемгә лайыҡ булған ҡаланың барлыҡҡа килеү, төҙөләү тарихы һәм бөгөнгөһөн һынландыралар. Кемгә - нисектер, миңә был күренеш төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙы асыу тантаналарын хәтерләтте. Юрматы ерендә "Салауат йыйыны", "Юрматылар йыйыны", "Торатау вариҫтары", "Сармат вариҫтары" кеүек ҙур-ҙур саралар үткәреү тәжрибәһе үҙен тулыһынса аҡланы: был юлы ла һоҡланғыс тамашаның шаһиты булдыҡ. Ҡунаҡ ҡаршылай белә ишембайҙар!

### Ниңә фольклор фестивале?

Төбәк-ара фольклор фестивален Ишембайҙа үткәреү ҙә урындағы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең идеяһы икән. 2021 йылда район кимәлендә "Торатау вариҫтары" фольклор фестивален үткәреүгә әҙерлек барышында райондың һәр мәҙәниәт усағында фольклор төркөмдәре ойошторола, бай этномәҙәни мираҫ туплана. "Торатау вариҫтары"-ның Гала-концерты ла тап ошо Мәҙәниәт һарайында үҡәрелә. 2021 йылдың иң сағыу тамашаларының береһе була ул. Ошо тиклем рухи байлыҡты республика кимәленә, ҙурыраҡ сәхнәләргә сығарыу, һаҡлау, үҫтереү һәм таратыу, тәжрибә уртаҡлашыу ниәте менән яна башлай район хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге хеҙмәткәрҙәре һәм был проекттарын Рәсәй Президенты фондының мәҙәни инициативалар конкурсына тәҡдим итә. Проект хуплау таба һәм 500 меңлек Президент грантына лайыҡ була. Боронғо рухи һәм матди мәҙәниәтте өйрәнеүҙән, йолаларҙы, халыҡ музыка ҡоралдарын тергеҙеүҙән тыш, профессиональ сәнғәттең асылын халҡыбыҙҙың йыр, бейеү, биҙәү сәнғәтенән эҙләүҙә лә маҡсат итеп ҡуя был проект. Төбәк-ара асыҡ фольклор фестивалендә ҡатнашырға теләүсе фольклор ансамблдәренең һаны 60-тан артып китә, 30-ҙан артыҡ ҡул эше оҫталары шәхси күргәҙмәләре менән килергә теләк белдерә. Шуға күрә лә ойоштороусылар һайлап алыу туры үткәрергә ҡарар итә.

Фестивалгә тәҡдим ителгән эштәр араһында халыҡ йолаларын профессиональ кимәлдә һынландырған видеофильмдар ҙа байтаҡ. Аҙнанан артыҡ эшләгән баһалама комиссияның үҙешмәкәр композитор, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Рәсәйҙең, Башҡортостан республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Солтанова Мәрйәм Гәзизрахман ҡыҙы етәкләне. Һынлы сәнғәт, биҙәү сәнғәте номинацияһына килгән эштәрҙе баһалау бурысы Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ҡадиров Рафаэль Рәшит улына йөкмәтелде. Жюри составында эшләү өсөн Салауат һәм Ишембай ҡалаларындағы сәнғәт мәктәптәренән компетентлы белгестәр йәлеп ителде. Иң-индәрҙе һайлап алыу, ай-һай, еңелдән булмағандыр жюри ағзаларына.

✓ **"Мәҙәниәт илсеһе" титулын йөрөтөүсе ағинәйебеҙ Мәрйәм Солтанова тағы ла бер матур йолаға нигеҙ һалды: фестивалдә ҡатнашып та, призлы урынға сыға алмаған ике коллективҡа балаҫ һуғыу станоктары бүләк итте.**



## Бер тигәс тә ни яҡшы?

Гала-концерт өсөн һайлап алынған ун биш ансамблдең дә сығыштары сағыу, фәһемле булды. Тамашасы сәхнәлә сығыш яһаусыларҙың кейемдәрендәге һәр ырыуға хас орнаменттарҙы ла иғтибарһыҙ ҡалдырмағандыр, йолаларға үрелеп барған балалар уйындарының, халыҡ йырҙарының, бейеүҙәренең, таҡмаҡтарҙың тәрбиәүи әһәмиәте хаҡында уйланғандыр. Эйе, йолалар, башлыса, ғаилә ҡороу менән бәйле булды. Ишембай районы Ишәй ауылы мәҙәниәт йорто - "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар", Мәләүез районы - "Килен төшөрөү", Күгәрсен районы - "Туй йолаһы", Архангел районы - "Бәпес күреү йолаһы", Күмертау ҡалаһы "Килен һөйөү", Стәрлебаш районы -"Косилка-молотика" өмә йолаһы, Мишкә районы - "Туй йолаһы" кеүек күренештәрҙе сәхнәләштергәйне. Йолаларыбыҙҙың тарихи ерлеге уртаҡ булһа ла, сығыштар бер-береһен ҡабатламаны. Уларҙың һәр уҡлау, биҙрә, кәстрүл ҡапҡастары, кер ышҡып йыуыу ҡорамалына тиклем баянға, скрипкаға ҡушылып көйләп, ысын-ысындан халыҡ инструменттары ансамблен хасил итте. Классик әйтмешләй, халыҡ бай ул!

Бөтә йолаларҙы бергә туплап, сәхнәгә "Тарих һандығы" күренешен алып сыҡты иң һуңғы булып сығыш яһаусы Миәкә районы Тамъян-Таймаҫ ауылы ағинәйҙәре. Был тәңгәлдә Гала-концерт программаһының уңышлы төҙөлөшен әйтеп үтмәй булмай. Миәкәләр фольклор байрамын йомғаҡлап:

- Бер тигәс тә ни яҡшы?
- Бер туғандай гөрләшеп,
Дуҫ йәшәһәң, шул яҡшы.
- Ике тигәс тә ни яҡшы?
- Ике туған бер-береһенә
Терәк булһа, шул яҡшы.
- Өс тигәс тә ни яҡшы?
- Өс тағандай, өс туған
Татыу булһа, шул яҡшы.
- Дүрт тигәс тә ни яҡшы?
- Дүрт баландың һәр береһенә


*Фестивалде ойоштороусы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре.*

береһендә милли үҙенсәлеккә бәйле тәрбиә ҡанундары, халҡыбыҙҙың ғаилә ҡороу кеүек яуаплы эшкә ҡуйған талаптары ярылып ята. Заман башҡа - заң башҡа, тиһәләр ҙә, бөгөн күп ерҙә туй йолаларыбыҙ икенсе юҫыҡтараҡ башҡарылһа ла, ғаилә ҡороуға ҡарата төп талаптар, төп ҡанундар үҙгәрешһеҙ ҡалған барыбер: ир - ил һаҡсыһы, ҡатын - ғаилә усағының йылыһын һаҡлаусы. Халҡыбыҙҙың быуаттар буйына тупланған тәжрибәһенә, аҡылына нигеҙләнгән йолалар ошо тәғлимәттең бөгөн дә төп тормош ҡануны икәнен иҫбатланы. Мәләүез районынан килгән сыуаш халыҡ фольклор ансамбле, мәжүсилек тамырҙарын юллап, "Ҡояшҡа табыныу йолаһы"н күрһәтте. Телдәребеҙҙә айырма булһа ла, рухи ҡиммәттәребеҙ уртаҡ: Ҡояш-Әсә, Ер-Әсәбеҙ именлеге. Донъяларыбыҙҙың, ил-көнөбөҙҙөң ҡото ла - ошо именлектә. Был мөҡәддәс теләккә тәржемә лә кәрәкмәй: зал алҡыштарға күмде сыуаш ансамбленең сығышын. "Донъяларыбыҙ имен булһын!" тигән теләк һәр сығыштың төп мотивы булып яңғыраны, был изге теләк Ишембай районы Кинйәбулат ауылы мәҙәниәт йорто алып килгән "Өй күтәреү" күренешендә, улар сәхнәләштергән йолаға бәйле, айырыуса сағыу яңғыраны. Оло быуын кешеләренең раҫлауынса, күңел яҡтылығы менән тулған ерҙәрҙән ҡара нурҙар ҡурҡып ҡасыр, ти. Шуның өсөн һәр яңы нәмәне ҡотларға тип, изге күңелле кешеләрҙе саҡырып алыр булғандар боронғолар. Нигеҙ һалғанда ла, өй күтәргәндә лә, яңы өй һалып сыҡҡас та башҡарылған был йола. Ҡунаҡтарҙың ихлас теләктәрен ишеткәс, йорт хужаһы үҙе лә тыныслана, ҡорған нигеҙендә, йортонда яҡты нурҙар ғына балҡып торорона инана. Нигеҙ ҡотлауҙа кинйәбулаттарҙың фантазияһына етеүсе булманы, бөтә эш ҡоралдарын да "эшкә" ҡушҡан улар: бысҡы, балта, төйгөс,






Белем бирһәң, шул яҡшы.
- Биш тигәс тә ни яҡшы?
- Биш йәшлек кенә балаң да
Йола белһә, шул яҡшы, - тип, йолаларыбыҙҙың асылын, түкмәй-сәсмәй, йәш быуынға еткереү кәрәклеген киҫәтеп ҡуйҙы.

Үрҙә һанап кителгән ансамблдәрҙең береһе лә бүләкһеҙ төшмәне сәхнәнән. Быларҙан тыш, байрамға ҡул эштәре күргәҙмәләре менән саҡырылыусы оҫталар ҙа, халыҡ музыка ҡоралдары, фольклор-эстрада ансамблдәре лә иғтибарһыҙ ҡалманы. Һәр йүнәлештә номинациялар, дипломанттар (1,2,3 урындар), лауреаттар (шулай уҡ 1,2,3 урындар) билдәләнде, улар мәҙәниәт усаҡтары өсөн кәрәкле һәм ҡиммәтле бүләктәр алып ҡыуанды. Ә фестивалдең иң ҙур бүләген - Гран-приға тәғәйенләнгән баянды лайыҡлы рәүештә Ишембай районы Ишәй ауылы мәҙәниәт йортоноң "Хазина" фольклор ансамбле яуланы.

Фольклор байрамын йомғаҡлап, Ишембай районы мәҙәниәт бүлеге начальнигы Әлфиә Ринат ҡыҙы Тимербулатова: "Торатау мираҫы" асыҡ төбәк-ара фестивале байрам ғына түгел, ул - халыҡ ижадын өйрәнеүселәрҙең асыҡ форумы, тәжрибә уртаҡлашыу майҙаны. Ишембай ҡалаһының мәҙәни йөҙөн билдәләүсе был сара ике йылға бер тапҡыр үткәрелеп торасаҡ. Ошондай сағыу байрамдар үткәрергә теләһәгеҙ, үҙ проекттарығыҙҙы булдырығыҙ, гранттар яҙығыҙ, шул сағында тотош республикабыҙ фестиваль йәйғорҙары төҫтәрендә балҡыр. Үҙ проекттарын яҡларға теләүселәргә беҙ ярҙам итергә әҙербеҙ", - тине. "Мәҙәниәт илсеһе" титулын йөрөтөүсе ағинәйебеҙ Мәрйәм Солтанова тағы ла бер матур йолаға нигеҙ һалды: фестивалдә ҡатнашып та, призлы урынға сыға алмаған ике коллективҡа шәхси приздар - балаҫ һуғыу станоктары бүләк итте. "Илебеҙ иңенә ауыр һынауҙар ятҡан мәлдә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың сәхнәгә сығыуҙары үҙе үк батырлыҡ", - тине ул. Хаҡ һүҙҙәр. Донъялар нисек кенә боларып тормаһын, халыҡтың меңәр йылдар буйына тупланған аҡылын, әхлаҡи ҡиммәттәрен онотоорға хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең, улар быуындан-быуынға тапшырылырға тейеш.

Үрҙә әйтелгәнсә, ҡыйынһынып ҡына асҡайным байрам буласаҡ Мәҙәниәт һарайының ишеген. Сәхнәнән ҡулына баян тотоп, үҙе уйнап, үҙе йырлап, үҙе бейеп сығып киткән Гран-при яулаусы ишәйҙәрҙең художество етәксеһе Раҡаева Сүриәне күргәс, бөгөнгө көндә байрам үткәрергә йөрьәт итеүсе мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, ағинәйҙәр менән һоҡланыуымды йәшерә алманым: беҙҙе асылыбыҙға алып ҡайтыусы, әхлаҡи ҡиммәттәребеҙҙе тергеҙеүсе, рухыбыҙҙы уятыусы йолаларыбыҙ һәм мәҙәниәтебеҙҙе аңларға, баһаларға өйрәтеүселәр барҙа, беҙҙең төшөнкөлөккә бирелергә хаҡыбыҙ юҡ!

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, шағирә.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Уңыш ҡулсаһын нисек үҙ теләгеңә буйһондорорға?

Аң торошо беҙҙең тойоу ағзаларының сигналы буйынса билдәләнә. Төп тойоу ағзалары - күреү һәм ишетеү, унан башҡа тағы ла тәм, еҫ, һиҙеү бар. Ярлылыҡ, мәҫәлән, аҙ аҡса менән генә түгел, ә башҡа тойоу формалары менән дә билдәләнә: иҫке келәмгә ҡағылыу, осһоҙло сосискалар тәме, серегән ағас еҫе...

Иң төп тойғо, әлбиттә, - күреү. Оптик каналдар аша беҙ донъяны 80 процент ҡабул итәбеҙ. Был күҙаллауҙың мөһимлеген күрһәтә. Күп мәҙәниәттәрҙә осраған Уңыш ҡулсаһы тормош әйләнешен күҙ алдына килтерә. Уны үҙегеҙгә лә эшләргә мөмкин. Был осраҡта үҙ ҡулығыҙ менән яҙған һәр һүҙ һеҙҙең өсөн байығыу ағымына ҡушылған ижади канал булып тора. Ҡулсаның уртаһында ОМ һүҙе яҙыла. Унда "Мин" тип тә яҙып ҡуя алаһығыҙ. Әммә ОМ - ныҡ көслө символ, шуға күрә ҡулса эсенә уны яҙыу яҡшыраҡ. Тормошта һеҙҙе илһамландырған сифаттарҙы ҡулсаның арасалары итеп эшләгеҙ. Ҡулсаның туғыны тирәләй байлыҡтың шәхси аффирмацияһын яҙығыҙ. Түбәндә бер нисә миҫал бирелә.




**Рухи ҡуйылыш:** Илаһ көсө мине кәрәк булған барлыҡ нәмәләр менән тәьмин итә.

**Фәнни ҡуйылыш:** Ни тиклем энергиямды күберәк бирәм, шул тиклем күберәк алам. Минең барлыҡ өлкәләрҙәге байлығым бер туҡтауһыҙ арта бара.

**Философик ҡуйылыш:** Байлыҡ - тәбиғәттең айырылғыһыҙ өлөшө. Мин - тәбиғәттең бер сағылышы. Байлыҡ- мин үҙем.

Кәрәкле аффирмацияны үҙегеҙ уйлап табығыҙ. Иң көслөһө булып рухи ҡуйылыш тороуын да онотмағыҙ. Уңыш ҡулсаһының һүрәтен күренгән урынға элегеҙ, уны йыш, күрерлек булһын. Әммә бынан алда һүрәтте метафизик әүҙемләштерергә кәрәк.

**Уңыш ҡулсаһын әүҙемләштереү күнекмәһе:**

- Уңыш ҡулсаһының һүрәте төшөрөлгән ҡағыҙҙы ҡулығыҙҙа тотоп, көсөргәнештән арынығыҙ.
- Өндәге төш халәтенә инеп, Ҡулсаны күҙ алдығыҙҙан 15 сантиметр тирәһе алыҫлыҡҡа ҡуйығыҙ.
- Унын арасалары тыш яҡҡа киңәйеп, тормошоғоҙҙоң барлыҡ өлкәләренә үтеп инеүен, һеҙгә уңыш, байлыҡ, етеш тормош килтереүен уйығыҙҙа ғына күҙәтегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ, ысынбарлыҡҡа ҡайтығыҙ, Уңыш ҡулсаһын үҙегеҙ йыш күрерлек урынға ҡуйығыҙ.

Хәҙер был Ҡулса, ысынлап та, һеҙҙеке. Әгәр был ҡағыҙ битен һыуытҡыс ишегенә йәбештереп ҡуйғанһығыҙ икән, һыуытҡыстың ишеген асҡан һайын унын ҡеүәтен күрәсәкһегеҙ. Унын тәьҫире шунда уҡ һиҙелмәйәсәк. Әммә тормош, ғөмүмән, яйланыр, ихтыяждарығыҙ ҡәнәғәтләндерелер, юрғанға ҡарап аяҡ һуҙыу урынына үҙегеҙгә тап килгән юрған һайларһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



# 24 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20, 23.45 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.00 Бесогон ТВ. [16+]
1.40 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 БашГост. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Патриот РФ. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**1.45 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 "Ете егет". [12+]**

# 25 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00, 16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30, 23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**1.45 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 История одного села. [12+]**
**5.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

# 26 ОКТЯБРЯ СРЕДА

## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 История одного села. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**18.00, 3.00 Автограф. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.15 Д/ф "Рождение истории". [12+]**
**0.45 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**3.30 "Бай". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 Тормош. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

# 27 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Художник". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Морозова". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Сируси" (на баш. яз). [12+]**
**11.00, 22.00, 5.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 23.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 13.45 Дневной канал БСТ.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 История одного села. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Прямая линия с Главой Республики Башкортостан Радием Хабировым.**
**23.15, 0.45 Вечерний телецентр.**
**1.45 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**3.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**4.00, 5.45 Дневной канал БСТ. [12+]**
**4.45 "Дорога к храму". [0+]**

# 28 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
0.10 Улыбка на ночь. [16+]
1.15 Х/ф "Мать и Мачеха". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Автограф. [12+]**
**10.45, 4.15 История одного села. [12+]**
**11.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 20.00 Интервью. [12+]**
**12.00, 4.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Патриот РФ. [12+]**
**13.00 БашГост. [6+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 18.00 "Йома". [0+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 История признания. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**19.00 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**22.00 Финликбез. [12+]**
**23.00, 3.30 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә сәсән". [12+]**
**3.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

# 29 ОКТЯБРЯ СУББОТА

## РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Без вины виноватая". [12+]
0.45 Х/ф "Слепой расчёт". [16+]
4.00 Х/ф "По секрету всему свету". [12+]
5.36 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.15 "Это моя профессия". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**12.00 Памяти Бибисары Азаматовой. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз)./. [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Нур-Султан). КХЛ.**
**19.30, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00, 3.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**1.30 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

# 30 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

## РОССИЯ 1

5.40, 3.15 Х/ф "Заезжий молодец". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.35 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Эхо греха". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45, 23.00 Автограф. [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.45, 3.45 История одного села. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Дорога к храму". [0+]**
**15.45, 3.15 Историческая среда. [12+]**
**16.15 "Честно говоря". [12+]**
**17.00 Д/ф "Рыцари леса". [12+]**
**17.45 Территория женского счастья. [12+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 4.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 3.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.30 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**2.15 Итоги недели (на рус. яз).**
**4.00 "Это моя профессия". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

# СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 октябрь "Урал батыр"** Башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 12+
**28 октябрь Нурия Ирсаеваның** юбилей кисәһе. 12+
**29 октябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 18.00 16+
**30 октябрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 октябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 11.00 6+
**"Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин", музыкаль комедия. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:
**28 октябрь "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 18.00 12+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 октябрь "Твоя филармония"** 1-се курс студенттары өсөн квест-экскурсия. 12.00 16+
**"Осенний мотив"** Рим Хәсәновтың юбилейына концерт. 6+
**28 октябрь "Бенефис маэстро. Олег Касимов"**. 6+
**29 октябрь "В ожидании чуда"** буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**24 октябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков) лирик комедияһы менән Архангел ауыл мәҙәниәт йортонда. 12+
**25 октябрь "Һағыштарым тулы ғазаптарым"** (Я. Пулинович), мелодрамаһы менән М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә. 12+
**26 октябрь "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков) лирик комедияһы менән М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 октябрь "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 12+
**28 октябрь "Бейеп үтәм тормош юлдарын!"** Рәил Лоҡмановтың юбилей кисәһе. 6+
**29 октябрь "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+
**30 октябрь "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт-комедия. 12.00 0+
**"Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 октябрь Премьера! "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова инсц.), шиғри драма. 12+
**29 октябрь "Золотой цыпленок"** (В.Орлов), музыкаль әкиәт. 13.00 0+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабигел әүүәл - Рабигел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (28) дүшәмбе | 6:34 | 8:04 | 13:30 | 16:03 | 17:55 | 19:25 |
| 25 (29) шишәмбе | 6:36 | 8:06 | 13:30 | 16:01 | 17:52 | 19:22 |
| 26 (30) шаршамбы | 6:38 | 8:08 | 13:30 | 15:59 | 17:50 | 19:20 |
| 27 (1) кесе йома | 6:40 | 8:10 | 13:30 | 15:57 | 17:48 | 19:18 |
| 28 (2) йома | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 15:55 | 17:46 | 19:16 |
| 29 (3) шәмбе | 6:44 | 8:14 | 13:30 | 15:53 | 17:44 | 19:14 |
| 30 (4) йәкшәмбе | 6:46 | 8:16 | 13:30 | 15:51 | 17:42 | 19:12 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 30 ОКТЯБРЬ - СӘЙӘСИ ЗОЛОМ ҠОРБАНДАРЫН ИҪКӘ АЛЫУ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Манас. Ирсаева. Тәхет. Ата. Уймаҡ. Ауыҙлыҡ. Таналыҡ. Алҡыш. Сынйыр. Театр. Мао. Ҡапҡа. Лото. Ҡыяр. Морат. Аҫаба. Ваза. Ҡарасай. Роман. Ғафаров. Сағараҡ.

**Вертикаль буйынса:** Таҡташ. Аҙнаҡаева. Литр. Ҡаҡ. Ике. Ашыҡыс. Баҡса. Мисәт. Мурҙа. Саҙаҡа. Хоҙайғолова. Ай. До. Скаут. Ваҡ. Уҡа. Ҡомар. Лупа. Ыҫыҡ. Ҡош. Алтын.

*ҺОРАУ-ЯУАП*



# КРЕДИТ КАНИКУЛДАРЫ ҺӘМ...

(Башы 5-се биттә).

➔ **Мобилизацияланған кеше ярты йылдан һуң кире ҡайтмаған осраҡта нимә эшләргә?**

- Артабанғы иҫәп-хисап осорҙары өсөн ҡайтанан иҫәпләү тураһында ғариза яҙырға мөмкин. Ул саҡта коммуналь түләүҙәр киләһе алты айға яңынан иҫәпләнә.

➔ **Мобилизацияланыусы торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн нисек түләй?**

-Хәрби хеҙмәткәр өйөнән алыҫта саҡта торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн уның туғандары түләй ала. Әгәр мобилизацияланған граждан яңғыҙ йәшәй икән, ул идарасы компанияла торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙе кисектереү тураһында алдан килешеү төҙөй йә, әйләнеп ҡайтҡас, уны рәсмиләштерә ала. Түләүҙе кисектереү һәм пеня иҫәпләмәү механизмы Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте документты ҡабул итеп алғандан һуң ғына аңлашыласаҡ. Фатирҙа иҫәпләгес ҡуйылған икән, өйҙә булмаған осорҙа ресурстар өсөн түләргә кәрәкмәйәсәк. Иҫәпләү ҡоролмаһы булмаһа, ҡайтанан иҫәпләүҙе талап итергә мөмкин. Ә иҫәпләгестәр ҡуйыу техник яҡтан мөмкин булмаған осраҡта, ҡабаттан иҫәпләү башҡарыла.

Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү күләме ҡулланыусынан яҙма ғариза алғандан һуң 5 эш көнө эсендә ҡайтанан иҫәпләнә. Ғаризаны ҡулланыусы ваҡытлыса өйҙә булмаған осор башланғанға тиклем йәки ваҡытлыса өйҙә булмаған осор тамамланғандан һуң 30 көндән дә һуңға ҡалмайынса бирергә кәрәк. Ғариза ҡулланыусы ваҡытлыса өйҙә булмаған осорға тиклем бирелһә, хеҙмәттәр өсөн түләү күләме ғаризала күрһәтелгән осор өсөн ҡайтанан иҫәпләнә, әммә 6 айҙан артығыраҡҡа түгел.

Дәүләт Думаһы мобилизация ваҡытында мобилизацияланғандарҙың һәм уларҙың ғаилә ағзаларын торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләмәгән өсөн пеня һәм штрафтар, капиталь ремонтҡа иғәнәләр түләүҙән азат итергә ниәтләй. Торлаҡ кодексына төҙәтмәләр индерелә, пеня һәм штраф түләүҙән азат итеү тәртибе әҙерләнә, ул мобилизация осоронда ғәмәлдә буласаҡ.

➔ **Яңғын частары хеҙмәткәрҙәре өләшләтә мобилизация буйынса хеҙмәткә саҡырылырға тейешме?**

- Янғынға ҡаршы дәүләт хеҙмәтендә хеҙмәт иткән һәм махсус хәрби иҫәптә торған кешеләр мобилизация буйынса саҡырылмай.

➔ **Ҡулдан төҙәтмәләр индерелгән повестка тапшырыу дөрөҫмө?**

- Повесткаға ҡулдан төҙәтмәләр индерергә мөмкин, ләкин улар вазифалы кешенең ҡултамғаһы һәм мисәт менән раҫланырға тейеш. Был осраҡта төҙәтмәләр индерелгән повестка тапшырыу законлы. Ә бына повесткала ҡулдан индерелгән төҙәтмәләр раҫланмаған булһа, һеҙ уны алыуҙан баш тартырға хоҡуҡлы.

➔ **Ауыл биләмәһе башлығы ирекле формала ҡулдан яҙылған һәм хакимиәт мисәте һуғылған повестка бирә аламы?**

- Повестка хәрби комиссариат тарафынан әҙер бланкыла тултырыла, унда хәрби комиссарҙың ҡултамғаһы һәм хәрби комиссариаттың мисәте булырға тейеш. Повестканы хәрби комиссариат хеҙмәткәре йәки хәрби комиссариатты көсәйтеү аппараты составынан башҡа кеше, шулай уҡ мобилизацияға йәлеп ителеүсенең эш урынындағы етәксе һәм хәрби-иҫәп эше өсөн яуаплы башҡа кешеләр тапшыра ала.

**(Дауамы бар).**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ШЫЛТЫРАТ!

**РФ Тәфтиш комитеты рәйесе Александр Бастрыкин ҡушыуы буйынса махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар, мобилизацияланғандар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн ҡыҙыу линия эшен башланы.**

Граждандар ведомствоға 8-800-100-12-60 (тауыш менюһында 5 һанына баҫырға кәрәк) күп каналлы телефон буйынса тәүлек әйләнәһенә мөрәжәғәт итә ала. Шылтыратыу бушлай. Рәсәйҙең Тәфтиш комитеты хеҙмәткәрҙәре мөрәжәғәт иткән граждандарға барлыҡҡа килгән проблемалар һәм һорауҙарҙы, шул иҫәптән медицина ярҙамы, тейешле түләүҙәр кеүек социаль ярҙам алыуҙы хәл итеүҙә оператив ярҙам итәсәк. Был уларҙың хоҡуҡтарын яҡларға булышлыҡ итә.

# ЮРИДИК ЯРҘАМ БУШЛАЙ

**Башҡортостандан махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарҙың ғаиләләре юридик һәм финанс һорауҙар буйынса бушлай юридик ярҙамға өмөт итә ала. Был төбәк властары ҡабул иткән хәрби хеҙмәттәгеләргә социаль ярҙамдың өҫтәмә сараларына ярашлы эшләнә.**

Был документтың 24-се пунктына ярашлы, ғаилә ағзалары республиканың бөтә профилле министрлыҡ-ведомстволарында, шулай уҡ республиканың район-ҡала хакимиәттәрендә консультация ярҙамына хоҡуҡлы. Был мөмкинлек менән файҙаланыу өсөн мобилизацияланғандарҙың ғаиләләре түбәндәге адрестар һәм телефондар буйынса мөрәжәғәт итә ала:

- Өфө, Октябрь революцияһы урамы, 3, тел. 8(347) 272-29-23,
- Өфө, Октябрь проспекты, 180, тел. 8(347) 216-17-11,
- Нефтекама, Нефтселәр урамы, 22, 114-се бүлмә, тел. 8(34783) 4-45-30,
- Октябрьский, Чапаев урамы, 16, тел. 8(34767) 6-05-06,
- Сибай, Ленин урамы, 12, 105-се бүлмә, тел. 8(34775) 2-23-82,
- Стәрлетамаҡ, Хоҙайбирҙин урамы, 83, тел. 8(3473) 33-58-29,
- Мәсәғүт, И. Усов урамы, 3, тел. 8(34798) 3-36-63.

***Быйыл башҡорт халыҡ кейеменең тарихи образы буйынса бик күп сифатлы эштәр ҡабул иттек. Урындар билдәләгәндә оҫталар бер-береһенән ярты йәки бер балға ғына ҡалышты.***

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# МИЛЛИ КЕЙЕМ, МИЛЛИ ЙОЛА

## Үҙ асылыбыҙға ҡайтарыр саралар ошолор

**Республика көнөнә арналған байрам сараларының иң сағыуы "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәгендә "Тамға" халыҡ-ара конкурсы еңеүселәрен тәбрикләү булғандыр, моғайын. Өсөнсө тапҡыр үткәрелгән конкурсҡа быйыл беренсегә шулай асыҡ майҙансыҡта йомғаҡ яһалды. Ойоштороусыларҙың был ҡарарын барыһы ла хуплап ҡабул итте. Шулай булмай ни, ҡасан әле баш ҡаланың башҡорт милли кейемдәре менән махсус ҡыҙыҡһынмаған ҡатламы бындай тамашаны күргәне бар ине?**



Конкурсҡа старт июль айында бирелеп, сентябрҙә үткән һайлап алыу турында баһалама ағзалары 300-ҙән ашыу ҡатнашыусының ҡул эштәрен онлайн рәүештә тикшергән. Улар араһынан ни бары иллеһе генә һайлап алынған һәм киләһе һынауға үткән. Ҡатнашыусылар биш номинацияла эштәр тәҡдим иткән. Улар араһынан "Башҡорт халыҡ кейеме - тергеҙеү" номинацияһында Балаҡатай районынан Сәйҙә Әхтәмова һәм Бөрйән районынан Гөлсөм Хөсәйенова беренсе урын алды. "Балалар кейеме - тергеҙеү" буйынса Өфөнән Алһыу Кинйәбаеваның ҡул эше юғары баһаға лайыҡ булды (әйткәндәй, Алһыу Фаил ҡыҙы "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәре). Оҫтабикә конкурсҡа боронғо фотоһүрәткә "йән өрөп", атай һәм ҡыҙ образын сәхнәгә сығарған. "Башҡорт традицион кейеме аксессуарҙары" номинацияһында Өфөнән Гөлнара Вахитова һәм Бөрйәндән Әлфинә Ғәбиҙуллина, "Башҡорт милли ювелир биҙәүестәре"ндә Өфөнән Рөстәм Дәүләтов, ә бына дизайнерҙар араһында ойошторолған "Башҡорттарҙың заманса автор образы" номинацияһында Өфөнән Светлана Ручкина беренсе урын алды. Был номинацияларҙа шулай уҡ икенсе һәм өсөнсө урынға лайыҡ булыусылар ҙа билдәләнде һәм уларҙың барыһына ла аҡсалата приз, иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

Ә бына ярыштың иң юғары наградаһын - Гран-приҙы һәм 300 мең һумға сертификатты баш ҡалала йәшәп ижад итеүсе оҫта Рафаэль Амантаев яуланы. Ул боронғо башҡорт ир-аты кейемен тергеҙгән. "Беҙ йыл һайын тамашасыларҙы ла таң ҡалдырабыҙ, үҙебеҙ ҙә яңы тыуған йүнәлештәргә иҫебеҙ китә. Быйыл "Заманса кейемдәр" номинацияһына стилистарҙың да ҡул эштәрен ҡабул иттек. Ҡатнашыусылар күп булды. Баһалама комиссияһында ла үҙ эшенең оҫталары эшләне, улар араһында Үзбәкстан һәм Ҡырғыҙстан стилистары ла беҙҙең эштәрҙе ҡараны. Беҙ дөрөҫ юҫыҡта үҫешәбеҙ. Быйыл башҡорт халыҡ кейеменең тарихи образы буйынса бик күп сифатлы эштәр ҡабул



иттек. Урындар билдәләгәндә оҫталар бер-береһенән ярты йәки бер балға ғына ҡалышты, шуға "Башҡорт милли кейеме - тергеҙеү" номинацияһында лауреаттар күп. Беҙ был эш ҡиммәтле һәм һиммәтле булыуын аңлайбыҙ, әммә дөрөҫ юл алғанбыҙ. Йылдан-йыл был конкурс киңерәк, ҡеүәтлерәк һәм текәрәк була барыр, тигән ышаныстамын", - тине Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Артур Әлибәков.

"Тамға" конкурсына йомғаҡ яһағанда унда ҡатнашыусыларҙың ғына түгел, саҡырылған ҡунаҡтарҙың да сығыштарын ҡарау мөмкинлеге булды. "Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан дизайнерҙары ла ҡәнәғәт ҡалды. Улар, әлбиттә, беҙҙе "Тамға" конкурсы менән Үҙәк Азияға саҡыра. Беҙҙең дизайнерҙарҙы, оҫтабикәләрҙе Азияның алдынғы дизайнерҙары менән хеҙмәттәшлек иттереү өсөн үҙҙәренә билдәләп тә ҡуйҙылар. Шуға беҙ республикала ғына түгел, дуҫ милләттәр араһында ла ваҡыт һәм быуындар бәйләнешен тергеҙеү йәһәтенән эшләйбеҙ. Киләсәктә сиктәрҙе киңәйтергә хыялланабыҙ", - тип билдәләне конкурстың кураторы Сәлимә Усманова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тамға" халыҡ-ара конкурсы башҡорт халҡының матди мираҫы менән бергә рухи байлығын да тергеҙгән, киләсәк быуындарға һаҡсыл тапшырған оҫталарҙы халыҡ араһынан сүпләп йыйған һәм ғәмгә таныҡтан үҙенсәлекле ярыш. Унда ҡатнашырға теләүселәр һаны бер ҡасан да кәмемәҫ, сөнки беҙҙең ҡул эштәренән йәм табып, күҙҙең яуын алырҙай әйберҙәр тегеүсе, бәйләүсе, сигеүсе оҫтабикәләребеҙ бихисап. Республикала бик әүҙем эшләүсе "Ағинәй" йәмәғәт ойошмалары ағзалары ла әле бындай ҙур конкурста ҡатнашырға ҡыймайсараҡ тора. Ә бит республикала башҡорт милли кейемдәрен һәм биҙәүестәрен тергеҙеү, әлеге көндә иһә һәр ырыуға хас аутентик өлгөләр өҫтөндә эшләүселәр ҙә ошо ағинәйҙәр икәнен һәр кем белә. Тап улар өлгөһөнә эйәреп, күптәр милли кейем тегеүгә, һаҡал, селтәр, яға кеүек биҙәүестәр эшләүгә тотондо, шул рәүешле оҫталарҙың яңы майҙансыҡтары, оҫтаханалары барлыҡҡа килде. Райондарҙағы үҙ эшенә бирелгән, үҙ эшмәкәрлеген ысын профессиональ юҫыҡта алып барған мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ағинәйҙәрҙең энтузиазмын баһалап, уларға мәҙәниәт йорттарында, китапханаларҙа осрашыу, аралашыу шарттары тыуҙырҙы. Ҡатынҡыҙҙарыбыҙ ошо милли кейем, милли кәсеп, милли йолалар аша үҙ асылына ҡайта, тип ышанайыҡ.**

**Камила ҒӘЛИЕВА әҙерләне.**





*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ТӘКӘББЕРҘӘН...

### Тәңре биҙгән

Яҡшы кеше ҡартайһа ла аҡылынан яҙмаҫ, яҡшы ат ҡартайһа ла йөрөшөнән яҙмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Эгоист булыу еңел йәшәү тигәнде аңлатмай әле.

**(Марлен Дитрих).**

Власты алыуға ҡарағанда биреүе күпкә еңелерәк икәнендә бер шик тә юҡ.

**(Уинстон Черчилль).**

Арыҫлан етәкселегендәге һарыҡтар ғәскәре һарыҡ етәкселегендәге арыҫландар ғәскәрен һәр саҡ еңеп сығасаҡ.

**(Наполеон Бонапарт).**

Йәшәйеш - ул тау һымаҡ, аҡрынлап күтәреләһең, тиҙ генә төшөп тә етәһең.

**(Мопассан).**

Үҙ-үҙеңдән: "Эш менән шөғөлләнәмме мин, әллә юҡ-бар менәнме?" тип һорау бер ваҡытта ла һуң түгел.

**(А. Чехов).**

Әгәр ҙә һин теләгәнеңдең барыһын да эшләй алмайһың икән, эшләй алған кәҙәреһен генә телә.

**(Теренций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Минең йәшәгән йортҡа ҡаршы бер оҫтахана урынлашҡан. Мин йыш ҡына урамдағы эскәмйәгә сығып ултырып, йә тәҙрәмдән ҡарап, унда эшләүсе оҫтаның оҫтахананы бикләп, өйөнә ҡайтырға сыҡҡанын ҡараштарым менән оҙатып ҡалам. Шулай күҙәтеп ултыра торғас, уның бер ғәҙәтен шәйләп ҡалдым: был оҫта оҫтахана ишегенең бикләнгәнме, юҡмы икәнен ҡат-ҡат тикшерергә ярата. Ҡайһы саҡта атлап киткән ерҙән ҡабат боролоп килеп, ишекте тартып ҡарай. Бер саҡ эштән ҡайтып килгәндә мин был оҫтаның ҡаршыһына осраным һәм шаярытырға уйлап: "Ишек бигеңде тикшерергә онотманыңмы?" - тинем. "Әлләсе, бикләргә онотманым шикелле. Ә шулай ҙа тағы бер тикшерергә кәрәк", - тине лә был, ҡабат боролоп, оҫтахана ишегендәге йоҙаҡты ҡат-ҡат тартып ҡараны. Был минең өсөн ҡыҙыҡ тойолдо һәм ул осраған һайын мин "Ишегеңде бикләнеңме?" тип шаярта башланым. Әммә ул шаяртҡанды аңламай, гел боролоп барып, ишеген тикшерер булды. Был шаяртыуым хаҡында белеп ҡалған таныш-тоноштар ҙа минең ҡылыҡты ҡабатлай башлағас, оҫта миңә үпкәһен белдерҙе. "Тыңлама һин уларҙы!"- тигән булдым аҡланып. "Нисек тыңламайһың, ти инде, - тине оҫта. - Бәлки, мин ысынлап та оҫтахана ишеген бикләмәгән булһам? Бикләгән һымаҡмын, әммә, кем белә?.."**

**Бына шулай, аҡыл - аҡылдан яҙыуҙың башы, тип бик дөрөҫ әйткәндәр. Аҡыл бер ваҡытта ла бер нәмәгә лә ышанмай, шикләнә, икеләнә, үҙенә генә таянырға тырыша һәм бына шулай сигенән сығып китергә лә мөмкин..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22042

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3540
Заказ - 1332